ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 март (буранай) 2022

№1000

№ 10 (1000)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ил күргәнде күрербеҙ...



5

Асабалыҡ һәр саҡ һаҡланған

Өфө ҡәлғәһе тарихы буйынса тағы бер сығанаҡ



7

Оҙон ғүмерле рубрика



8-10

Мин эсеүемде ташланым...



12-13

ТВ-программа 14

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән - 739 һум 98 тингә ваҡытынан алда яҙылыу бара. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Гәзитебеҙҙең 1000-се һанын ҡулдарығыҙға алаһығыҙ. Егерме йыл эсендә "Киске Өфө"нөң мең номерын уҡығанһығыҙ. Ошо айҡанлы әйтер һүҙегеҙ булырмы?

***Зәкирйән ӘМИНЕВ, философия фәндәре кандидаты:*** "Киске Өфө"нөң 1000-се һаны сыға тип ишеткәс, аптырап киттем: гәзит әле генә сыға башлаған кеүек ине, ҡараһам, меңенсе һанына ла килеп еткәнбеҙ икән. Бик мәслихәт! Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте менән уның ике меңенсеһе лә булһын, өс меңенсеһен дә сығарырға яҙһын, амин! Мин был гәзитте ул сыға башлағандан алып, беренсе һандарынан уҡ яҙылып алдыра башланым һәм уҡып ҡына бармайым, үҙем дә мөмкин тиклем теге йәки был темаға яҙышырға, гәзитебеҙ йөкмәткеһен төрләндереү буйынса үҙ өлөшөмдө индерергә тырышам, сөнки, уҡыусы булараҡ, минең дә әйтер һүҙҙәрем бар. "Киске Өфө"лә үҙемдең күңелемә яҡын темалар табам, уҡып ҡыуанам, ҡайһы саҡта көйәләнеп тә алам.

Гәзит уҡыусы булараҡ, миңә Хәлил Һөйөндөковтың яҙғандары оҡшай. Уның һәр мәҡәләһен рәхәтләнеп, диҡҡәт менән уҡып барам. Үкенескә, үҙе менән күрешергә тура килгәне юҡ, шуға күрә уға гәзит аша сәләмемде ебәреп, һаулыҡ һәм уңыштар теләйем, яңынан-яңы сәхифәләрен көтөп ҡалам. Милләтебеҙ яҙмышына битараф булмаған, уйлана белгән ана шундай авторҙарыбыҙ күберәк булһын ине, тип теләйем гәзитебеҙгә.

Үҙем этнограф булараҡ, ауылдарҙан яҙышыусы авторҙарҙың яҙмаларында халҡыбыҙҙың үткәненә ҡағылышлы күп кенә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр табып ҡыуанам. Башҡорт этнографияһына арналған ғилми мәҡәләләремдә авторҙарын күрһәтеп, уларға һылтанма эшләп, "Киске Өфө"нән алған мәғлүмәттәрҙе йыш ҡына файҙаланам. Райондарҙан яҙған авторҙар мәҡәләләрендә күрһәтелгән урындағы ер-һыу атамалары ҡыҙыҡһындыра мине бигерәк тә. Ундай авторҙар үҙҙәре лә аңғармаҫтан, шулай итеп, ғилем өлкәһенә бик ҙур ярҙам күрһәтә, юғиһә бит, ауылдары тирәһендәге ул атамалар фән өсөн билдәһеҙ тороп ҡалыуы ла ихтимал. Авторҙар ниндәйҙер ваҡиғаны тасуирлағанда үҙҙәренең төбәгендәге ер-һыу атамаларын иҫкә алып китәләр һәм мине шуның менән сикһеҙ ҡыуандыралар. Көтмәгәндә ошо гәзит аша мин үҙемә әллә күпме мәғлүмәт табам.

Гәзиттә шулай уҡ туған телебеҙҙең хәле, уға ҡағылышлы проблемаларҙы күтәреү оҡшай. Мәҫәлән, быйылғы 7-се һанда Ләлә Рафиҡованың "Дөрөҫ һөйләшәйек!" тип саҡырған яҙмаларын уҡып ҡыуандым. Авторҙы телдең бөгөнгө хәле борсой. Телебеҙҙең яҙмышына шулай иғтибарлы булған, халҡыбыҙ киләсәге өсөн борсолоп йәшәгән милләттәштәр күберәк булһын ине, тип теләйем. Төрлө ҡыҙыҡ кешеләр һәм арҙаҡлы шәхестәр менән осраштырған интервьюларҙы рәхәтләнеп уҡып барам. Ҡайһыларын һалып ҡуям да аҙаҡ киренән уҡып алам. Шулай уҡ 5-се биттәге "Халыҡ дауаһы" тигән рубриканан файҙалы дарыу үләндәре тураһындағы мәғлүмәттәрҙе лә ҡыҙыҡһынып уҡып сығам. Ҡайһы бер кәңәштәрҙе файҙаланып та ҡуям. Ғөмүмән, "Киске Өфө" бына егерме йыл инде минең өсөн көтөп алынған гәзиткә әйләнде. Артабан ла телебеҙҙең шундай матурлығын, байлығын һаҡлап, уның һағында уяулыҡ күрһәтеп, гәзит уҡыусыларҙы ҡыуандырып эшләгеҙ. Гәзит оҙон ғүмерле булһын, тигән теләктәмен.



12+

✓ *Кешенең иң ҙур трагедияһы, бар бәләләренең башы - асылынан ситләшеү. Ошо мәхшәрҙе туҡтатыр, халҡыбыҙҙы, бигерәк тә йәштәребеҙҙе тоғро юлға күндерер һүҙ кәрәк халҡыбыҙға.*



*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ*

# УЙЛАНА БЕЛГӘНДӘР ӨСӨН...

**Быйыл, 2022 йылдың 6 ноябрендә, "Киске Өфө"нөң тәүге һаны донъя күреүгә 20 йыл буласаҡ. Әлеге 1000-се һанды әҙерләгәндә баҫманың тәүге йылдарындағы төпләмәләрен барлап, уларҙағы ҡайһы бер фекер-яҙмаларҙы, рубрикаларҙы күҙҙән үткәреп, уҡыусыларыбыҙға ла тәҡдим итмәксе булдыҡ әле.**

Ысынында, йылдар үтеп, заманалар үҙгәреш кисерһә лә, кешеләрҙең йәшәйеш ҡағиҙәләре, традициялары, ҡанундары, донъяға ҡарашы, үҙ-ара мөнәсәбәттәре, уйҙары, ынтылыштары ул ҡәҙәре үҙгәреп тә бармай икән. Үҙебеҙҙең башҡорт халҡын әйтәм: һаман шул бер зан, бер хәстәр, бер уй, "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ", тигән маҡсатты алға һөрөү - ошо торош, йәшәйеш беҙҙе һаҡлайҙыр ҙа әле. Баҫылғандарға кире ҡайтып, гәзит биттәрен аҡтарғанда был бик мөһим һәм ҙур тема ошо егерме йыл буйы гәзитебеҙ биттәренән төшмәгән икән, тигән ҡарарға киленә.

Ысынында, беҙҙең ошо 20 йыл эсендәге ижадты сиҙәм аҡтарыу менән сағыштырырға булыр ине. Яңы баҫма яңыса ижад итергә тейеш, тигән хәҡиҡәтте бик ныҡ һанлап, уны төп ҡағиҙәбеҙ итеп алып, матбуғат майҙанында үҙебеҙҙең ҡабатланмаҫ, үҙенсәлекле эҙебеҙҙе һалырға тырышҡанбыҙ һәм шулай эшләүҙе дауам итәбеҙ. Уҡыусыларға мәғлүмәт биреп кенә ҡалма, ә мәғлүмәттең төбөнә "ҡом һалып", анализлап, уның һутын һығып сығарып, йомғаҡлап, һәр кемде уйландырырлыҡ, аңын ҡуҙғытырлыҡ, ҡанын ҡайнатырлыҡ, сәмен уятырлыҡ, аҡылын һәм һәләтен эшкә егерлек "емгә" әйләндер - быныһы редакциялағы һәр хәбәрсе алдына ҡуйылған төүмаҡсат. Кемдәр гәзитебеҙҙә яҙылғандарҙың ошо тәьҫирен күтәрә ала - беҙҙе уҡый, кем күтәрә алмай - башҡа баҫманы үҙ итә. Нисек кенә булмаһын, еңел мәғлүмәткә өйрәнгәндәр өсөн түгел беҙҙең баҫма. Теләһә ниндәй криминаль хәлдәр, ғәйбәттәр, имеш-мимеш хәбәрҙәр менән мауыҡҡандар өсөн дә түгел гәзитебеҙ. Аҡылын күңел төпкөлөнә йәшереп, ғәмен, дәртен ойотҡандар ҙа уҡый алмаҫ уны. Уйлана белгәндәр өсөн ул "Киске Өфө".

Ижад майҙанында еңеллек эҙләмәнек һәм эҙләмәйбеҙ, уҡыусыларыбыҙға ла еңел-елпе хәбәрҙәр менән күңел донъяларын сүпләргә кәңәш итмәйбеҙ. Беҙҙе бөгөн тормош шундай һынау алдына килтереп ҡуйҙы: әллә ҡайҙа ситкә тайпылып китеп барабыҙ. Насар ғәҙәттәргә эйәреп, упҡынға табан атлайбыҙ. Заман шауҡымына эйәреп, милләтебеҙҙән, асылыбыҙҙан, тамырҙарыбыҙҙан ситләшәбеҙ, хатта ата-әсә өгөтөн һанламайбыҙ. Кешенең иң ҙур трагедияһы, бар бәләләренең башы - асылынан ситләшеү. Ошо мәхшәрҙе туҡтатыр, халҡыбыҙҙы, бигерәк тә йәштәребеҙҙе тоғро юлға күндерер һүҙ кәрәк халҡыбыҙға. Аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр, Зәйнулла ишан һымаҡ дин әһелдәренең һүҙе. Ә туған телдәге баҫмалар журналистары зыялыларыбыҙҙың ошондай һүҙҙәрен ынйы бөртөгөләй йыйып, уларҙы бер епкә теҙергә тейеш. Ошо аҫыл һүҙ ҡомартҡыһын күҙенә элгәндәр, иманына ҡайтҡандар ғына ҡотолор заман һынауҙарынан. Иманына ҡайтҡандар ғына ахырызаман мәхшәренән имен ҡалыр. Бына ниндәй оло бурыс йөкмәтелгән милли баҫмаларыбыҙ иңенә. Беҙ, "Киске Өфө" гәзите коллективы, ошо яуаплылыҡты тойоп эшләйбеҙ. Шуға ла матбуғат майҙанында сиҙәм аҡтарып, үҙ юлыбыҙҙы һалдыҡ, һалабыҙ...

Әйткәндәй, уҡыусыларыбыҙ араһында ошо егерме йыл буйы баҫмабыҙҙан айырылмаған кешеләр барлығын беләбеҙ. Уларҙан хәбәр-хаттар көтәбеҙ. Ысынлап та уларҙың йөрәген ҡуҙғытыр, рухын уятыр һүҙ әйтә алдымы "Киске Өфө"? Әллә беҙҙең был изге телөгебеҙ маҡсатына өлгәшә алманымы? Тәнҡит һүҙен дә ҡабул итәбеҙ, сөнки башҡорт матбуғаты журналисы үҙенең бурысын аныҡ күҙаллай алырға тейеш. Бының өсөн, әлбиттә, уҡыусыһының фекере бик мөһим.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА,**
**"Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Гәзитебеҙҙең 1000-се һанын ҡулдарығыҙға алаһығыҙ. Егерме йыл эсендә "Киске Өфө"нөң мең номерын уҡығанһығыҙ. Ошо айҡанлы әйтер һүҙегеҙ булырмы?

***Мөхәррәм БАЙЫШЕВ, Әбйәлил районы Ишбулды ауылы:*** "Киске Өфө" гәзите ойошторолоуға быйыл ике тиҫтә йыл да булып киткән икән шул. Ошо йылдар буйына уның мең һаны донъя күреп, үҙенең уҡыусыларын ҡыуандырҙы; рухыбыҙҙы, белем һәм зауыҡ кимәлебеҙҙе байытты; яңынан-яңы мәғлүмәттәр еткереп, донъя, ил, республика хәлдәре менән таныштырып торҙо һәм, шөкөр, бөгөнгө көндә лә ошо эшен дауам итә. Рәхмәт гәзитебеҙгә! Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы тарихында тәү тапҡыр туған телебеҙҙә ҡала гәзитенең сыға башлауы бөтөн башҡорт донъяһы өсөн ҙур һәм һөйөнөслө ваҡиға булды. Уның тәүге һанын ҡулына алып, ул саҡтағы Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов үҙе гәзиткә фатихаһын бирҙе һәм гәзит уҡыусыларҙы, башҡорт йәмәғәтселеген ҡотлап, редакция коллективына уңыштар теләне.

Меңенсе һан... Әйтеүе генә еңел һәм тиҙ, ә егерме йыл буйына көн һайын 16 биттән торған аҙналыҡты уҡыусы күңеленә үтеп инерҙәй мәҡәләләр менән тултырыу һәм әҙерләп сығарыу, шул арала киләһе һандар өсөн "үтемле" материалдар туплау, авторҙар менән эшләү, шағир һүҙҙәре менән әйткәндә, һуралыр ҙа, айһай, електе... Һәм былар бөтәһе лә редакцияла эшләүсе баш мөхәррирҙең һәм аҙ ғына һанлы журналистарҙың ныҡышмалы хеҙмәт һөҙөмтәһе. Ошо хеҙмәттең тос ҡына өлөшө тәүге һандан алып гәзитте етәкләүсе тынғыһыҙ, һәр ваҡыт яңы идея һәм темалар, уй-ниәттәр менән янып, башкөлләй ошо ижад донъяһында йәшәүсе, коллективты рухландырыусы баш мөхәррир Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева иңенә төшә, әлбиттә. Киләсәктә лә ошо гәзиттең матур коллективына яңынан-яңы артылыштар, һөйөнөслө хәбәрҙәр менән уҡыусыларын киндәндереп эшләргә яҙһын, тип теләйем.

Шәхсән үҙем гәзиттә электән хеҙмәттәшлек иткән Әхмәр Үтәбай, Радик Өмөтҡужин, тарих темаһын яҡтыртыусы Арыҫлан Таймасовтың материалдарын яратып уҡыйым. Әйткәндәй, ижадтары менән гәзитебеҙ теле һәм стиленең үҙенә тап килеп кенә торған авторҙар ҙа байтаҡ: отставкалағы хәрби табип Хәлил Һөйөндөков, бер төркөм ғалимдар - биолог-профессорҙар Әғләм Шәрипов менән Сәфәрғәли Йәнтүрин, этнограф Зәкирйән Әминев, филолог Гөлсәсәк Саламатова, йәмәғәт эшмәкәре, журналистика ветераны Сәйфулла Әмиров, һынлы сәнғәт ветераны Фәүзиә Яхина, шулай уҡ республикабыҙҙың төрлө райондарынан матур-матур хәбәрҙәре менән ҡыуандырыусы ағинәйҙәр Рәшиҙә Ғиззәтуллина, Мәрзиә Солтанбаева, Шәһүрә Әхмәҙиева, Зөбәйҙә Ҡәләмова һәм башҡа бик күптәрҙең мәҡәләләре лә ҡыҙыҡһыныу менән бер тынала уҡыла, рәхмәт уларға!

"Киске Өфө" гәзите донъя күргән 2002 йылда, хәтерләһәгеҙ, Бөтөн донъя башҡорттарының II Ҡоролтайы булып үткәйне. Унда, шулай уҡ унан һуңғы башҡа Ҡоролтайҙарҙа ла башҡорт халҡының сәйәси, социаль-иҡтисади, мәҙәни һәм конституцион хоҡуҡтарын яҡлау һәм ғәмәлгә ашырыу, туған телебеҙҙе, мәҙәни мираҫыбыҙҙы һаҡлау, үҫтереү һәм байытыу мәсьәләләре ҡарала килә. "Киске Өфө" гәзите ана шул Ҡоролтайҙар ҡарарҙарына нигеҙләнеп, халҡыбыҙҙың рухиәтен күтәреү һәм байытыу, туған телебеҙҙе һаҡлау йүнәлешендә эҙмә-эҙлекле эшләүсе матбуғат баҫмаһы ул. Мине бик борсоған мәсьәлә хаҡында ла әйтеп китмәй булмай, ул да булһа, гәзиткә яҙылыусыларҙың йылдан-йыл кәмей барыуы. Нимә был? Битарафлыҡмы әллә хәйерселек касафатымы? Халҡыбыҙҙың тормош кимәле шул тиклем дә ҡыҙғаныс хәлгә төштөмө ни? Әллә, киреһенсә, донъя ҡыуып, рухи хазиналарыбыҙҙы юғалтабыҙмы? Гәзитебеҙ биттәрендә ошо темаға һөйләшеү ойошторғанда, сәбәбе аңлашылыр ине, бәлки...

*АҪЫЛ ИРҘӘР ҺҮҘ БАШЛАЙ*

# КӨНСӨЛЛӨКТӘН АРЫНАЙЫҠ!

Көнсөллөк, башҡа кешенең уңыштарына ҡыуана белмәү кеүек кире сифаттар уғата борсой мине. Беҙ сит-яттарға ҡарата киң күңеллебеҙ. Улар йортобоҙға килһә, өрмәгән ергә ултыртмайбыҙ, мул табын ҡорабыҙ, яҡты йөҙ күрһәтәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙекеләргә артыҡ талапсанбыҙ, түҙемһеҙбеҙ. Хатта туғандарыбыҙҙың, күршеләребеҙҙең уңышына ҡарап шатланыу урынына, ҡара көйәбеҙ. Балаларыбыҙҙы кескәй сағынан: "Ана, күршенең һыйыры игеҙ быҙаулаған, бейәһе ҡолонлаған, малайы институтҡа уҡырға ингән, ҡыҙы диплом алып ҡайтҡан, яңы машина алғандар, ҡайһылай һәйбәт булған, инеп ҡотларға кәрәк!" - тип өйрәтеп-күрһәтеп үҫтерһәк, был кире күренеш булмаҫ та ине донъяла. Бар нәмә тәрбиәнән тора.

Беҙ бер-беребеҙҙе йәлләй, күңелебеҙҙе үҫтерә, дәртләндерә белмәйбеҙ. "Башҡорт башҡорттоң башын ашай" тигән һүҙҙе йыш ҡабатларға яратабыҙ. Был дөрөҫ түгел. Сөнки мин рустар, татарҙар, йәһүдтәр менән бик йыш аралашам һәм уларҙа ла был күренештең киң таралыуына шаһитмын. Бер-беребеҙҙе күрә алмау - ул бөтә Рәсәй, хатта бар донъя халыҡтарына хас күренеш, оло бәлә. Шуға күрә, был һүҙҙәрҙе онотайыҡ та, киреһенсә, бер-беребеҙҙе дәртләндереп, ҡанатландырып йәшәргә өйрәнәйек, туғандар.

**Сәфәрғәли Йәнтүрин,**
**биология фәндәре докторы, профессор.**
*(№7, 2005 йыл).*

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Федерацияһы Оборона министрлығының Әлкә-2 ауылындағы элекке хәрби часы биләмәһендә "Патриот" хәрби-патриотик парк төҙөлөшө барышы менән танышты. "Әлегә бөтә эштәр график буйынса бара, әммә башҡараһы эштәр күп әле. 1 июндә бында 200 курсанттан торған тәүге төркөм килергә тейеш. Парктың төп бурысы һәм концепцияһы йәштәрҙе хәрби-патриотик рухта тәрбиәләүҙән тыш, бында ғаилә менән килеп, ял итеүгә, хәрби техниканы ҡарауға, "Геройҙар лигаһы"нда ҡатнашыуға, спорт менән шөғөлләнеүгә лә ҡайтып ҡала", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

✓Башҡортостанда ковид-сирлеләр өсөн койкаларҙы кәметеү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Атап әйткәндә, Өфөлә Дим дауаханаһы һәм 8-се дауахана ғәҙәти эш режимына күсә, шулай уҡ Күмертау, Салауат ҡалаларындағы ковид-госпиталдәр ябыла. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин һүҙҙәренсә, һуңғы тәүлектә Башҡортостанда 3009 кешелә коронавирус асыҡланған. Пандемия башланғандан алып республикала бөтәһе 256 мең кеше яңы коронавирус инфекцияһы йоҡторған. "Әле 263 пациент стационарҙа дауалана, уларҙың 28-е интенсив терапия бүлексәләрендә", - тип хәбәр итте министр.

✓Сибайҙа 2 июндән 4-нә тиклем "Урал арьяғы - 2022" Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы була. 9 мартта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Бында Ҡаҙағстандан, Әзербайжандан, Белорустан һәм башҡа илдәрҙән рәсми делегациялар килә. Форумда Рәсәй Финанс министрлығының Ғилми-тикшеренеү финанс институты менән берлектә әҙерләнгән Урал арьяғын инфраструктура йәһәтенән үҫтереү программаһы менән таныштыралар.

✓Хөкүмәт федераль һәм төбәк кимәлендә һалым түләү ваҡытын оҙайта. Рәсәй Федерацияһы премьер-министры Михаил Мишустин билдәләүенсә, хөкүмәт һалымдар өлкәһендә оператив үҙгәрештәр хоҡуғына эйә, шулар араһында - уларҙы түләү ваҡытын оҙайтыу. Рәсәй субъекттары дәүләт власының юғары органдарына ла төбәк һәм урындағы һалымдарға ҡарата ошондай вәкәләттәр бирелә. Яңы тәртип йыл дауамында ғәмәлдә була. "Уны тиҙ арала бизнесҡа һәм граждандарға ярҙам итеүгә йүнәлтелгән ҡарарҙар ҡабул итеү мөмкинлеге булһын өсөн индерәбеҙ", - тип билдәләне Хөкүмәт рәйесе.

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?** ***Гәзитебеҙҙең 1000-се һанын ҡулдарығыҙға алаһығыҙ. Егерме йыл эсендә "Киске Өфө"нөң мең номерын уҡығанһығыҙ. Ошо айҡанлы әйтер һүҙегеҙ булырмы?***

***Мәхмүзә ИСЛАМҒОЛОВА, Баймаҡ районы Ярат ауылы ағинәйе:*** "Киске Өфө"нө ул сыға башлағандан алып уҡыйым. Был гәзит тәүге һанынан уҡ үҙенең башҡа гәзиттәргә оҡшамаған булыуы менән йәлеп итте мине, сөнки ошоға тиклем сығып килгән гәзиттәрҙең рәсми теленә һәм күнегелгән ҡорораҡ йөкмәткеһенә өйрәнеп тә бөткәйнек бит инде. Ә "Киске Өфө" уҡыусыһын бөтөнләй яңы донъяға әйҙәй ине: ул заманда ла әле халҡыбыҙ рухиәте һәм тарихындағы билдәһеҙ булып килгән мәғлүмәттәрҙе бирә башлауы, асыҡтан-асыҡ яҙылып, әйтелеп бөтмәгән ҡатламды күтәреүе, яңы һәм һәр йәһәттән хәбәрҙар авторҙар - тарихсылар, фән әһелдәре, төрлө өлкәләрҙә эшләүсе белгестәргә, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренә һүҙ биреләүе, улар менән бер тынала йотлоғоп уҡыла торған мауыҡтырғыс әңгәмәләре тамам күңелде яуланы. Эйе, заманына күрә тап ана шундай ихлас, асыҡтан-асыҡ һөйләшеү, туранан-тура әйтеп яҙылған материалдар кәрәк ине лә ул. Артабан да ошо рәүешле эҙмә-эҙлелеккә тоғро булып ҡалды гәзитебеҙ.

Дөрөҫ, ҡайһы берәүҙәр гәзиттең исеме менән бәйле, ул фәҡәт баш ҡалабыҙҙа ғына тарала икән, тип уйлай ине. Ауылыбыҙҙағы ана шундай кешеләргә "Киске Өфө"нөң бөтөн республикабыҙҙа таралыуын аңлатырға, ҡыҙыҡлы материалдарҙың йөкмәткеләрен һөйләргә, ғөмүмән, ныҡ ҡына эшләргә тура килде. Һөҙөмтәлә "Киске Өфө" башҡа ауылдаштарымдың да яратҡан гәзитенә әүерелде, аҙаҡ улар менән осрашырға тура килгәндә рәхмәттәрен әйтеп китерҙәр ине. Ләкин быны мин рәхмәт өсөн дә, редакцияның иғтибары, бүләктәре өсөн дә түгел, ә туған телебеҙ яҙмышы өсөн гәзит кенә түгел, уның уҡыусылары ла борсолһон, гәзиткә яҙылып, ана шул туған телебеҙҙе йәшәтеүгә, үҫтереүгә, киләсәк быуындарға тапшырыуға өлөш индерһендәр, данлы тарихыбыҙ, милләтебеҙҙең арҙаҡлы улдары-ҡыҙҙары хаҡында улар ҙа белһен, ғорурланһын ине, тигән маҡсатты ҡуйҙым һәр саҡ.

Ата-әсәһенә, ҡартаталары-өләсәләренә ҡарап, балалары, ейән-ейәнсәрҙәре лә гәзит уҡыуҙы яҡшы ғәҙәт итеп алһын ине тигән теләк йөрөтә мине ологайған көнөмдә. Юғиһә, хәҙер балаларҙың телефон, компьютер экранына теклəп ултырыуҙан башҡа һөнәре лә, ҡыҙыҡһыныуҙары ла юҡ бит. Үҙебеҙҙең туған телебеҙҙә сыҡҡан бөтөн гәзиттәргә, шул иҫәптән район гәзитенә лә бер тигеҙ ҡараштамын. "Йәшлек" гәзитен таратыштым, әле бына киләһе йыл 100 йыллығын билдәләргә йыйыныусы "Ағиҙел" журналына яҙылыуҙы ойошторол йөрөнөм, тик, үкенескә, сирләп, дауаханаға инеп кителде. Шәбәйеп сығырға насип булып, ауылдаштарым араһында матбуғат таратыуҙы артабан дауам итергә яҙһын.

Бәғзе берәү, бөгөн әҙәмдә гәзит ҡайғыһы юҡ, тип тә уйлайҙыр, ләкин улар яңылыша: тап бөгөн кәрәк гәзит-журнал беҙгә, сөнки интернет хәбәрҙәрендә бөгөн ил һәм халыҡ-ара хәлдәр хаҡында дөрөҫ булмаған мәғлүмәттәр күп, тиҙәр. Унан һуң санкция арҡаһында электрон саралар ҙың тоторҡло эшләүенә ышаныс та юҡ, ә гәзиттәребеҙ - һәр саҡ беҙҙең менән. Шөкөр, "Киске Өфө" лә, башҡа баҫмаларыбыҙ журналистары ла заман ауырлыҡтарына бирешмәй, гәзит-журнал сығарыуҙарын дауам итә, тик бына күпселек милләттәштәребеҙҙең гәзит уҡыуҙан баш тартыуын, тимәк, телебеҙ яҙмышына битарафлығын ҡабул итә алмайым. 700 тәңкә аҡсамы инде, уйлап ҡарағанда: бөгөнгө хаҡтар менән - 10 кило шәкәр хаҡы... Шәкәр һаулыҡҡа зыян ғына, ә гәзиттәребеҙ рух сәләмәтлеге бөркә, ваҡ-төйәктән арындырып, стресс һәм күңел төшөнкөлөгөнән ҡотҡара.

Әйткәндәй, башлап йөрөүсе йәшерәк һәм дәртлерәк берәребеҙ тотоноп, "Киске Өфө" гәзитендә "Башҡорт матбуғаты дуҫтары" тигән ҡор ойоштороп ебәргәндә һәм күңелде өйкәп торған мәсьәләләр йә булмаһа, шатлыҡ-һөйөнөстәребеҙ менән уртаҡлашып, серләшеп, бер-беребеҙгә кәңәштәр менән ярҙамлашып йәшәгәндә, беҙгә ҡыйынлыҡтарҙы бергәләп артылыу күпкә еңелләшер ине, тип уйлайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

# КӘМҺЕНМӘЙЕКСЕ ӘЛЕ

Тарихи романдарҙы уҡый башлайым да, аҙағына етә алмайым. Уларҙа, асылда, милләтебеҙ иҙелгән, ҡыйратылған, телһеҙ, ирек өсөн баш күтәреп тә, аҙаҡ еңелгән итеп һүрәтләнә. Эйе, беҙҙең атай-олатайҙар азатлыҡ өсөн күтәрелеп, ҡанын ҡойған, әммә бөгөн килеп, ниңә шуны ҡабат-ҡабат тылҡырға? Халҡыбыҙҙың рухын, күңелен күтәрә торған әҙәби әҫәрҙәр ҡасан яҙылыр икән? Күңелдең бит әкиәткә лә ышанғыһы килә. Был тәңгәлдә Аҫылғужа Баһумановтың "Салауаттың йәше" тарихи романында халҡыбыҙ лайыҡлы һүрәтләнгән, тип уйлайым.

Мин үҙем иҫ киткес сауҙагәрҙәр тоҡомонан булмаһам да, хәлләләр, ғорурҙар затынанмын. Ҡартатайымдың өйөр-өйөр йылҡыһы булған, ул заманда өс баш атың булыу ярлылыҡ билдәһе һаналған.

Беҙгә кисекмәҫтән үҙ-үҙебеҙҙе кәмһетеүҙән туҡтарға кәрәк. Башланған эште аҙағынаса еткерә алмау - беҙҙең ҙур кәмселек сифатыбыҙ. Кемдер берәү яҡшы ғына башланған эшен ташлай ҙа: "Эй, беҙҙең башҡорттоң шул инде ул", - тип, үҙенең кәмселеген милләткә йәбештермәксе. Шулай анһат ҡотолмаҡсы. Милләт тигән төшөнсә барыһын да күтәрә инде, йәнәһе.

Бер-беребеҙҙе кәмһетеүҙән дә арынырға ваҡыт. Кемдер берәү уңышҡа өлгәшһә, шундуҡ ек күрәбеҙ: "Эй, ул бит урлап байыған, ана, ағаһы бар, шул ярҙам итмәһә...", - тип көнләшәбеҙ.

Аллаға шөкөр, һуңғы йылдарҙа эсмәгән, матур ғына күтәрелеп килгән йәштәребеҙ күбәйҙе. Яҙыҡ юлға баҫҡан ағайҙарыбыҙ ҙа, хатаһын аңлап, төҙ баҫып китте. Йырсы - йыры, ҡурайсы - ҡурайы, шағир - һүҙе, эшҡыуар - аҡсаһы менән бер-беребеҙҙе күтәреп, дәртләндереп йәшәйек, тим, йәмәғәт.

**Зыя ХӘЛИЛОВ,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**
*(№6, 2005 йыл).*

## БЫНАҒАЙЫШ!

# ҮҘҘӘРЕ ҠОРҒАН ТОҘАҠҠА...

**Рәсәйгә ҡаршы иғлан ителгән санкциялар, нигеҙҙә, Европа илдәре иңенә ятасаҡ, тигән фекерҙә халыҡ-ара күҙәтеүселәрҙең күпселеге. Вашингтон уларҙы күрәләтә шундай "яҙмышҡа" дусар итә, ти улар. Хәйер, Рәсәйҙән энергетика ресурстары сығарыуҙы тыйып, АҠШ президенты Байден илдә яғыулыҡ хаҡтарының киҫкен үрләйәсәген яҡшы аңлай. Эмбаргоға тиклем үк әле илдә бензин хаҡының галлоны урыны менән 4 - 7 долларға үрләне. Был энергетика көрсөгөнә килтереп кенә ҡалмаясаҡ, ә аҙыҡ-түлек баҙарында ла инфляция тыуҙырасаҡ. "АҠШ-ҡа был санкциялар ғәйәт ҙур финанс юғалтыуҙар килтерәсәк",- тип яҙа урындағы мәғлүмәт саралары. Ә бит Америкаға импортланыусы бөтөн нефть һәм нефть продукттарының 8 процентынан күберәген Рәсәй энергоресурстары тәшкил итеүен иҫләһәк, санкциялар ысынлап та ике башлы таяҡ булмаҡсы. Ә бына Европа илдәрен ни көтә һуң?**

АҠШ властары, мәғлүм булыуынса, Европа берләшмәһе илдәренә лә Рәсәй нефтен индереүҙе ҡәтғи тыйҙы. АҠШ-тың "еңел ҡулынан" алып өйрәнгән Евроберләшмә илдәре лә оҙаҡ көттөрмәне, улар миҫалына Бөйөк Британия, Канада, Австралия, Япония, Сингапур, Көньяҡ Корея кеүек илдәр ҙә эйәрҙе. Өҫтәүенә, был илдәр рәсәйҙәр өсөн үҙ сиктәрен шарт ябып, хатта һауа киңлектәрен дә күҙгә күренмәҫ кәртәләр менән уратып алғас, тәүге эйфория тойғоһо тарала төшкәндәй булды, ахыры: санкция уларҙың үҙҙәренә ни бирәсәк һуң? Сәйәси "уйындар" тәрәнгәрәк тәгәрәй түгелме? Халыҡ-ара күҙәтеүселәр фекеренсә, пандемия афәтенән нығынып өлгөрмәгән Европа халҡын, мәҫәлән, иң тәүҙә бензин хаҡының ике евроғаса күтәрелеүе һиҫкәндергәндер. Евросоюз өсөн икенсе ҙур проблема - металға, шул иҫәптән IT технология һәм, ғөмүмән, теләһә ниндәй индустрия тармағы өсөн кәрәкле палладий иретмәһенә ҡытлыҡ янауы. Унан ҡала бөртөклө ашлыҡ һәм иң мөһиме - бойҙайға хаҡтар артыуы. Шул ыңғайҙа Рәсәйҙән сығарылыусы минераль ашламалар хаҡында ла күп һүҙ барҙы. Унһыҙ урындарҙағы фермерҙар юғары уңышҡа өмөт итә алмаясаҡ. Шулай итеп, Рәсәйҙең арт һабағын уҡытабыҙ тип, үҙҙәре ултырған ботаҡҡа ла сапмаҡсы түгелме санкция инициаторҙары?

Рәсәйҙең энергетика ресурстарынан баш тартыу Көнбайыштың, шул иҫәптән, тап ошо ресурстарға бәйлелеге көслө булған, әммә дөйөм самаһыҙлыҡҡа эйәреп, "Северный поток-2" проектын тоҡтарларға мәжбүр булған Германияның хәле бер ҙә көнләшерлек түгелдер: әлеге таяҡтың икенсе башы уларға тос ҡундырасаҡ, әлбиттә. Шуны уйлаптыр, ахыры, Германия канцлеры Шольц Рәсәй энергетика ресурстарын санкциянан азат итеүе хаҡында хәбәр итте. Был ҡарарға уны, күрәһең, илдә газдың мең кубометры 3700 долларға барып баҫыуы мәжбүр итте, ә был элеккегә ҡарағанда 15 тапҡырға ҡиммәтерәк. Ғөмүмән, Европаның Рәсәй газына бәйлелеге 30-40 процент тәшкил итә. Бына һиңә - санкция! Финляндия ла ике ут араһында яна: санкция был илдең экспорт компаниялары эшенә ҙур зыян килтерәсәге көн кеүек асыҡ. Һорауҙар үткәрелгән 20 компанияның 80 проценты ошондай фекерҙә. Әйткәндәй, уларҙың 78 проценты Рәсәй менән хеҙмәттәшлек итә, ә 22 проценты өсөн Рәсәй баҙары төп эшмәкәрлек "яланы" иҫәпләнә.

Ошо ығы-зығыла Францияның да ике йөҙлөгә әйләнеүе мәҙәк тойола. Эйе, был ил дә Евросоюз санкцияларына ҡушыла һәм хуплай, икенсе яҡтан, президент Макрон ил компанияларын Рәсәй бизнесынан баш тартырға ашыҡмаҫҡа саҡыра. Франция президенты был осраҡта Европала Кремль менән диалогҡа барыусы берҙән-бер лидер иҫәпләнә, ти эксперттар. Ни хәл итһен инде, был аңлашыла: Францияла тиҙҙән һайлауҙар! Нимә генә тимә, санкциялары менән үҙҙәре ҡорған тоҙаҡҡа эләгеүсе илдәр етәкселәренең сәбәләнеүен дыуамаллыҡ йә аҡылһыҙлыҡ тимәй, нимә тиһең инде!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Луганск Халыҡ Республикаһына Башҡортостандан Красный Луч ҡалаһында йәшәүселәр өсөн гуманитар йөк килде. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов етәкселегендәге легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы тап ошо ҡала эргәһендә фашистарға ҡаршы һуғышҡан. Башҡортостан делегацияһы баш командующийҙың һәләк булған урынына барып, туғандар ҡәберлегенә сәскәләр һалды.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә республика етәксеһе Радий Хәбиров муниципалитет башлыҡтарына Украинала махсус операция барышында һәләк булғандарҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеүгә ҡағылышлы йөкләмә бирҙе. "Беҙҙән өс кешенең ғүмере өҙөлдө. Алдан һөйләшкәнсә, ғаиләгә махсус иғтибар бүлергә. Бала аяҡҡа баҫҡансы, ярҙам итергә кәрәк", - тине Башҡортостан Башлығы.

✓Башҡортостанда 2022 йылдың 1 ғинуарына пенсияның уртаса күләме 16 399 һум тәшкил иткән (2021 йылдың ғинуарында иһә 15 256 һум булған), тип белдерҙе республика статистиктары. Ошо ваҡыт эсендә республикала пенсионерҙар 1,175 миллиондан 1,149 миллион кешегә тиклем кәмегән. Башҡортостанда хаҡлы ялдағыларҙың күпселеге йәки яҡынса 1,051 миллион кешегә страховка пенсияһы түләнә. Быйыл 1 ғинуарға уның уртаса күләме 16 942 һумдан ашҡан. Дәүләт пенсия тәьминәте буйынса пенсия алыусылар күпкә аҙыраҡ - 99 мең самаһы кеше. Уларҙың уртаса пенсия күләме йыл башына 10 617 һум тәшкил иткән, тип белдерҙеләр Башстатта.

✓Ошо көндәрҙә Башҡортостанға үҫмерҙәр өсөн 950 доза "Спутник М" вакцинаһының яңы партияһы килә. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин һүҙҙәренсә, бөгөнгә 12-18 йәшлек 2 376 үҫмер коронавирусҡа ҡаршы вакцинацияны тулыһынса тамамлаған. Ковидҡа ҡаршы прививка яһатырға теләүсе өлкәндәрҙең 99,9 проценты вакцинаның беренсе компонентын алған (2 481 689 кеше), ә 2 341 909 кеше ике компонентын да яһатҡан, тине Максим Забелин.

✓Coca-Cola һәм PepsiCo компаниялары Рәсәй биләмәһендә эшмәкәрлектәрен туҡтатыу тураһында белдерҙе. PepsiCo компанияһы Рәсәйҙәге 20 000 хеҙмәткәрен, шулай уҡ 40 000 ауыл хужалығы тармағы эшсеһен ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫбыҙ, тип белдерҙе. McDonald's корпорацияһының генераль директоры Крис Кемпчински ҙа Рәсәйҙәге 850 тиҙ туҡланыу рестораны эшмәкәрлеген ваҡытлыса туҡтатыу тураһында белдерҙе.

✓ **Башҡортостанда балалы ғаиләләр 20 төр пособие ала. Шуның 11-е - төбәк, 9-ы - Федераль бюджет иҫәбенән. Йыл һайын республикала 70 мең тирәһе балалы ғаилә түләү алыуға мөрәжәғәт итә.**



ҠЫҪҠАСА

# ШӘКӘР ТИРӘЛӘЙ...

✓ **Башҡортостандың сауҙа министры Алексей Гусев магазиндарҙа шәкәр һатыуға бәйле хәлде аңлатты.** "Рәсәйҙең аҙыҡ-түлек етештереүсе байтаҡ предприятиеһы быға тиклем шәкәрҙе сит ил етештереүселәренән һатып алды. Хәҙер уларҙың ундай мөмкинлеге юҡ. Шуға күрә үҙҙәренең һатып алыу географияһын эске баҙарға йүнәлтте һәм шуның менән бергә шәкәргә һорау тыуҙырҙы. Был, үҙ сиратында, уның хаҡы артыуға килтерҙе. Тағы бер фактор - халыҡ тарафынан да һорау барлыҡҡа килде. Сауҙа селтәрҙәре билдәләүенсә, шәкәргә һорау һуңғы көндәрҙә бер нисә тапҡырға артты", - тине министр һәр ошо арала етештереүселәр, дистрибьютерҙар менән осрашыуҙар үтеүе, уларҙың һатып алған шәкәр күләмен арттырырға вәғәҙә итеүе хаҡында белдерҙе. Ул шулай уҡ баҙарҙа килеп тыуған хәл менән файҙаланып ҡалырға, унан файҙа күрергә тырышҡан намыҫһыҙҙарҙың булыуын да билдәләп үтте. Ундайҙар менән Федераль монополияға ҡаршы хеҙмәттең БР буйынса идаралығы менән берлектә эш алып барыласаҡ. Ведомствоның республика идаралығында ошо мәсьәләләргә ҡағылышлы +7(347) 216-53-78 (эш көнөндә һәм сәғәттәрендә) телефоны буйынса "ҡыҙыу линия" ойошторолған.

✓ **РФ Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володин: "Санкцияға һылтанып, хаҡтарҙы арттырыу тыйыла", тине.** Уның әйтеүенсә, хаҡ артыуға ҡағылышлы мөрәжәғәт күп. Уларҙың күбеһе ҡайһы бер төбәктәрҙә аҙыҡ-түлектең ике тапҡырға ҡыйбатланыуына бәйле. Шулай уҡ балалар аҙыҡтары, подгузниктар, дарыуҙарға хаҡ артҡан. "Бөтәһе лә беҙҙең илгә ҡарата индерелгән сикләү саралары шарттарында ҡайһы бер тауарҙарға хаҡ өҫтәлерен аңлай. Мәҫәлән, валюта курсы артыуы йәки тауарҙы сит илдәрҙән килтереү мәшәҡәттәренә бәйле. Әммә Рәсәйҙә етештерелгән һәм ҡулланылған продукцияға, санкцияға һылтанып, яһалма рәүештә хаҡтарҙы артырыу ярамай. Булған мәғлүмәттәргә ярашлы, тауарҙарҙың тейешле запасы бар, дефицит юҡ. Был осраҡта хаҡтарҙы күтәреү нигеҙһеҙ. Кешеләр иҫәбенә байыу тыйыла, уның өсөн яза бирергә кәрәк. Депутаттар менән федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһында фекер алыштыҡ. Закон проектын шулай уҡ РФ Хөкүмәте менән тикшерәсәкбеҙ һәм өҫтөнлөклө тәртиптә ҡараясаҡбыҙ. Ҡарар беҙҙең граждандарҙы хаҡтар артыуынан һаҡларға булышлыҡ итәсәк", - тине Вячеслав Володин.

✓ **Инсулин етештереүселәр Рәсәй баҙарында үҙ эшен дауам итәсәген яҙма рәүештә раҫланы.** Рәсәй инсулинын етештереү һәм әйләнешкә индереү йәһәтенән дә эш план буйынса дауам итәсәк. Шуға күрә I типтағы шәкәр диабеты менән ауырыған пациенттарҙы дарыу менән тәьмин итеү мәсьәләһендә хәүефләнергә урын юҡ, тинеләр Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығында. Инсулинға мохтаж пациенттарҙың бөтәһе лә врач рецебы буйынса препаратты бушлай алырға мөмкин. Был мәсьәлә өҫтөнлөклө иҫәпләнә һәм Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының даими контролендә. Мониторинглау мәғлүмәте буйынса Новорапид, Фиасп, Хумалог кеүек сит илдең билдәле препараттары етештереүселәрҙең Рәсәйҙәге келәттәрендә, дарыухана селтәрҙәрендә бөгөн 2021 йылда килтерелгән дөйөм күләмгә тура килә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАЛАЛЫ ҒАИЛӘЛӘРГӘ



**Башҡортостанда 8-ҙән 16 йәшкә тиклемге балаларға 2022 йылдың майынан пособие түләй башлаясаҡтар. Балалы ғаиләләргә был ярҙам сараһы тураһында 8 мартта Владимир Путин хәбәр итте.**

"Беҙ яңы ҡарар ҡабул итергә - 8-16 йәшлек балаларға, атап әйткәндә, аҙ килемле бөтә ғаиләләр өсөн түләүҙәр билдәләргә, уларға ярҙам итергә тейешбеҙ. Был сара 1 апрелдән ғәмәлгә индереләә, аҡса майҙа түләнә башлай", - тине дәүләт башлығы.

Яңы түләүҙе алыу шарттары 3-тән 7 йәшкә тиклемге балаларға бирелгән пособиены юллағандағы кеүек буласаҡ. Ул Башҡортостанда балаға йәшәү минимумынан 50, 75 йәки 100 процент күләмендә тәғәйенләнә. Ғаиләнең мөлкәте иҫәпкә алына, шулай уҡ "нулле килем" ҡағиҙәһе лә эшләй. Алгоритм түбәндәгесә: әгәр йәшәү минимумының 50 проценты күләмендә тәғәйенләнергә тейеш булһа (5339,5 һум), ғаиләнең уртаса килеме йән башына йәшәү минимумынан кәм икән, ул саҡта балаға пособие төбәктәге йәшәү минимумының 75 проценты күләмендә тәғәйенләнә (8009,25 һум). Әгәр йәшәү минимумының 75 проценты күләмендә тәғәйенләнһә (8009,25 һум), ғаиләнең уртаса килеме йән башына йәшәү минимумынан кәм икән, ул саҡта балаға пособие төбәктәге йәшәү минимумының 100 проценты күләмендә тәғәйенләнә (10679 һум).

Башҡортостанда балалы ғаиләләр 20 төр пособие ала. Шуның 11-е - төбәк, 9-ы - Федераль бюджет иҫәбенән. Йыл һайын республикала 70 мең тирәһе балалы ғаилә түләү алыуға мөрәжәғәт итә. Мәҫәлән, 3-тән 7 йәшкә тиклем балаларға тәғәйенләнгән пособиены 67987 ғаилә ала, уларҙа 79519 бала тәрбиәләнә. Хәҙерге ваҡытта илдә йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға һәм ете йәшкә тиклемге балалар тәрбиәләгән аҙ килемле ғаиләләргә лә айлыҡ дәүләт ярҙамы күрһәтелә.

# ИМТИХАНДАР...



**Февралдә республикала дәүләт йомғаҡлау аттестацияһында ҡатнашыуға ғариза ҡабул итеү тамамланды.**

Быйыл БДИ тапшырыусылар һаны - 17 545 кеше. Шуның 16 357-һе - быйылғы сығарылыш уҡыусылары, 1033-ө - элекке сығарылыштыҡылар, 147-һе - колледж студенттары, 10-һы - 10-сы класс уҡыусыһы, 3-һө - үткән йылда дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын тапшырмағандар, 1-һе - сит ил гражданы. "Республикала БДИ төрөндә үткәрелгән дәүләт йомғаҡлау аттестацияһына әҙерлектең һөҙөмтәле системаһы булдырылған. Имтихан һөҙөмтәләре законға ярашлы һәм БДИ-ның асыҡлығын раҫлай", - ти Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин. Былтырғы кеүек 11-се кластар урта дөйөм белем тураһында аттестат алыу өсөн урыҫ телен һәм математиканан тапшырырға тейеш. Математиканы йә база, йә профилле кимәлдәге имтиханды һайларға мөмкин. Быйыл йәмғиәт белеме иң популяр, уны уҡыусыларҙың 37,3 проценты һайлаған. Шулай уҡ информатика һәм мәғлүмәт-коммуникатив технологиялар - 23 процент, биология - 20,3 процент, физика - 19,7 процент, химия - 17,9 процент, тарих - 12,3 процент. БДИ-ның төп тулҡыны - быйыл 26 майҙан 2 июлгә тиклем.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: 2021 йылда Башҡортостан Башлығы Указына ярашлы, 100 балл йыйған һәм республика юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән, донъя кимәлендәге Евразия фәнни-мәғариф үҙәгендә ҡатнашҡан 32 уҡыусы 150 мең һум күләмендә премия алды. Шулай уҡ республикала дөйөм белем биреү учреждениелары уҡытыусыларына ла премия түләнә.

# ДАРЫУҘАРҒА ҠЫТЛЫҠ ЮҠ!



**Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы дәүләт дарыуханаларындағы дарыуҙар запасы хаҡында белдерҙе.**

Һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Ирина Кононова һүҙҙәренсә, республикала дарыуҙарға ҡытлыҡ юҡ. Медицина учреждениеларында кәрәкле дарыуҙар запасы булдырылған, дарыуҙарҙы аптека селтәрҙәренә тейәп оҙатыу менән өҙөклөктәр юҡ. "Башфармация" селтәренең дәүләт аптекаларында төрлө тәғәйенләнештәге препараттар менән тәьмин итеүҙә өҙөклөктәр юҡ. Граждандарҙың льготалы категорияһы өсөн дарыуҙар һатып алыу элекке режимда бара", - тине министр урынбаҫары. Ведомствола белдереүҙәренсә, бөгөн илебеҙ дарыуханаларында һатылған препараттарҙың 60 проценты - илебеҙҙеке. Бөтә донъяла етештерелгән дарыуҙарҙың субстанцияларын Һиндостанда йәки Ҡытайҙа эшләйҙәр. Шуға күрә санкциялар препарат етештереүгә йоғонто яһамаясаҡ.

# АЙНЫТҠЫСТАР ТЕРГЕҘЕЛӘ

**Башҡортостанда дәүләт һәм муниципаль айнытҡыстар системаһы тергеҙелә.**

Тейешле закон проекты Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитеты тарафынан хуплау тапты. "Айнытҡыстарҙы тергеҙергә кәрәк, ләкин шул уҡ ваҡытта уларҙың коммерция кибетенә әүерелеүенә юл ҡуймау мөһим. Улар төп маҡсатҡа - кешеләрҙең ғүмерен һәм һаулығын һаҡлауға, хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеүгә хеҙмәт итергә тейеш. Элек быңдай тәжрибә киң таралғайны. Йыл һайын илдә 2,5-5 миллион граждан эске эштәр органдары системаһының медицина айнытҡыстарына ябыла ине. Хәҙер Рәсәйҙә йылына 50 меңдән ашыу кеше эскелектән һәләк була. Күпселеге эшкә һәләтле йәштә. Уларҙың 8-10 меңе туңып үлә. Быңдай кешеләрҙе айнығанға тиклем изоляциялау ғүмерҙәрҙе һаҡлап ҡалыр", - тине Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Айнытҡыстар республиканың 2022 йылға һәм 2021-2024 йылдарға һалынған бюджет аҡсаһына финанслана.

# ҮҘМӘШҒҮЛДӘРГӘ...



**2022 йылда Башҡортостанда үҙмәшғүлдәр өсөн дәүләт милкен ҡуртымға алыуҙа ташламалар буласаҡ.**

Әлегә тиклем быңдай ташламалы ҡуртым бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгәндәргә генә тәғәйенләнгәйне. Ҡуртымға алыуҙың беренсе йылында дөйөм хаҡтан 40 процент, икенсе йылында - 60 һәм өсөнсө йылында 80 процент ташлама менән файҙаланырға мөмкин. Ер һәм милек мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары Артур Аманабаев белдереүенсә, үҙмәшғүллек һәм эшҡыуарлыҡ менән булғандарға ярҙам беҙҙең ведомствоның иң мөһим аспекттарының береһе. Сөнки эшҡыуарлыҡ - ул яңы эш урындары, республиканың иҡтисады яҡшырыуы һәм төбәктең инвестицион йәһәттән ылыҡтырғыс булыуы. Шулай уҡ ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан үҙмәшғүлдәргә, эшҡыуарҙарға һәм социаль йүнәлештәге коммерция нигеҙендә эшләмәгән ойошмаларға ярҙам итеү йәһәтенән дәүләт милке менән ҡулланған өсөн ҡуртым хаҡын иҫәпләү 0,01-гә тигеҙ ташламалы коэффициент менән һаналасаҡ.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓9 мартта Өфөгә Беларусь спортсылары килде. Улар биатлон буйынса Рәсәй кубогының һуңғы этабында һәм Рәсәй чемпионатында ҡатнаша. Биатлон буйынса Донъя кубогы этабының бронза призёры Дмитрий Лазовский әйтеүенсә, ул Башҡортостанда тәүге тапҡыр, уның төп бурысы - сифатлы биатлон күрһәтеү. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй кубогының һуңғы туғыҙынсы этабы һәм биатлон буйынса Рәсәй чемпионаты ярыштары 10-17 мартта "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексында ойоштороla.

✓16 мартта Өфөлә Рәсәй Президентының ҡабул итеү бүлмәһендә республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы вәкилдәре халыҡтан шылтыратыуҙар ҡабул итә. Белгестәргә дарыуҙар менән тәьмин итеү, ололар өсөн медицина учреждениелары эшмәкәрлеген координациялау мәсьәләләренә бәйле һорауҙар бирергә мөмкин. Тура бәйләнеш телефоны: 8(347)229-74-76, 8(347)229-74-58. Иртәнге сәғәт 10-дан 12-гә тиклем шылтыратырға була.

✓Yum! Brands Рәсәйҙә KFC ресторандарының операцияларын туҡтата һәм үҙенең төп франшиза алыусы менән Pizza Hut рестораңдарының эшмәкәрлеген туҡтатыу тураһында килешеү әҙерләй. Дөйөм алғанда, илебеҙҙә меңгә яҡын KFC тиҙ хеҙмәтләндереү рестораны һәм 50 Pizza Hut пиццерияһы иҫәпләнә. 2022 йылдың башына Башҡортостанда 19 KFC рестораны булған. Бынан алда "Макдоналдс" компанияһы үҙ рестораңдарының эшен туҡтатырға хәл итеүе тураһында белдергәйне. Республикабыҙҙа ғына ошондай 12 ресторан бар.

✓Башҡортостанда санкциялар һөҙөмтәһендә ябылған "Макдоналдс" һәм KFC рестораңдарына алмаш бар. "Инвестиция сәғәте"ндә күрһәтелгән компанияларҙың береһе "Макдоналдс"ты ла, KFC-ҙы ла алмаштырыуы ихтимал. Үҙебеҙҙең сеймалдан продукция етештергән компанияларға ихтыяж арта. Ошо баҙарҙы тулыһынса ҡаплай алабыҙ. Бында проблемалар юҡ", - тип белдерҙе Башҡортостан вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәттә уҙған кәңәшмәлә.

✓Өфөнөң "Планета" сауҙа-күңел асыу үҙәгендә 12 магазиндың эше туҡтатылды. Шулай итеп, "Планета"ла H&M, MANGO, Monki, Pull&Bear, ZARA, Bershka, Massimo Dutti, Oysho, Stradivarius, Women's Secret, Puma, SEPHORA ябылды. Күп кенә брендтарҙың магазиндары урынлашҡан "Мега" сауҙа үҙәгендә лә шундай уҡ хәл.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*КӨНАУАЗ*

# ИЛ КҮРГӘНДЕ КҮРЕРБЕҘ...

**Бөгөнгө сәйәси ареналағы хәл-торош халыҡты иҡтисади йәһәттән дә шаңҡыта, күп һорауҙар тыуҙыра. Ошо хәлдәргә баһа биреүен һәм киләсәкте фаразлауын һорап, иҡтисад фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының Стратегик тикшеренеүҙәр институты дәүләт автономиялы фәнни учреждениеһының Граждандар инициативаһын өйрәнеү үҙәгенең өлкән фәнни хеҙмәткәре Азамат БАРЛЫБАЕВҡа мөрәжәғәт иттек.**



**➔ Рәсәйҙә, күпме инҡар итергә тырышһаҡ та, бай һәм ярлы ҡатлам бар. Бөгөн донъялағы хәл-торош бигерәк тә минималь хеҙмәт хаҡына эшләп йөрөгән халыҡҡа йоғонто яһай, сөнки санкциялар арҡаһында сауҙа нөктәләрендә бар нәмәгә хаҡтар артыуы күҙәтелә. Белгес күҙлегенән ниндәй баһа бирәһегеҙ?**

- Яҡын киләсәктә, инфляция үсешен иҫәпкә алып, бюджет өлкәһендә эшләүселәрҙең эш хаҡы һәм пенсионерҙарҙың пенсияһы индексацияланыуы ихтимал. Бөгөн Рәсәйгә төрлө илдәр ҡулланған санкциялар һөҙөмтәһендә инфляция 10-15 процент арауығында фаразлана һәм был, ысынлап та, халыҡтың тормош кимәле түбәнәйеүгә килтерәсәк. Әммә шуны әйтеп тынысландыра алам: илгә дефолт, йәғни аҡсаның осһоҙланыуы янамай, шуға күрә дәүләт үҙенә алған социаль йөкләмәләрҙе тулыһынса үтәйәсәк.

**➔ Интернет селтәрендә, банктар хеҙмәтләндереүҙе туҡтата, халыҡтың өҙөп-йолҡоп йыйған аҡсаһы "туңдырыла", тигән хәбәрҙәр тарала. Ысынлап та, ҡайһы бер банктарҙың хеҙмәте менән ҡулланыусылар иҫәптәрҙең ябылыуын белдерә. Шул уҡ ваҡытта, мәҫәлән, Һаҡлыҡ банкыһы, ғәҙәти режимда эшләүен дауам итә. Был мәсьәләгә лә асыҡлыҡ индерһәгеҙ ине: банктар халыҡ алдындағы бурыстарын теүәл үтәрме, әллә төрлө хәлгә әҙер булырға, аҡсаларҙы "быяла банкаларға" күсерергә кәрәкме?**

- Рәсәй санкцияларға иҡтисади йәһәттән дә, инфраструктура йәһәтенән дә күптән әҙерләнә килде, резерв тупланы. Банк системаһы ла һуңғы йылдарҙа ныҡытылды һәм әлеге ваҡытта тотороҡло эшләй. Граждандарҙың банктарҙағы һаҡлыҡ аҡсаһы (вклад) 1 миллион 400 мең һумға тиклем һаҡлыҡ аҡсаларҙы страховкалау буйынса агентлыҡта страховкалана һәм банктар, киреһенсә, вкладтарға ставкаларҙы күтәрҙе. Был финанс учреждениеларында аҡсаларын алырға теләүселәрҙән бигерәк, юғары ставкалар буйынса вклад асырға теләүселәрҙән оҙон сират барлыҡҡа килтерҙе. Шуға халыҡ араһында паника юҡ тиер инем. Ә инде аҡсаларҙы ҡайҙа һаҡларға тигәндә, уларҙы өйҙә "ойоҡта" йәки "банкала" тотоуҙың мәғәнәһен күрмәйем, сөнки инфляция уларҙың ғәмәлдәге хаҡын "ашай".

**➔ Мәғлүм булыуынса һәм әле әйтеп китеүегеҙсә, Үҙәк банк төп ставканы 9,5 проценттан 20 процентҡа күтәрҙе. Был ниндәй маҡсаттан сығып эшләнде һәм, ғәҙәттә, халыҡтың үҙ ярымы - пенсиялар артһа, хаҡтар артыуын көт тә тор, тигәндәй, ставка күтәрелеү менән улар хәҙер кредит ставкаларының артыуын фаразлай...**

- Иҡтисади мәсьәләләр буйынса кәңәшмәлә ил Президенты Владимир Путин аныҡ бурыс ҡуйҙы - кредит килешеүҙәрендә күрһәтелгән барлыҡ кредит ставкаларының һаҡланыуын тәьмин итергә. Йәғни быға тиклем алынған ипотека кредиттары буйынса процент ставкалары шул килеш ҡаласаҡ. Үҙәк банк ставканы инфляцияны туҡтатыу, кредитлау күләмен түбәнәйтеү һәм баҙарҙа ығы-зығы тыуҙырмау өсөн күтәрҙе. Иҡтисади шаңҡыу шарттарында Үҙәк банк шундай ғәмәлдәр башҡара һәм был улар өсөн ғәҙәти күренеш.

**➔ Рәсәй элек-электән бай һәм үҙенүҙе тәьмин итә алырлыҡ ил булды һәм шулай тип һаналды ла. Әммә һуңғы ваҡытта Европа һәр осраҡта санкциялар менән ҡурҡытырға һәм санкциялар менән быуып алырға тырыша. Бындай янауҙың нигеҙе бармы, әллә Рәсәй бөгөн дә үҙен-үҙе тәьмин итерлек ҡеүәткә эйәме?**

- Санкциялар мәңге түгел. Әлеге ваҡытта Рәсәй сит ил тауарҙарына түгел, киреһенсә, Европа Рәсәй газына һәм нефтенә бәйле. Хатта ҡасан да булһа сит илдәр беҙҙең газдан баш тартһа ла, уға альтернатива таба алмаясаҡ. Тимәк, уларҙың производстводары тиҙ арала банкротҡа әйләнеп, һатылырға мәжбүр буласаҡ. Ә ул мәсьәлә ҡабырғаһы менән тора: үҙаллылыҡ ҡалдығын юғалтырғамы, әллә санкцияларҙан баш тартырғамы? Йәғни Көнбайыш илдәре иғлан иткән санкциялар Америка капиталы ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә йүнәлтелгән.

Икенсе яҡтан, Рәсәй күптән инде ауыл хужалығы тармағында сит илдән индерелгән продукцияны йәлап ҡына ватан етештереүсеһе продукцияһы менән алмаштырыу сәйәсәтен алып бара. Нигеҙҙә, беҙ үҙебеҙҙе ауыл хужалығы продукцияһы менән тулыһынса тәьмин итәбеҙ. Санкциялар, валюта курсының түбәнәйеүе, киреһенсә, ватан продукцияһының дөғөүселек һәләтен арттырыуға булышлыҡ итәсәк. Шуға күрә, азыҡ-түлеккә әллә ни ҡытлыҡ булмаясаҡ. Илдең ҡулланыусылар баҙары ғәҙәти режимда эшләй, етерлек тауар запасы тупланған. Әгәр магазинда йәки дарыуханаларҙа нимәләр юҡ икән, халыҡ үҙе имеш-мимешкә ышанып, кәштәләрҙә нимә бар, барыһын да һыпырып ала һәм үҙе ялған ҡытлыҡ тыуҙыра. Әммә улар складта юҡ тигәнде аңлатмай, бары тик әлегә уны килтереп, ҡабул итеп, урынлаштырып өлгөрмәйҙәр.

**➔ Ил халҡы ҡалала ла, ауылда ла лайыҡлы йәшәһен өсөн эш хаҡтары ниндәй кимәлдә булырға тейеш һәм был кимәлгә ҡасан етәсәкбеҙ?**

- Рәсәйҙә эш хаҡы түбән булыуының бер нисә сәбәбе бар - түбән хеҙмәт етештереүсәнлеге, инфляцияның юғары һәм предприятиелар өсөн кредит ставкаларының ҙур булыуы, бюджетҡа ҡарамаған фондтарға (Пенсия фонды, ФОМС, ФСС) ҙур күләмдә аҡса күсереү. Юғары эш хаҡы хеҙмәт етештереүсәнлеге юғары булғанда, бюджетҡа ҡарамаған фондтарға мотлаҡ түләүҙәр күләме кәметелгәндә һәм иҡтисад тотош үҫкәндә генә мөмкин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн халыҡ араһында фекерҙәр айырмалығын күҙәтергә мөмкин. Йәштәр бер төрлө уйлаһа, оло быуындың уйы һәм теләге бер генә: ил күргәнде күрербеҙ, һуғыш ҡына булмаһын! Артыҡ һүҙ кәрәкмәй ҙә...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ҠУЛАҠСА...

**Рәсәй Банкы быйыл 9 марттан 9 сентябргә тиклем валюталағы һаҡламдарынан йәки граждандарҙың иҫәптәренән аҡса биреүҙең яңы тәртибен билдәләй.**

Клиенттарҙың иҫәптәге йәки һаҡламдағы валютаһы һаҡланып ҡала һәм һаҡлам валютаһында иҫәпләнә. Кеше 10 мең АҠШ доллары күләмендәге валютаны ҡулаҡса итеп, ҡалғанын тәғәйен көнгә баҙар курсы буйынса һумдарҙа алыу мөмкинлегенә эйә. Шуныһы мөһим: илебеҙгә долларҙы индереү санкциялар менән сикләнә. Банктар тарафынан сит ил валютаһын ҡулаҡса рәүешендә һатыу менән бәйле махсус сараларҙың берҙән-бер сәбәбе ошо. Һумдағы һаҡламдарға һәм иҫәптәргә санкциялар бер ниндәй ҙә йоғонто яһамай. Иҫәптәге аҡса һаҡлана, һәр төрлө операциялар барыһы өсөн дә асыҡ. Рәсәй банктарында валюталағы иҫәптәрҙең 90 проценты тиерлек 10 мең АҠШ долларынан артмай, йәғни ошондай һаҡлам йәки иҫәп хужаларының 90 проценты аҡсаһын валютала ҡулаҡса итеп алыу мөмкинлегенә эйә. Ошо ваҡытлыса тәртип ғәмәлдә булған осорҙа валюта, иҫәп валютаһы ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, АҠШ долларында бирелә. Башҡа валюталарҙың АҠШ долларына конвертацияһы тәғәйен көнгә баҙар курсы буйынса башҡарыла. Валютаны банк кассаһында алырға була. Граждандар үҙҙәренең аҡсаһын валюталағы һаҡламдарҙа йәки иҫәптәрҙә һаҡлауын дауам итә ала. Барлыҡ аҡса иҫәп йәки һаҡлам асылған валютала һаҡлана һәм иҫәпләнә. Һаҡлам йәки иҫәп буйынса шарттар ҙа үҙгәрмәй. Һаҡламдар буйынса процент һаҡлам асылған валютала иҫәпләнә. Граждандар валюталағы яңы һаҡламдар һәм иҫәптәр аса ала, ләкин ваҡытлыса тәртип ғәмәлдә булған осорҙа уларҙағы аҡсаны тәғәйен көнгә баҙар курсы буйынса һумдарҙа ғына алырға мөмкин. Был осорҙа банктар граждандарға валютаны ҡулаҡса рәүешендә һатмай. Ҡулаҡса валютаны теләгән ваҡытта һәм күләмдә һумға алмаштырырға була. Валюталағы һаҡламдарынан йәки иҫәптәренән аҡсаһын бөтә банктарҙың клиенттары ла алыу мөмкинлегенә эйә. Банктарға аныҡ бүлексәгә ҡулаҡса валютаны тейешле күләмдә алып килеү өсөн бер нисә көн кәрәк булыуы ихтимал.

Әйткәндәй, Visa һәм Mastercard халыҡ-ара түләү системалары 10 марттан Рәсәйҙә эшләүҙән туҡтай. Был хәлгә Башҡортостандың Милли банкы (Рәсәй банкы филиалы) идарасыһы Марат Кашапов аңлатма бирҙе.

"Ошо системаларҙың Рәсәй банктарында сығарылған карталары илебеҙҙә нормаль режимда эшләй, ләкин сит илдәрҙә һәм уларҙың онлайн-магазиндарында, шулай уҡ ApplePay һәм GooglePay сервистары эшләүҙән туҡтай. Рәсәйҙә Visa һәм Mastercard карталары ғәмәлдә булыу ваҡыты тамамланғансы эшләй. Улар менән тауарҙар һәм хеҙмәттәр өсөн түләргә, картаға аҡса һалырға, банкоматтарҙан ҡулаҡса алырға, картанан картаға аҡса күсерергә мөмкин. Күп банктар был карталарҙың ғәмәлдә булыу ваҡытын оҙайтыуы хаҡында белдерҙе. Бынан һуң банктар үҙҙәренең клиенттары өсөн "Мир" карталарын сығара. Ғәмәлдә булыу ваҡыты тамамланмаған Visa һәм Mastercard карталарын ябырға һәм уларҙың урынына "Мир" карталарын сығарырға кәрәкмәй. "Мир" картаһы менән халыҡ-ара түләү системалары картаһындағы кеүек үк операцияларҙы башҡарырға мөмкин. Был картаға смартфон ярҙамында түләү өсөн MirPay сервисын да тоташтырырға була", - тип кәңәш бирҙе финансист.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тубыҡтар һыҙлаһа

❖ 2 ҡалаҡ кипкән гәрсис һәм үҫемлек майын ҡушып болғатып, пар өҫтөндә тотоп йылытырға. Килеп сыҡҡан ҡатышманы полиэтиленға һөртөп, тубыҡҡа ябырға һәм йылы яулыҡ менән урарға. Түҙгән тиклем тоторға. Ошо рәүешле 2 тапҡыр дауаланһаң, һыҙланыу юҡҡа сыға.

❖ Беше тауарҙан ике ойоҡ тегергә һәм төнгөлөккә шуны кейеп, табан аҫтына, бот тирәләй ҡайын япраҡтарын тығып тултырырға. Ойоҡто өҫтән ныҡ тарттырмай ғына бау менән бәйләп, йоҡларға ятырға. Тубыҡтар һыҙлағанда 5-10 тапҡыр ошолай дауаланыу яҡшы ярҙам итә.

❖ Бәпембә сәскәһен 1 литр итеп йыйып, өҫтөнә араҡы ҡойорға һәм 10 көн төнәтергә. Төнәтмәне һыҙлаған быуындарға көн һайын ыуырға.

❖ Бәпембә тамырын йыуырға, ваҡ ҡына итеп турарға һәм 1 литр һауытты тултырып һалырға, өҫтөнә сыҡҡансы араҡы ҡойорға. Төнәтмә бер аҙнанан әҙер була, уның менән һыҙлаған урынды ыуырға. Бәпембә сәскәһе һәм тамырынан әҙерләнгән был төнәтмәләр тубыҡ һыҙлауын да, веналар ауыртыуын да бөтөрә.

### Бөйөр

❖ Бөйөр сирҙәрен дауалағанда цикорий яҡшы ярҙам итә. 2 ҡалаҡ ваҡланған цикорий үләненә (сәскәләре менән) ярты литр ҡайнар һыу ҡройоп, талғын уттав йәки боҫта 10 минут тоторға. Шунан һыуынғансы төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Иҫкәрмә: ашҡаҙан һәм бөйән яҙваһы, нервы ярһыуы, гастрит булғандарға цикорийҙы ҡулланыу ярамаҫҡа мөмкин. Цикорий тамырынан яһалған эсемлектәр ҡан тамырҙарын киңәйтә һәм ҡан баҫымын күтәрә.

❖ 1 ҡалаҡ һарыгүҙ (золототысячник), 1 ҡалаҡ еҫле һырмауыҡ (ясменник душистый), 2 ҡалаҡ айыу ҡолағы (коровяк скипетровидный), 2 ҡалаҡ аҡбаш (лабазник шестилепестной) үләндәрен ҡушырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. 1/3 стаканлап көнөнә биш тапҡырға тиклем эсергә ярай.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Өйҙөң таҙа яртыһын йәки ҡунаҡ бүлмәһен йыһазлағанда етеш йәшәгәндәр үҙенсәлекле формалағы эскәмйә, ултырғыс, буфеттар һатып алған. XIX быуаттың беренсе яртыһында уҡ ағас эше яҡшы үҫешә башлай. Оҫтаханаларҙа өҫтәл, ултырғыс, бүкән, көштә, шкаф, һандыҡ эшләгәндәр. Бөрө өйәҙе һәм Урал алды зонаһы (Өфө һәм Стәрлетамаҡ өйәҙҙәре) халҡы мебель етештергән. Бигерәк тә Вятка һәм Пермь губерналарынан күсеп ултырған урыҫтар мебелде оҫта эшләүҙәре менән дан тотҡан. Уларҙың ҡул эштәре башҡорт ауылдарына ла йыш барып эләккән. Үҙе белгәнсә һырлап, йәки хатта формаһын үҙгәртеп бик күп нәмәне эшләү оҫталығына төшөнә алырлыҡ маһирҙар табылып торған. XX быуаттың беренсе яртыһында башҡорт ағас оҫталары эшләгән йорт йыһаздары Башҡортостандың төрлө төбәктәренә киң таралған, әммә төньяҡ-көнсығыш һәм көнсығыш-Урал аръяғы райондарында, Ағиҙел аръяғының урта тирәһендә һәм завод ҡасабалары һәм приискылар эргәһендә - урыҫтар менән тығыҙ аралашып йәшәгән төбәктәрҙә - айырыуса йыш осраған.

Төньяҡ-көнсығышта (Балаҡатай районында һәм Силәбе менән Свердловск өлкәләренең яҡын урынлашҡан территорияларында) урыҫтар йоғонтоһонда башҡорт өйөнөң алғы мөйөшөндә өҫтәл һәм эскәмйәләр барлыҡҡа килә. Тәҙрә төбөнә арты семәрле киң һәм оҙон һике - буй һике, диван - урынлаштырылған. Өҫтөнә ҡулдан һуғылған тар балаҫ йәйгәндәр. Эскәмйә артының өҫкө яғын тулҡын рәүешендәге төрлө биҙәктәр менән семәрләгәндәр, ә аҫтараҡ, ике арҡыры таҡта араһына һырлап ҡырҡылған бәләкәй таҡталар йәки станокта ҡырҡылған матур таяуҙар ҡуйғандар.

Стена буйына ҡуйыла торған ыҡсым дивандар Арғаяш башҡорттарында ла булған. Был төбәктә оҙондары менән бер рәттә соҡоп эшләнгән биҙәкле киң булмаған артлы ҡыҫҡа эскәмйәләр ҙә осраған. 1934 йыл В.С. Сыромятников Арғаяш кантонында бер аҙ бөгөп эшләнгән таяҡлы һәм ҡыҫҡа арты (спинка) төбөнөң урта тирәһенә уйып индерелгән эскәмйәне һүрәткә төшөрөп алған. Эскәмйә артының йөҙлөгәндә өс ярым ҡояш һырланған. Ҡояш нурҙары махсус тырнаҡ ҡасау ярҙамында уртала осрашҡан ҡыҫҡа ғына уйымдар рәүешендә эшләнгән.



Һырлы эскәмйә.
В.С. Сыромятников альбомынан. БХМ архивы

Башҡорт ауылдарында ултырғыс бик оҙаҡ ваҡыт кәрәк булмаған. Урындыҡ һәм эскәмйәләр генә ҡулланғандар, аҙаҡ бүкәндәр эшләй башлағандар. Ултырғыстар зиннәтле, ҡала көнкүреше атрибуты булараҡ ҡабул ителгән. Шулай ҙа беҙ башҡорт өйҙәрендә ҡулдан эшләнгән һәм бик үҙенсәлекле ултырғыстарҙы йыш осратһаҡ. Хужалар уларҙы ҡәҙерләп тота, кем, ҡасан эшләгәнен хәтерләй ине. Ҡайһылары боронғо ҡиммәтле нәмә итеп иҫәпләйҙәр. Ғәҙәттә, былдай ултырғыс бәрәү генә була торғайны. Хатта оҫта ике ултырғыс эшләһә лә, улар һиҙелерлек айырылып тора торған булған, әйберҙе "тиражлау"ға юл ҡуйылмаған.

**Светлана ШИТОВА.**
"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.

ИШАРА

# КЕШЕ ХАҠЫ АШАМА, тығылырһың



**Мин ун алты йыл буйы "Балалар ижады" йортонда педагог булып эшләнем. "Керамика" түңәрәге ойоштороп, балаларҙы балсыҡтан төрлө уйынсыҡтар, кескәй йәнлек һындары әүәләргә өйрәттем. Ул уйынсыҡтар кипкәс, муфель мейестәрендә яндырып, һыуытабыҙ ҙа, сағыу төҫтәргә буяп, тиҙ кибә торған лактар менән ҡаплап, аҙна һайын тигәндәй балаларҙың атай-әсәйҙәренә, туғандарына бүләк итәбеҙ.**

Был түңәрәккә бик күп балалар ылығып китте. Хатта уларҙың ҡайһы берҙәре оҫталыҡта минән дә уҙҙыра инеләр. Ул балалар үҙҙәренән кесерәктәргә ярҙам итәләр. Мин балаларҙың эш урындарын матур, уңайлы итеп ойоштороп, теманы аңлатып бирәм дә: "Балалар, ҡулдарығыҙ уйнап торһа, ҡолаҡтарығыҙ тыңлап торһон", - тип, йә башҡорт халыҡ әкиәттәрен уҡыйым, йә фәһемле тормош мәҙәктәрен һөйләйем, йә үҙҙәренән өй йәнлектәренең мәҙәктәрен һөйләтәм. Ҡайһы саҡта: "Балалар, һеҙҙең бер ҡурҡыныс тыңлағығыҙ киләме?" - тип һорайым. Уларҙың күҙҙәре ялтырап китә: "Килә! Килә!" - тип ҡысҡырышалар. Шуны аңлай алмайым: нинә балалар, ҡурҡһалар ҙа, ҡурҡыныс нәмә тыңларға теләйҙәр икән? "Юҡ, һөйләмәгеҙ", - тип, берәһе лә әйтмәй (Әлбиттә, мин уларға ныҡ ҡурҡыныстар һөйләмәй инем, фәһемлеләрен генә һайлай инем). Бына әле лә һеҙгә, "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына: "Бер ҡурҡыныс һәм фәһемле ваҡиға тураһында һөйләйемме?" - тип өндәшәм, теләгәндәр уҡыр, теләмәгәндәр уҡымаҫ.

Фәриҙә исемле рәссам менән йә фарфор, йә кирбес яһай торған заводтарға командировкаға йөрөй инек. Бына тағы бер заказ алып, "Шаҡша" биҫтәһендәге "Аҡ кирбес" заводына, интерьерға ҡуйыла торған декоратив вазалар яһарға йөрөй башланыҡ. Эш урыныбыҙ өйҙәребеҙҙән алыҫ булғас, завод ашханаһына төшкө ашҡа барабыҙ. Менюҙағы "Итле аш" тигән блюдоға аҡса түләһәм дә, аштың ите булмай ҙа ҡуя. Был хәлгә күнегеп тә киткәйнем инде. Бер көн эшкә килһәк, цех мастеры беҙҙең бүлмәгә инде лә, иҫе китеп, бер хәбәр еткерҙе: заводтың ашханаһына икмәк ташыусы шофер тамағына ит тығылып, кухняла уҡ ятып йән биргән.

Хәл былай була: был шофер көн дә килеп, икмәктәрҙе тапшыра ла, туп-тура кухняға йүнәлә икән. Унда бешкән итте турап тороусы ҡыҙыҡай янына килеп, йылмайып, ҡыҙыҡ хәбәрҙәр һөйләгән булып, ит киҫәктәрен һоғонорға әүәҫләнеп алған был. Ит тураусы ҡыҙыҡай: "Ағай, эшселәргә ит аҙ ҡала бит", - тип инәлеп тә ҡарай икән. Ә шофер: "Еткерерһең, вағыраҡ тура", - тип көлөп, ит һоғоноуын белә, туймайынса туктамай икән. Әкиәттәге Мәсекәй әбей тиерһең үҙен. Был юлы ла шул уҡ хәл ҡабатланған. Ит тураусы ҡыҙыҡайҙы баш ашнаҡсы кухняға саҡырған арала шофер ҡомһоҙланып, ҙур киҫәк итте ҡабып ебәргән, тик сәйнәп йота алмаған, ит киҫәге тамағына барып тығылған. "Тиҙ ярҙам" машинаһы килеп етеп өлгөрмәгән...

Бөгөн халыҡ иҫәбенә байыусылар, кеше өлөшөн ҡомһоҙланып һоғоноусылар бихисап булып китте. Кеше өлөшөн һоғоноусылар уҡыр, бәлки, тип яҙҙым был ҡурҡыныс һәм фәһемле ваҡиға тураһында. "Кеше өлөшөн һоғонһаң, кеше өлөшөнә тығылырһың", ти халыҡ мәҡәле.

**Фәүзиә ЯХИНА.**
*(№9, 2008 йыл).*

**Әйткәндәй, Фәүзиә апай Яхина (Усманова), һөнәре буйынса скульптор, гәзитебеҙ сыға башлағандан алып беҙҙең иң әүҙем, иң фекерле авторыбыҙ булды һәм әлегәсә ул үҙенең хаттарынан өҙмәй беҙҙе. Хатта "Фәүзиә апай хаттары" тигән рубрика ла булдырғайныҡ гәзитебеҙҙә һәм унда баҫылған материалдар ике китап булып баҫылып та сыкты. Рәхмәтлебеҙ Фәүзиә апайға, уға һаулыҡ, оҙон ғүмер теләйбеҙ.**

ТОПОНИМИКА СЕРҘӘРЕ

# ЙӨРӘКТАУ, ЙӨРӘКТАШ, ЙӨРӘККҮЛ

**Был мәҡәләлә, хөрмәтле уҡыусылар, һеҙҙең иғтибарығыҙҙы иң элек урыҫ телендәге географик әҙәбиәттә һәм топонимияла Зюраткуль рәүешендә нығынып ҡалған, Көньяҡ Уралда ғәйәт киң билдәле һәм данлыҡлы атаманың килеп сығышы, башҡортса дөрөҫ яҙылышы мәсьәләһенә йүнәлтмәксемен. "Башҡортостан" тигән ҡыҫҡаса энциклопедияның башҡортса баҫмаһын нәшриәткә әҙерләгән ваҡытта нәк ана шул һүҙҙең туған телебеҙҙә дөрөҫ яҙылышын билдәләү өсөн генә лә байтаҡ эҙләнергә тура килә ине. Сөнки үҙ телебеҙҙәге, ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған былдай атамаларҙы хатта үҙебеҙ ҙә яҙа белмәһәк, бик ҙур хилафлыҡ булыр ине.**

Урыҫса Зюраткуль тигәнебеҙ - тарихи башҡорт ерҙәрендә (Силәбе өлкәһенең Һатҡы ҡалаһынан көньяҡ-көнсығышта) тау араларында ятҡан ғәйәт ҙур күл исеме. Шул тирәләге тау һыртын да, картографтар күл исеме менән, Зюраткуль тип атаған. Ә нимә белдерә был атама?

Зюраткуль, тигәндә, "куль" һүҙенең башҡортса "күл" икәнлеге аңлашыла. Ә бына "зюрат" тигән компонентты нисек аңларға? Нәк бына шул мәсьәлә әллә нисәмә имеш-мимешкә сәбәп биргән дә инде. Берәүҙәр уны "ҙур ат", икенселәр "зират, зыярат", ҡайһы берәүҙәр хатта "һүрәт" ("сүрәт") тип аңлатмаҡсы. Был аңлатмаларҙың барыһы ла уйлап сығарылған.

Зюраткуль - ул йөрәк күл, урыҫса "сердце-озеро". Шулай тип билдәләне профессор А.К. Матвеев (Географические названия Урала. Свердловск, 1980. 97-се бит). Иң мөһиме, 1800 йылдағы картала ул урыҫса Зюрак тип күрһәтелгән. Зюраккуль тигәндә иһә урталағы ТК тартынҡыларының ҡушылмаһында Т өнө ассимиляцияға бирелгән. Урыҫ теле өсөн Зюраткуль еңелерәк әйтелешле тойолғандыр, әлбиттә. Һүҙ башындағы Й (ЙУ) өнө, мәҫәлән, Ерекле - Зирекле тибында, З өнөн биргән. Тимәк, Йөрәккүл урыҫ телендә, бер нисә төрлө фонетик үҙгәрештәр аша үтеп, танымаҫлыҡ хәлгә килгән, тиһәк тә була. Өҫтәп шуны ла әйтергә кәрәк: Йөрәккүл, А.К. Матвеев билдәләүенсә, үҙенең формаһы менән йөрәкте хәтерләтеп тора.

Формаһы йөрәккә оҡшап торған атамалар бер Йөрәккүл генә түгел, әлбиттә. Мәҫәлән, Башҡортостанда Йөрәкташ тигән ике тау (Белорет районының Ҡоҙғон-Әхмәр, Бөрйән районының Үрге Нөгөш ауылдары), Бүздәк районында бик матур, йомро ғына булып ҡалҡып торған Йөрәктау тигән тау билдәле. Ә инде Стәрлетамаҡ ҡалаһы янындағы данлыҡлы дүрт шихандың береһе Йөрәктауҙы кем генә белмәй икән. Алыҫтан туп-түңәрәк булып, бөтөн тирә-яҡҡа йәм биреп тора ул. Йөрәктау итәгендә шул уҡ исемле ауыл урынлашҡан. Дөрөҫ, профессор А.Ә. Камалов Йөрәктау атамаһына бүтән төрлө аңлатма бирә: унынса, был атама диалекттағы йүр "ҙур" һәм боронғо ҡыпсаҡ этнонимы Аҡтау һүҙҙәренән яһалған булып сыға (Башҡортсотан Республикаһының топонимдар һүҙлеге. Өфө: Китап, 2002).

А.К. Матвеев манси топонимияһынан шул уҡ "йөрәккүл" һәм "йөрәктау" мәғәнәһендә Синтур-Симтур Симсяхл тигән атамаларҙы миҫал итеп килтерә. Образлылыҡ, метафора, оҡшатыу алымы, тимәк, топонимияла бик киң таралған күренеш.

Нәк ана шул тауҙы, ташты, шулай уҡ күлдең дә формаһын бик тапҡыр итеп йөрәккә оҡшатыу арҡаһында Йөрәкташ, Йөрәктау, Йөрәккүл һымаҡ үҙенсәлекле атамалар барлыҡҡа килгән дә инде.

**Рәшит ШӘКҮР.**
*(№25, 2003 йыл).*

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ, ИМӘНҠАЛА!

# АҪАБАЛЫҠ ҺӘР САҠ ҺАҠЛАНҒАН

## Өфө ҡәлғәһе тарихы буйынса тағы бер сығанаҡ

**XIX быуаттың 20-се йылдарында батша хөкүмәте феодаль системаны кризистан сығарыу юлын эҙләп, империяның көнсығыш губерналарын, шул иҫәптән Башҡортостанды ла, колониялаштырыуҙың варианттарын уйлай башлай. Ул саҡта тарихи Башҡортостан территорияһы Ырымбур, Пермь, Вятка һәм Һарытау губерналары составына ингән була. Был яҡка халыҡтар күсеп килеүен тәртипкә һалыу өсөн батша властары башҡорт ерҙәренең хоҡуҡи статусы менән бәйле мәсьәләләрҙе өйрәнергә ҡарар итә.**



Шуның менән бәйле, Ырымбур губернаһының коллегия кәңәшсеһе Степан Мертваго Ырымбур межа контораһы документтары нигеҙендә материалдар туплай. Йыйылған мәғлүмәттәрҙе Мертваго "Башҡорттарҙың 1562 йылдан хәҙерге көнгә тиклем Ырымбур губернаһындағы ерҙәргә, ул ерҙәрҙәге бөтә нәмәгә һәм хоҡуҡтарға эйә булыуы тураһында ҡыҫҡаса тарихи күсермә" тип атай. Был эшен автор Сенаттың межа департаментына биргән, күрәһең, сөнки хәҙер ул Санкт-Петербург ҡалаһындағы Рәсәй Дәүләт Тарихи архивы фондында һаҡлана.

Автор, башҡорттар Рус дәүләтенә "ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә" үҙҙәре теләп ҡушыла, бының өсөн батша Иван Грозный башҡорттарға ергә мәңге хужа булыу хоҡуғы биреләүе тураһында грамота ебәрә, тип билдәләй. Дөйөм батша грамотаһынан тыш, һәр ырыуға батша "һаҡлау грамоталары" тапшыра. Һуңғы документтар барлыҡҡа килеүенең асылын С. Мертваго "...ундағы башҡорттарҙы үҙ биләмәләрендә бер кем дә ҡыҫырыҡламаһын өсөн" дәүләт яғынан гарантия булған тип аңлата. Ошонан һуң батша властары, башҡорттар дәүләт файҙаһына яһаҡ түләгәс, уларҙың ергә хоҡуҡтарын раҫлау сифатында "һаҡлау грамоталары"нан күсермәләр биргән. Мертваго, грамоталарҙың үҙенсәлекле текстары һәм уларҙан күсермәләр башҡорттарҙа һаҡланып ҡалған, тип раҫлай. Был эштә Өфө ҡалаһының барлыҡҡа килеү ваҡыты һәм урыны тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар. Автор ҡалаға ҡасан нигеҙ һалыныуының аныҡ ҡына датаһын әйтмәһә лә, ҡәлғә барлыҡҡа килеүенең яҡынса осорон күрһәтә. Уның фекеренсә, ҡәлғә батша Федор Иоаннович батшалыҡ иткән осорҙа, йәғни 1584 менән 1598 йылдар араһында, төҙөлгән. Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыу урыны итеп "Мең улысының башҡорт ере" территорияһы һайланған.

"1661 йылда хөкүмәт башҡорттарҙың үҙҙәре биләгән бөтә ерҙәргә аҫаба хоҡуғын рәсми раҫлай", тип һыҙыҡ өҫтөнә ала автор. Бындай хәл 1730 йылға, батша указдары сығып, ҡәлғә һәм башҡа нығытмалар төҙөй башлағанға тиклем, һаҡлана. Был терәк пункттары өсөн баҫып алыу, шулай уҡ һатыу кеүек төрлө ысулдар менән башҡорт ерҙәрен ҡабат тартып ала башлайҙар. Шуға ҡарамаҫтан, властар башҡорттарҙың ергә хоҡуҡтарын таныуҙан туҡтамай.

Документты төҙөүсе фекеренсә, башҡорт ихтилалдары арҡаһында батша хөкүмәте уларҙың ер биләмәләрен сикләргә маташа - ихтилалда ҡатнашыусыларҙың ерҙәрен тартып алыу ошондай сара булырға тейеш була. Мертваго, ергә улыс хужа булыуы был санкцияны бойомға ашырыуға ҡамасаулай, тип иҫәпләй. Уның фекеренсә, ер мөнәсәбәтендәге принципиаль үҙгәрештәр XVIII быуаттың 40-сы йылдарынан башлана. Ошо осорҙа рус дворяндары өсөн башҡорт ерҙәрен иркен һатыу-һатып алыу законлаштырыла, Ырымбур ҡәлғәһенә нигеҙ һалып, унда хәрбиҙәр килтереп тултырыла, заводтар төҙөлә башлай. Был йүнәлештә "1741 йылда Яйыҡ йылғаһы буйлап башҡорт һәм ҡырғыҙ халыҡтары араһында" нығытылған Ырымбур линияһы һуҙыу иң мөһим сара булып тора. Ҡәлғәләр селтәре барлыҡҡа килеү дәүләттең төбәктә ерҙе һатыу-һатып алыу процесын законлаштырыуын тиҙләтә.

Крайҙа ерҙәрҙе баҫып алыуға ҡарамаҫтан, хөкүмәт башҡорттарҙың ергә аҫаба хоҡуғын таныуҙан баш тартмай, тип раҫлай документты төҙөүсе. 1791 йылда батша манифесы буйынса бөтә башҡорттарҙы үҙ ерҙәренең хужалары итеп таныу тураһында ҡарар ҡабул ителә. Бының менән властар ихтилалда ҡатнашҡан башҡорттар һәм уларҙың тоҡомдары өсөн ер биләүгә сикләүҙәрҙе бөтөрөү тураһында рәсми рәүештә иғлан итә.

Мертваго, XVIII быуаттың икенсе яртыһында төбәкте колониялаштырыу башҡорттарҙың мәнфәғәтен боҙоп алып барыла, тип һыҙыҡ өҫтөнә ала. Айырым алғанда, дворяндар һәм крәҫтиәндәр ер һатып алғанда килешеүҙәрҙе "сирек һәм дисәтинәләр иҫәбе менән түгел, ә ул ҡәлғәләрҙә билдәләнгән межалар һәм тәбиғи ыҙандар буйынса" төҙөүгә өлгәшә. Йәғни ер бүлеүгә документтар төҙөгәндә аныҡ майҙан күрһәтелмәй. Ә был күсеп килеүселәрҙең ерҙе артығы менән биләүенә мөмкинлек аса. Бер үк ваҡытта, улар төбәктә игенселекте үҫтереүгә булышлыҡ итте, тигән һылтау менән ерҙе һатып алыусыларҙың колониялаштырыу процесы аҡлана, ти ул.

Мертвагоның Өфө ҡәлғәһенә 1584-1598 йылдар араһында нигеҙ һалыныуы тураһындағы һығымтаһы нигеҙле күренә. Был танылған ғалим-академиктар П.П. Пекарский менән М.Н. Тихомировтың хеҙмәттәрендә лә раҫлау таба, улар 1586 йылды Өфөнөң башланғыс датаһы тип атай. Авторҙың, Өфө ҡәлғәһе Мең улысы башҡорттарының ризалығы менән уларҙың аҫаба ерендә төҙөлдө, тигән күрһәтмәһе бик мөһим. Был материалдарҙа, батша хөкүмәте сәйәсәтенең яңы этабы 1730 йылдан һуң башлана, тип телгә алына. Күрәһең, автор яңы осорҙоң башланыуын 1735 йылда Ырымбур экспедицияһының эшмәкәрлеге һәм 1736 йылдың 11 февраленән указ сығарыу менән бәйләй. Ул бында колониялаштырыу, ерҙе ирекле һатыу-һатып алыуҙы законлаштырыу, крепостар, заводтарға нигеҙ һалыу, хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм крәҫтиәндәр күбәйеүен күҙ уңында тота. Шул уҡ ваҡытта, төп халыҡтың ерҙәрен тартып алыу сәйәсәте үткәреүгә ҡарамаҫтан, хөкүмәт XVIII быуаттың икенсе яртыһында башҡорттарҙың аҫаба хоҡуғын раҫланы, тип бик ғәҙел билдәләй.

Әммә Мертваго XVIII быуаттағы ер тураһындағы закондарға характеристика биргәндә ҡайһы бер тап килмәүҙәр осрай. Билдәле булыуынса, яңы хөкүмәт курсы 1735-1736 йылдарҙа башлана. Бынан тыш, башҡорттарҙың ергә аҫаба хоҡуғы 1664, 1790 һәм 1793 йылғы указдар менән раҫлана, ә 1661 һәм 1791 йылдарҙағы менән түгел, тип иҫәпләй документты төҙөүсе. Мертвагоның, XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт ихтилалдары хөкүмәттең уларҙың еренә һөжүм итеүенә булышлыҡ итте, тигән фекере менән килешеп булмай. Киреһенсә, тап батша хакимиәтенең башҡорттарҙың ергә хоҡуҡтарын боҙоуы халыҡтың ҡорал күтәреп ҡаршы сығыуына килтерҙе. 1649 йылғы Собор Уложениеһы (Закондар йыйылмаһы) башҡорт аҫабаларының ергә хоҡуҡтарын сикләне: ерҙе һатыу тыйылды, уны арендалау сроктары кәметелде. Был закон XVII-XVIII йылғы ихтилалдар башланғанға тиклем үк ғәмәлгә индерелде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был документ Башҡортостанда ер мөнәсәбәттәре проблемаларын анализлауға арналған. Унда ҡайһы бер аныҡ хаталар ебәрелеүгә ҡарамаҫтан, тотош алғанда, ваҡиғалар барышы объектив һүрәтләнгән. Автор хөкүмәт курсындағы ике ҡапма-ҡаршы тенденцияны күрһәтә алған: бер яҡтан, төбәкте аҡрынлап колониялаштырыуға йүнәлеш, икенсе яҡтан, башҡорттарҙың ергә хоҡуҡтарын өлөшләтә күҙәтеү. Ғөмүмән, Мертвагоның материалдары Башҡортостанда батша властары алып барған ер сәйәсәте тарихы буйынса мөһим сығанаҡ булып тора.**

**Ирек АҠМАНОВ,**
**тарих фәндәре докторы, профессор.**
*("Киске Өфө", №17, 2004 йыл)*

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

"5 сәғәт 30 минутта эскадрондар үҙ урындарына баҫты, командирҙарынан кәрәкле бойороҡто алып, алға ынтылды. Таң һарыһында тирә-яҡты күмгән тынныслыҡ боҙолдо, беҙҙең алдағы бөтә фронт буйлап ут ташҡыны тоҡанды. Гвардиясылар, ыласындарҙай атылып, фашистарҙың траншеяларына ябырылды - ҡул һуғышы башланды. Дошман иһә Петровский заводы, Ивановка һәм Штеревка утарҙары яғынан яңынан-яңы частарын өҫтәп торҙо, юғалтыуҙар күбәйгәндән-күбәйҙе. Өс саҡрымдар самаһы һуҙылған түбәлек үлгән йәки ҡаты яраланған һалдаттар, офицерҙар менән сыбарланды. Һуңынан беленеүенсә, сәғәт ярым барған ошо ҡаты һуғышта дошман да үҙенең күп һалдаттарын, байтаҡ ҡоралын, техникаһын юғалта.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда совет халҡы күп батырлыҡтар күрһәтте. Әлбиттә, батырлыҡ төрлөсә була. Ләкин 1943 йылдың 23 февралендә 16-сы гвардия Башҡорт кавалерия дивизияһының Тыуған илебеҙ, халҡыбыҙ ҡаршыһында күрһәткән ҡаһарманлығы сал тарихта үҙенә башҡа бер юйылмаҫ урын алыр. Ҡарлы һуғыш яланы. Дошман беҙҙе тулыһынса уратып алып, юҡ итеү өсөн ашығыс саралар күрә. Ивановка яҡлап, шомло тауыштар сығарып, танкылар ябырыла. Петровский поселогынан, Штеревканан төрлө калибрҙағы туптары, минометтары беҙҙең өҫкә дауыллы ут яуҙыра. Беҙҙең арттан, Юлино утарҙары яҡлап, дошмандың өҫтәмә пехотаһы хәрәкәт итә. Ә алда, Борисов әйткән "асыҡ урын" булаһы ерҙә, кавалеристарға ҡаршы уның тығыҙ оборонаһы ята. Фашистәр беҙҙе төрлө яҡлап ут эсенә ҡыҫа. Минут һайын хәл ҡырҡыулаша. Өҫтәүенә, Штеревка тарафынан бер юлы ун алты самолет күтәрелеп, дивизияны бомбаға тота башланы. Бомба менән ҡуша беҙҙең өҫкә листовкалар яуҙы, унда: "Һеҙ Бөйөк Германия армияһы тарафынан уратып алындығыҙ. Бынан сығыу мөмкин түгел. Бирелегеҙ. Хәҙергә һуң түгел әле", - тигән һүҙҙәр яҙылғайны... 15-се гвардия дивизияһы ла был ваҡытта беҙҙән бер аҙ һулдараҡ - Формандировка (Фромандиновка. - **Ред. иҫк.**) утарында ҡанға батып ҡаһарман һуғыша ине...

...Дошман менән беҙҙең сафтар аралашып, барыһы бергә буталып, боғаҙға-боғаҙ килеп алыш башланды. Кескәй генә ҡарлы яланда ике яҡтан да меңәрләгән ҡоралды кешеләр ябырылышып, ваҡ төркөмдәргә бүленеп, үлемесле һуғыша ине. Фашистарҙың ут хәнйәре дивизия командиры булған төркөмдө дивизияның төп өлөшөнән айырҙы ла шунда ҡарай ут дауылын көсәйтте...

...Мин гвардия майоры М. И. Кузнецов менән бергә гвардия генерал-майоры М. М. Шайморатов һәм уның тирәһендәге һуғышсылар төркөмө сая алышҡан ергә яҡынлағанда, уларҙы дошмандың утыҙлап автоматсы һалдаты һәм офицеры солғап алғайны инде. Беҙ, ҡарға ятып, фашистарға ҡарап ут астыҡ. Шул арала утлы ҡурғаш ямғыры генералдың кәүҙәһен уртаға киҫкәндәй булды, ул эйәрҙән ергә ҡоланы..."

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БАШ МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ



# ОҘОН ҒҮМЕРЛЕ РУБРИКА

**"Киске Өфө" гәзитен ойоштороу эшен иңемә йөкмәгәс, тәүмаҡсатым - башҡа баҫмаларға оҡшамаған, милләткә иң кәрәкле һүҙҙе әйтеүсе, уның аңын, рухын, сәмен һәм ғәмен уятыусы гәзит ижад итеү ине. Уның рубрикалары ла үҙенсәлекле, шулай уҡ башҡаларҙы ҡабатламай торған булырға тейеш ине. Иң төп рубрикабыҙ "Диалог"ты асып, интеллектуаль һөйләшеүҙәр башлағас, бер журналист: "Һеҙҙең башлыса интеллигенцияға төбәп ойошторолған ул әңгәмәләрҙе ябай уҡыусы аңламаҫ бит", - тигән фекер әйтте. Беҙҙең баҫмаларҙың, шулай уҡ радио-телевидение тапшырыуҙарының, театр тамашаларының төп бәләһе лә шунда шул: һәр ваҡыт йә иң түбән, йә уртаса кимәлгә иҫәп тотола. Ни өсөн беҙ, ижад кешеләре, уҡыусыны, тыңлаусыны йә тамаша ҡылыусыны үҙебеҙҙән наҙаныраҡ тип уйлайбыҙ? Түбәнерәк икән, ни өсөн үҙ кимәлебеҙгә күтәрелергә ярҙам итмәйбеҙ?**

Ҡайһы бер коллегалар: "Был диалогтарҙың темаһы берәй ваҡыт бөтөр бит инде ул",- тип, шик тә белдергеләне. Юҡ икән, темалар сикһеҙ булып сыҡты. Тема өлкәһендә, ғөмүмән, беҙ үҙебеҙҙе бик ныҡ сикләйбеҙ. Республика гәзиттәрен, шулай уҡ район гәзиттәрен алып, тематиканы күҙҙән үткәреп сығығыҙ әле. Ауыл хужалығы эштәре, рәсми хәбәрҙәр, уҡыу йорттары, имтихандар, табип йә уҡытыусы тураһында һүрәтләмә, эшҡыуар, тарих, юбилей, ҡарттар, халыҡ оҫталары, әҙәби һәм сәнғәт әҫәрҙәре, файҙалы кәңәштәр, тәрбиә темаһы - 10-15 тема. Иң аяныслыһы - бер төрлөлөк. Ә бына үҙәк гәзиттәрҙә, әлбиттә, темалар бик киң. Иң мөһиме, тормош бар. Тормош бит кемдең күпме һөт һауыуынан йәки юбилейҙарҙан ғына тормай. Гәзит уҡыусыға депутаттар ҡабул иткән закондар ҙа, уларҙың хоҡуҡтарының нисек һаҡланыуы ла, нисек аҡса эшләргә, нисек ипотека кредиты алырға икәне лә - барыһы ла ҡыҙыҡ. Беҙҙең баҫмаларҙа финанс доньяһына, иҡтисадҡа күҙәтеү, социаль өлкәләге көн дә үҙгәреп торған ҡағиҙәләр, закондар тураһында мәғлүмәттәр юҡ, булһа ла, бик һирәк. Аналитика жанрын бөтөнләй оноттоҡ хәҙер. Тема ярлылығының сәбәбе шул: журналисты киң фекерләргә, төрлө тармаҡтарҙы өйрәнергә мәжбүр итмәйбеҙ. "Башҡортостан" гәзитендә эш башлағанда баш мөхәрриребеҙ Абдулла Ғиниәт улы Исмәғилев беҙҙе бүлектән-бүлеккә күсереп ултырта, төрлө темаларҙы, өлкәләрҙе өйрәнергә мәжбүр итә ине. Бөгөн берәй йәш журналистың банкҡа барып, финанс, кредит мәсьәләләрен өйрәнеп ултырғанын күргәнем юҡ. Ә үҙәк гәзиттәрҙә эш шулай ҡуйылған.

Һәр хәлдә, беҙ иң юғары зауыҡлы, иң аңлы, иң аҡыллы уҡыусыға иҫәп тотоп ижад итергә тырышабыҙ "Киске Өфө"нө. Һәр һаныбыҙҙы әҙерләгәндә ошондай юғары талаплы уҡыусының күҙҙәрен күҙ алдына килтерәм мин үҙем. Ошо күҙҙәр менән күҙмә-күҙ осрашыр өсөн коллективтарға, райондарға командировкаларға сығып китәм. Сығыш яһаған мәлдә гәзитебеҙ менән бығаса таныш булмағандарҙың да күҙҙәрендә оҫҡон тоҡаныуын күреү ҡалай күңелле. Бына ошо оҫҡон ҡиммәт миңә. Кешенең күҙендә оҫҡон яна икән, тимәк, ул битараф түгел, тимәк, беҙҙең гәзит һүҙе уны тағы ла юғарыраҡ кимәлгә күтәрә, тигән һүҙ.

Шулай итеп, гәзитебеҙҙең ошо 1000-се һанын әҙерләгәндә тәүге йылдарҙағы һандарҙа баҫылған диалогтарҙан да (уларҙа ҡатнашыусыларҙың ҡайһы берҙәре яҡты донъяларҙа юҡ инде) өҙөктәр килтерергә булдыҡ. Аҡыллы шәхестәребеҙҙең һүҙҙәрен уҡып, улар әйткән фекерҙәрҙең бөгөн дә актуаль булыуына үҙегеҙ инанырһығыҙ.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

# ЯҘМЫШ МАҢЛАЙҒА ЯҘЫЛА,

## әммә үҙ-үҙе өсөн яуаплы кеше уны үҙенсә уҡый…

*(№30, 2003 йыл)*

**Беренсе урынға аҡса, карьера ҡуйылған йәмғиәтте әҙәбиәт һәм сәнғәт үҙгәртә аламы?**

**Луиза Дәүләтшина:** Беҙ әкиәттәр тыңлап тәрбиәләндек. Бай ҡыҙы булһа - ялҡау, йәмһеҙ, ярлы ҡыҙы булһа - егәрле, матур тип белдек. Изгелек еңә, яуызлыҡ еңелә тигәнгә лә инандыҡ. Кеше ни тиклем генә бай булмаһын, күңеле тыныс түгел икән, ул байлығы күҙенә лә күренмәҫкә мөмкин. Кешенең мөмкинлеге менән теләге араһында гармония булһа, йәмғиәтебеҙ алға китер ине. Күберәк модаға эйәрәбеҙ, үҙаллы фекерләп йәшәү һирәк, яй үҙгәрәбеҙ. Был осраҡта әҙәбиәт һәм сәнғәт, кешенең объектив үҫеш гармонияһы ҡанундарын иҫәпкә алып, алдан барырға тейеш.

**Әхтәм Абушахманов:** Власть әҙәбиәт менән сәнғәткә таянһа, улар беҙҙең йәмғиәтте матурлау өсөн иң ҙур ҡоралға әүерелер ине. Беҙҙә күп идеялар түбәндән түгел, юғарынан төшөрөлә. Был - яһалмалыҡ. Ябай халыҡ менән власть бер-берен аңлаған хәлдә генә донъяны үҙгәртә аласаҡбыҙ.Һуңғы ваҡытта беҙҙең республикаға ҡаршы интернет һәм башҡа электрон саралар ярҙамында, матбуғат аша мәғлүмәт һуғышы бара. Ул ысулдар кешегә тиҙ тәьҫир итеүсән. Әҙәбиәткә һәм сәнғәткә килгәндә, әйтәйек, әҫәр яҙылып, китап булып сыҡҡансы, пьеса яҙылып, сәхнәлә ҡуйылғансы арыуыҡ ваҡыт үтә.

**Луиза Дәүләтшина:** Беҙҙең быуын билдәле бер традициялар нигеҙендә тәрбиәләнгән, юғары мәҙәниәтле быуын тип иҫәпләйем. Шуға күрә беҙҙе тиҙ генә икенсе идеяларға инандырыу мөмкин түгел. Беҙ күктән төшмәгәнбеҙ, барыһына ла әҙербеҙ. Беҙ Рәсәй буйлап йөрөйбөҙ, күрәбеҙ, сағыштырабыҙ һәм үҙебеҙсә һығымта яһайбыҙ. Тормош ул һәр ваҡыт көрәш булған. Мәғлүмәт һуғышына ҡаршы торор өсөн һәр беребеҙҙең үҙенең хеҙмәтенә, үҙ шәхесенә яуаплы ҡарауы мөһим.

**Әхтәм Абушахманов:** Әсәйем ҡайтҡан һайын миңә: "Дошмандарыңдан ҡурҡма, дуҫтарыңдан һаҡлан", - тип әйтеп ебәрә торғайны. Дошман - ул дошман, аныҡ күренеп тора, уның беҙгә нимә эшләргә тырышыуы ла билдәле. Дошман менән дәғүәләшеү көрәш тип атала, ә көрәштә кеше сыныға ғына. Тормошто көрәш тинек, ә бит сәнғәт тә шул уҡ көрәш. Мин көрәштән бер ваҡытта ла ҡурҡманым. Ҡурҡҡаным шул: мәғлүмәт һуғышы халыҡтарҙы физик яҡтан ҡыйратыуға барып етмәһен. Яуаплылыҡ тойғоһо тинек, ул бит шул уҡ көрәш, көрәштән ситләшкән кеше ағым ыңғайына китергә мәжбүр була, ул битараф кеше.

**Луиза Дәүләтшина:** Яуаплылыҡ тойғоһо - ул йәшәүҙең мәғәнәһе. Был тойғоһо булмаған кешенең йәшәү мәғәнәһе лә, яҙмышы ла үҙгәрә. Әлбиттә, яҙмышҡа ышана кеше. Әммә үҙ алдыңа маҡсат ҡуйып, йәшәү мәғәнәһен табып, үҙеңә яуаплы ҡараһаң, яҙмышты ла үҙгәртергә була. Хәҙер күп нәмә аҡсаға ҡорола, тиҙәр. Әммә киң эрудицияны, йәмғиәттә үҙеңде тота белеү мәҙәниәтен, тәбиғи талантты аҡсаға һатып алып булмай. Кеше үҙ-үҙен ҡулға алып, камиллыҡҡа ынтылһа, маңлайына яҙылғанын да икенсе төрлө итеп уҡыу ҡөҙрәтенә эйә. Бының өсөн әлеге лә баяғы яуаплылыҡ тойғоһо кәрәк.

**Әхтәм Абушахманов:** Шулай шул. Беҙҙең бит тағы бер ауырыу бар: юғарыға ынтылған ваҡытта күҙебеҙ тоноп, түбәнде, нигеҙебеҙҙе, ян-яғыбыҙҙы онотабыҙ...



# ЙЫРҘАРЫБЫҘ НИҢӘ ҺАҒЫШЛЫ?

## Сөнки уларҙа халыҡтың рухи тетрәнеүе лә бар

*(№37, 2003 йыл)*

**Халыҡтың, милләттең рухи тетрәнеүен милли депрессия тип әйтеп буламы?**

**Мәғариф Ғатауллин:** Депрессияның нигеҙендә социаль-психологик сәбәптәр ята. Беҙҙең илдә тотош халыҡтың психология һәм депрессия мәсьәләләре аҙ өйрәнелгән. Сөнки беҙ оҙайлы йылдар йәнде һәм күңелде абстракт төшөнсә итеп кенә белдек. Бөйөк Ватан һуғышынан иҫән-аман ҡайтҡандар ни өсөн эсеүенән туҡтай алмаған, сөнки улар үҙҙәре кисергән мәхшәрҙе башҡаларға һөйләп, күңелдәрен бушатыу урынына, араҡы эсеп, эс яныуҙарын "баҫҡан". Кешегә стрестан ҡотолоу ысулын әйтеп, өйрәтеп булмай. Ул юлды һәр кем, үҙен ошо хәлгә килтереүсе сәбәптән сығып, үҙе билдәләргә тейеш. Эс бушатыу - ғәжәйеп ысул. Күңелендә ауыр таш ятҡандар ошо юл менән бушана ала. Һуғыш ваҡытында мин 8-9 йәштәрҙә генә инем. Шул ауыр, ҡайғылы йылдарҙа кешеләр кис көнө бер-береһенең өйөнә килеп, кис ултырыр ине. Ризыҡҡа ҡытлыҡ заман, сәй-маҙар эсеү юҡ, киләләр ҙә, ишек янында өндәшмәй генә тик ултыралар, аҙаҡ сығып китәләр ине. Бында эс бушатыу ҙа булмаған, тимәк, кешеләр шулай итеп күңелдәрен тынысландырған.

**Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин:** Бер ауылдың диуанаһы икенсе ауылдың диуанаһына ҡунаҡҡа килгән. Хужа уны өс көн буйы һыйлап, бүләк биреп оҙатҡан да, ауылдан ситкә сыҡҡас, артынан ҡыуып етеп, туҡмаған. Ҡунаҡ булғаны аптырап: "Үҙең ҡунаҡ иттең, бүләк birҙең, үҙең ниңә туҡмайһың", - тип һорай ҡуйған. Хужа булғаны: "Кеше килһә, уны ҡунаҡ итеү һәм бүләк биреү халҡыбыҙҙың изге йолаһы, беҙҙең ауылға бүтән килмә, бер ауылға мин диуана ла еткән", - тигән. Һәр ауылдың диуанаһы, ата ялҡауы, ат ҡарағы, кәкереһе-бөкөрөһө булған кеүек, һәр халыҡтың да шундай уҡ мәхлүктәре бар. "Ауылдың, йәки милләттең ҡалған халҡы быларҙы юлға һала алмауы сәбәпле бәлә килә", тигән Бәйғәмбәребеҙ. Ул тағы ла "Фетнә - ул йоҡлап ятыусы", тип тә әйтә. Милләт йоҡлап ятһа, уяу булмаһа, тимәк, үҙенә ҡаршы фетнә әҙерләй. Һәр бер милләт йәшәү өсөн тырыша. Атай-олатайҙарыбыҙ "Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын", тип быуаттар буйы көрәшкән. Аллаһы Тәғәлә беҙгә ожмахтай ер биргән, уға ҡыҙығыусылар, байлығына ынтылыусылар киләсәктә лә буласаҡ, тимәк, көрәш дауам итә. Йырҙарыбыҙҙың үтә һағышлы булыуы ла, еребеҙҙе баҫып алырға теләүселәрҙең беҙгә ҡаршы ойошторған фетнәһенә ҡаршы көрәштә кисергән рухи тетрәнеүенән килә. Беҙ бөгөн килеп һаман да шул йырҙарҙы бирелеп тыңлайбыҙ икән, тарихта фетнәселәрҙең беҙгә һалған яралары һаман да уңалмаған тигән һүҙ. Бик тәрән яралар, рухи тетрәнеүҙәр улар.

# ЗАМАНҒА ЯРАҠЛАШЫРҒАМЫ?

## Милли асылыбыҙ юғалыр бит…

*(№49, 2003 йыл).*

**Беҙ бер төрлө уйлайбыҙ, уйлағаныбыҙҙы һөйләйбеҙ, һөйләгәнебеҙҙе - эшләйбеҙ, әммә беҙҙе уратып алған мөхит улай уҡ түгел. Беҙгә ни эшләргә: үҙгәрергәме, яраҡлашырғамы? Башҡалар һымаҡ булһаҡ, милли асылыбыҙҙы юғалтабыҙ, бында алтын урталыҡ бармы?**

**Йомабикә Ильясова:** Билдәле кинорежиссер Никита Михалков: "Менталитет - ул рухи иммунитет", - ти. Уның менән килешергә лә була, сөнки беҙҙең тәбиғи сифаттарыбыҙ бер үк ваҡытта һаҡланыу сарабыҙ ҙа. Спортсы, йүгергән һайын, еңелерәк йүгерә, уның тәне сыныға. Шуның кеүек, беҙҙең халыҡ та заманына ярашлы күңел сынығыуы үтергә тейештер. Бары үҙ-үҙеңде юғалтмай сынығып өйрәнергә кәрәк.

Элек беҙҙең халыҡ оятҡа ҡалыуҙан ҡурҡҡан, тәрбиә әхлаҡҡа нигеҙләнгән. Шуға күрә үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе хоҡуҡи нигеҙҙәргә ҡороу ҙа кәрәкмәне. Һуңғы йылдарҙағы үҙгәрештәр, бигерәк тә әлеге һайлауҙар кешелеклектең, имандың, әҙәптең хоҡуҡи яҡлауға мохтажлығын күрһәтте. Артабан бөтөн йәһәттән дә, тормоштоң барлыҡ өлкәләре буйынса ла аңлы милли кадрҙар үҫтерһәк, киләсәгебеҙ яҡты булыр тип уйлайым. Хәҙер белем, аң һәм рух яғынан көслө кешеләр заманы килде.

Беҙҙең милли сифаттар араһында иң күркәме - тәбиғәттән килгән әҙәплелек. Үҙгәрергә кәрәк, тип асылыбыҙҙы юғалтһаҡ, халҡыбыҙ ҙа юғаласаҡ. Беҙ кешелеккә үҙ үҙенсәлегебеҙ менән ҡәҙерле. Милли асылды сағылдырған әҫәр генә интернациональ һәм киң донъяла танылыу яулай ала. Бүтәндәргә оҡшарға тырышыу - яһалмалыҡ.

**Әмир Әминев:** Заман талаптарына ярашлы халыҡ үҙгәрергә бурыслылыр тип уйлайым. Әммә был асылдың үҙгәреүен аңлатмай, ул барыбер ҙә һаҡланып ҡала. Беҙҙең сәнғәт, фольклор һәм тарихыбыҙ ғәжәйеп бай, әммә киләсәктә лайыҡлы йәшәр өсөн былар ғына етмәй. Беҙ башҡалар менән аралашмайынса, айырым ғына йәшәй ҙә алмайбыҙ. Тел, лөғәт һәм ҡан аралашыуынан да азат түгелбеҙ. Шуға күрә, киләсәктә республикабыҙ һәм халҡыбыҙ яҙмышын милли ҡадрҙар билдәләйәсәк. Беҙҙә милли тел, асыл күберәк ауылда һаҡлана, ә милләтте һаҡлау механизмы - ҡалала. Тимәк, бында мәсьәлә ике яҡлы: беҙ асылда ауылда милли булмышты һаҡлап ҡалырға, шул уҡ ваҡытта милли булмыш үҙенең киләсәге өсөн ҡалала ҡорбан килтерергә бурыслы. Шунһыҙ булмай, шунһыҙ айырым халыҡҡа, шулай уҡ республикаға үлем янай.

# БАШҠОРТ ҠАТЫН-ҠЫҘЫНЫҢ БӘХЕТЕ НИҘӘ?

## Ошо милләттең әсәһе булыуҙа!

*(№46, 2003 йыл).*

**Ҡатын-ҡыҙҙың бәхетле булыуы ирҙәренең, ғаиләһенең һәм йәмғәтселектең уларға ҡарата булған мөнәсәбәте менән билдәләнә. Тарихты күҙ уңынан үткәргәндә, бөгөнгөнө байҡағанда, ҡайһы осорҙа башҡорт ҡатын-ҡыҙы үҙен иң ныҡ бәхетле итеп тойҙо икән?**

**Фәҡиһә Туғыҙбаева:** Бәхет тигән төшөнсәнең билдәләмәһе юҡ, ул абстракт төшөнсә, уны һәр кем үҙенсә аңлай. Американдар өсөн бәхет - муллыҡ, Рәсәй кешеһе рухи донъяһы менән бәхетле. "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы ҡайһы осорҙа күберәк бәхетле булған?" тигән һорауға аныҡ яуап биреп булмай. Бының өсөн тотош халыҡтың тарихын күҙалларға кәрәк. Башҡорт халҡы еңеү тойғоһо кисергәндә күберәк бәхетле булғандыр тип уйлайым, халҡы ундай тойғоно кисергәс, ҡатын-ҡыҙ ҙа уның бер өлөшө булараҡ, был тойғоға шатланған. Мәҫәлән, мин республикабыҙ суверенитет яулаған көндө үҙемде сикһеҙ бәхетле итеп тойҙом. Партия ойошмаһы секретары инем бит мин: ҡыҙыл күлдәгемде кейеп, түшемә ҡыҙыл ҡәнәфер ҡаҙап, өс көн йөрөнөм. Минең өс мөхәббәтем бар: балама, һөйгән йәремә һәм халҡыма ҡарата һөйөүөм, уларҙың берлеген мин бәхет тип атайым һәм уларҙы бер-береһенән айырып ала алмайым.

"Башҡорт ҡатын-ҡыҙы ниндәй быуатта бәхетлерәк булған?" тигән һорауға яуап бирер алдынан беҙ иң тәүҙә башҡорт ғаиләһенең ниндәй булырға тейешлеген аныҡлап китергә тейешбеҙ. Ысынлап та, әйтәйек, сит йоғонтоға, ассимиляцияға бирелмәҫ өсөн ғаилә ниндәй сифаттарҙы үҙләштерергә бурыслы, бында әсә булған ҡатын-ҡыҙҙың роле нимәлә? Ғөмүмән, ниндәй булырға, үҙ асылын һаҡлап ҡалыр өсөн нимә эшләргә тейеш һуң башҡорт ҡатын-ҡыҙы? Юғиһә, беҙ уға "Сит милләт вәкиленә кейәүгә сыҡма!" тигәндән артыҡ бер нәмә лә әйтмәйбеҙ.

**Гүзәл Ситдиҡова:** Минең иң бәхетле саҡтарым - баламды һәм ейәнсәремде ҡулға алған көндәрем, илемдең шатлыҡ тойғоһо кисергән мәлдәре. Ейәнсәремде ҡулға алған көндө хатта ҡала комитеты активы йыйылғанын да онотҡанмын, иртәгәһенә кәрәгемде бирҙеләр биреүен, әммә шатлыҡ тойғом унан ғына һүрелмәне. Бер аҡыл эйәһе әйтмешләй, бәхет - ул бәхетһеҙлек булмаған ваҡыттыр. Хатта түҙеп торғоһоҙ ауырлыҡтар алдында ла үҙен бәхетле итеп тойған кешеләр була. Кеше һуңғы минутына ҡәҙәр өмөт менән йәшәй, ана шул уның бәхетеләр. Ҡайһы быуатта булһа ла, башҡорт ҡатын-ҡыҙы рух ныҡлығы, әлеге быуатҡа тиклем килеп еткән сифаттары менән үҙен бәхетле итеп тоя беләләр тим. Улдары, ирҙәре яуҙа ҡорбан булған саҡта сабыр булыуҙары, нәҫелде дауам итеүҙәге фиҙаҡәрлеге менән дә башҡорт ҡатын-ҡыҙы әле лә бәхетле. Беҙҙең халыҡ быуаттар дауамында юғалып ҡалмауы менән бәхетле, бында ҡатын-ҡыҙ иң мөһим урында тора. Башҡорт ҡатын-ҡыҙы ошо милләттең әсәһе булыуы менән бәхетле. Әлеге көндә беҙ хоҡуҡтарҙы күберәк яулаған һайын, әсәлек хоҡуғынан мәхрүм була барабыҙ. Беҙ ирҙәр менән тиң хоҡуҡлы булып күберәк власҡа килһәк, күберәк үҙебеҙҙе ҡайғыртып йәшәһәк, бәхетле булыр инек, тип уйлап яңылышабыҙ. Америкала, мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙ сәйәсәттә балаларын үҫтереп бөткәс кенә килә. Шуға күрә ҡатын-ҡыҙҙы тәжрибә туплап, балаларынан бер аҙ арынғас ҡына, үҙ ихтыярынан тыш пенсияға оҙатыу дөрөҫ түгелдер тип уйлайым.

# ДОНЪЯЛАР ФАНИ ҒЫНА.

## Баҡтиһәң, кеше көн дә үлә, имеш...

*(№26 2003 йыл)*

**Тыуымдан ҡалмағас, үлемдән ҡалмайһың, тиҙәр. Кешене ғүмере буйы үлем ҡурҡыныsы тойғоһо ташламай. Үлем ҡурҡынысы, ысынлап та, иң хәтәр ҡурҡынысмы, әллә уны башҡа төрлө лә аңларға буламы? Баҡыйлыҡтан фанилыҡҡа күсеү аҙымы нисегерәк ҡабул ителергә тейеш?**

**Самат Мөхәмәтйәнов:** Минеңсә, 100 кешенең 99-ы үлемдән ҡурҡып йәшәй. Сөнки туғандарынан, яҡындарынан, йыйған байлығынан айырыласаҡ кеше, үлһәм, кемдер минең был ҡиммәттәрҙе тартып аласаҡ, тигән шик менән ғазаплана. Шуға күрә лә кеше күберәк үлем тураһындағы уйҙы үҙенән ситкәрәк ҡыуырға тырыша, кәйеф-сафаға бирелә, шулай йәшәһә, уға уңайлыраҡ. Кемдер үлеп ҡалһа, әйтмәһә лә, эстән ҡыуанып йөрөй: "Ана, ул үлде, мин һаман теремен", йәнәһе. Түбәнге аңда, ҡараңғы бер мөйөштә үлем ҡурҡынысы барыбер йәшәй, кешене ул барыбер игәй, тормошон ойоштороуға ҡамасаулай. Мин был донъяла үҙемә шундай ҡағиҙә һайлап алдым: үҙем ҡурҡҡан нәмәне өйрәнергә. Мин дә тәүҙә үлемдән ҡурҡа инем. Тәүҙә атайым, шунан ағайым мәрхүм булды, аҙаҡ ҡустым үҙ-үҙенә ҡул һалды. Шуларҙы кисергәндән һуң үҙемде насар тоя башланым. Дүртенсе йәҙрә үҙемә килеп тейер һымаҡ ине. Әммә мин башымды күтәреп, үлемгә ныҡлап ҡарағайным, уның ул тиклем үк ҡот осҡос түгел икәнен аңланым. Баҡтиһәң, яҡындарымдың үлеме ҡурҡынысыраҡ икән, үҙемдеке түгел. Шул уйҙар һөҙөмтәһендә тикшеренеүҙәргә тотондом, ғилми хеҙмәтем дә ошо хаҡта.

**Марат Мырҙанов:** Табип булараҡ, тыуғандан алып үлгәнгә тиклем кеше ғүмере һағында торғас, был төшөнсә тураһында минең дә үҙ күҙәтеүҙәрем һәм фекерҙәрем бар. Йәш саҡта үлем хаҡында тик ҡара уйҙа инем. Һуңыраҡ, атайҙың һәләк булыуы, аслыҡ-ярлылыҡ тормошто тик негатив итеп күҙ алдына баҫтырҙы. Хәҙер инде үлемде теге донъяға китеү, йөрәктең, баш мейеһенең эшмәкәрлеге туктауы, организмдың йәшәү функцияларын үтәмәй башлауы итеп кенә ҡабул итәм. Әсәйем үлгәс, мөхәббәтемде юғалтҡанымды аңланым, мине бүтән бер кеше лә уның кеүек яратманы. Күп йылдар депрессияла йөрөнөм. Хәҙер мине, мин үлһәм, балаларым ни эшләр, тигән ҡурҡыу тойғоһо биләп алған. Мин ышанған, миңә ышанған кешеләр кемдәргә ҡалыр, тигән уй ҙа борсой.

Үлем бер нисә секундлыҡ процесс инде, уның килгәнен кеше үҙе белмәй ҡалырға, ҡурҡып өлгөрмәскә лә мөмкин. К. Маркс: "Йәшәү - ул үлем", - ти. Ысынлап та, тере кешенең көн дә бер күҙәнәге үлә, көн дә бер ҡан тамыры ҡартая. Күҙҙең ҡартая башлауы 15-18 йәштә башлана икән, кеше ғүмере буйы йәйлап үлә. Йөрәк һәм баш мейеһе эшмәкәрлеге туктауы үлемдең һуңғы баҫҡысы ғына. Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаһына ғүмер бүләк итә һәм ул бүләкте тик Ул ғына кире алырға хоҡуҡлы, тиҙәр бит инде...

**Самат Мөхәмәтйәнов:** Үҙ-үҙенә ҡул һалған кеше был оло бүләкте Аллаһы Тәғәләнең йөҙөнә кире ата. Бының менән ул Аллаһы Тәғәләнән үҙен өҫтөн ҡуя. Ни тиклем генә ауыр булмаһын, кеше был юлға барырға тейеш түгел. Бер көн генә ғүмерең ҡалған хәлдә лә, һин ыҙалап булһа ла, уны ысын күңелдән йәшәп үткәрергә бурыслыһың. Әгәр ҙә теге донъя бар икән, донъялыҡта йәшәп үткәрмәгән биш йылың өсөн тамуҡта мәңгелек йыл ыҙалап йәшәргә мәжбүр буласаҡһың. Шуның өсөн ғүмерҙе бөткәнсе йәшәргә тырышырға кәрәк.

# АШАҒАНДА ҠОЛАҒЫҢ ҺЕЛКЕНҺЕН,

## эшләгәндә йөрәгең елкенһен

*(№39 2003 йыл).*

**Медицина күҙлегенән "Мин йәшәр өсөн ашайым" һәм "Ашар өсөн йәшәйем" тигән төшөнсәләрҙең ҡайһыһы ҡулайлы?**

**Тәлғәт Зөлҡәрнәев:** Мин оҙаҡ йылдар "Тукланыу гигиенаһы" тигән курсты алып барҙым. Шуға күрә был тема миңә бик яҡын. Ашау беҙгә иң тәүҙә йәшәр өсөн энергия сығанағы булараҡ кәрәк. Икенсенән, беҙҙең организмға "төҙөлөш материалдары", йәғни аҡһым, крахмал һәм майҙар инеүе лә бик мөһим. Беҙ ашағанда ҡайһы бер ауырыуҙарҙы еңеп сығырға тырышабыҙ. Әйтәйек, береһе һыуыҡ тейҙереп ауырып китә икән, уға тауыҡ һурпаһы, ҡорот иҙеп эсерәләр. Ашау - үҙенә күрә бер ләззәт тә. Шуның өсөн "Мин йәшәр өсөн ашайым" тип әйтеү урынына кемдер берәү "Мин ашар өсөн йәшәйем" ти икән, ул үҙенсә хаҡлы.

Ашаған саҡта кеше насар уй уйлай һәм әшәке һүҙ һөйләй алмайҙыр, тип уйлайым. Беҙ ашаған саҡта табындаштарыбыҙ менән йәнле әңгәмә ҡорабыҙ, тимәк, ашау - ул аралашыу ысулы ла. Тәмле һәм татлы ризыҡ ашаған кешенең ауыҙынан шундай уҡ һүҙҙәр генә сығыусан була. Шул уҡ ваҡытта беҙ милли ризыҡтарыбыҙҙы бешереп ашайбыҙ икән, ашау был ваҡытта йолаларыбыҙҙы һаҡлаусы сара булып та хеҙмәт итә. Ашау - йәшәүҙең бер өлөшө, донъяға тыуыуыбыҙҙың беренсе сәғәтенән үк инә һөтө булып инә ризыҡ беҙгә һәм үлеп киткәнсе ашайбыҙ. Ашамаһаҡ, йәшәй ҙә алмайбыҙ.

**Юнир Вәлиев:** Беҙ йәшәр өсөн ашайбыҙ. Киреһенсә булһа, йәғни кеше тик ашауҙы маҡсат итеп йәшәһә, һимерә башлай, ҡан баҫымы күтәрелә, йөрәге насарая. Һуңғы ваҡытта күберәген йәштәр һәм урта йәштәгеләр ашҡаҙаны ауыртып дауаханаға килә. Һорашһаң, уларҙың ашағанының 75-80 проценты углеводтан, йәғни шәкәрҙән тора. Эш нимәлә: хәҙер аҡсаң ғына булһын, магазинда тәмле-татлы ризыҡ та күп, йәнең ни теләй, шуны һатып алырға була. Картуф, аҡ икмәк, кекс, шоколад, торт, бал, май, кәнфит һәм башҡа тәмлекәстәр ашҡаҙандан нәҙек эсәккә төшә лә, бөтә организмға шлак булып һеңә. Ҡалын эсәккә эш юҡ. Хәҙер хатта айына тик бер тапҡыр ғына оло ярау иткән кешеләр бар. Һәйбәт тормоштоң да кире яҡтары бар икән.

Беҙҙең организмға аҡһым һәм крахмалдан тыш, һәр ҡайһыһы етерлек миҡдарҙа углевод, һыу һәм төрлө тоҙҙар кәрәк. Хәҙер бит дөрөҫ тукланырға өйрәтеүсе әллә күпме белгестәр, әҙәбиәттәр барлыҡҡа килде. Бөгөн кешенең тукланыуы дөрөҫ түгел. Китаптар буйынса ашайбыҙ. "Чудо голодания", имеш! Ас йөрөргә ярамай. Ас йөрөгәнсе, көн дә әҙләп аша, артығын ҡапма, тик кәрәклеһен генә ҡабул ит. Тағы ла "Айырым ашау" технологияһын уйлап сығарҙылар. Имеш, итте, картуфты һәм икмәкте айырым-айырым ашарға кәрәк. Уларса иткәндә, тәүҙә беренһен ҡабул итәһең дә, оҙаҡ ҡына көтөп ултыраһың, шунан икенсеһенә тотонаһың. Тимәк, иртәнге ашты мин төшкә тиклем атҡарырға тейеш булып сығам. Медицинаға бер ниндәй ҡыҫылышы булмаған спортсы Малахов "Организмды таҙартыу" тигән хеҙмәт яҙҙы. Илле йылдан ашыу һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә эшләгән осорҙа мин үлгән кешенең эсен ярған саҡта ашҡаҙанын, эсәктәрен күп күрҙем. Улар таҙартылған мылтыҡ көбөгө кеүек ялтырап тора, нимәһен таҙартырға уйлайҙарҙыр, аңламайым.

**Тәлғәт Зөлҡәрнәев:** Дөрөҫ туҡланыу, иң беренсе, самалап ашау ул. Бөгөн артыҡ ашауҙан 40 процент кеше зыян күрә, Өфө ҡалаһының 400 мең самаһы кешеһе артыҡ ауырлыҡ сире менән яфалана. Былар уйландырырлыҡ һандар. Берәйһе ҡорһағы көпәйеп, бите тулыланып, һимерһә: "Ҡалай матурайып, олпат булып киткән", - тип маҡтайҙар. Был дөрөҫ түгел, киреһенсә уға: "Был кеше дөрөҫ тукланмауы арҡаһында ауырыуға әйләнгән бит," - тип әйтелергә тейеш. Артыҡ аш энергияға китмәй, май булып ята.

Дөрөҫ тукланыуҙың икенсе юлы - төрләләндереп ашау. Һуңғы йылдарҙа беҙ күберәген ит, икмәк, картуф ашайбыҙ, балыҡты, йәшелсәне ризыҡҡа һанамайбыҙ. Был шулай уҡ дөрөҫ түгел. Өсөнсө юл - ашау сәнғәте, йәғни йайлап ашау. Хәҙер йәшәү темпы үҙгәрҙе, һәр саҡ ҡабаланабыҙ, бигерәк тә иртәнге һәм төшкө ашты ҡабалан-ҡарпалан, аяғөҫтә генә ҡабул итәбеҙ. Кеше ашағанда кәмендә ярты сәғәт буйы өҫтәл артында ултырырға тейеш. Ҡабаланып ашағанда ашҡаҙанда гастрит башлана. Бигерәк тә мәктәптәрҙә балаларға ашар өсөн ваҡыт етмәй, улар ҡыҫҡа тәнәфестә өҙөп-йолҡоп ҡына ашап ала. Һәр ризыҡты ҡабул итеүҙең үҙ тәртибе булырға тейеш. Иң алда беҙгә йәшелсә, салат кәрәк. Былар ашҡаҙанды әҙерләй, унда һут бүленеп сыға. Аҙаҡ беренсе блюдо, икенсеһе. Иң аҙаҡтан - төрлө тәм-том. Ә беҙ иһә ашауҙың был тәртибен күҙәтмәйбеҙ, берен-берен бутайбыҙ. Әйтәйек, тәм-томдо башта уҡ ҡабул итһәк, ашҡаҙандағы аш көтөп ятҡан һут йәки ашҡаҙан һелтеһе шуға ташлана ла, төп ризыҡты эшкәртер рәте ҡалмай. Һөҙөмтәлә кешенең ашҡаҙаны ауырта башлай. Ашау үҙе бер ритуалға әйләнһен ине. Көнөнә бер тапҡыр ғаилә менән йыйылып ашауға ни етә.

(Дауамы 10-сы биттә).

(Башы 8-9-сы биттә).

# БАЛ ҠОРТОНДАЙ ГЕҮЛӘШЕП,

## йәки Күстең йәшәү өлгөһө милли идея була аламы?

*(№14, 2004 йыл).*

**Бал ҡорттары тормошонда нәселде, затты һаҡлау ниндәй кимәлдә ҡуйылған? Ишетеүемсә, беҙгә ситтән башҡа тоҡомло ҡорттарҙы ла килтергәндәр. Ә бына башҡорт тоҡомло бал ҡорттары улар менән нисек аралаша?**

**Әмир Ишемғолов:** Беҙҙең халыҡта "Ҡыҙ ҡыуыу" йолаһы бар. Башҡорт тоҡомло бал ҡорто инәһе лә, аталаныу мәле еткәс, тап шул йолалағы кеүек, һауаға осоп китә. Уны иң көслө, иң етеҙ ата ҡорт ҡына ҡыуып етә ала. Көсһөҙ ата ҡорттар артта тороп ҡала. Йәғни көслө инә ҡорт көслө ата ҡорттан ғына көслө балалар тыуҙыра. Был хәл тик беҙҙең ҡорттарға ғына хас күренеш. Элек беҙҙең ата-олатайҙар шәжәрәләр төҙөгән. Улар халҡыбыҙҙың тулы ҡанлылығын һаҡлар өсөн никахлашыуҙы тулыһынса күҙәтеү аҫтына алған. Бал ҡорттарында ла был ҡанун теүәл үтәлә. Башҡорт тоҡомло инә ҡорт теләһә ниндәй атанан бала тапмай. Бөгөнгө көндә беҙ был мәсьәләлә бал ҡорттарының йәшәү рәүешенән ныҡ ситләшкәнбеҙ. Үкенескә ҡаршы, бал ҡорто иләүе кеүек геүләп торған көслө мәлебеҙ тарихта ҡалған. Әле беҙҙең ояны ныҡ ҡына туҙҙырғандар. Шулай ҙа киренән бер күскә йыйылыр әмәлебеҙ бар. Милләтебеҙҙе туплар милли идеяны мин ошонда күрәм.

**Ивнәй Шафиҡов:** Беҙ кеше үлгәс кенә, уны күтәрә балайбыҙ, тере саҡта ҡәҙерен белмәйбеҙ. Ә бал ҡорттары тормошонда улай түгел. Әгәр ҙә аслыҡ килгән саҡта ҡорттарҙың береһенең ашҡаҙанында аҙығы булһа, ул шуны ҡоҫоп, башҡаларға ашатып, шунан ғына үлә. Бал ҡорттары үлгән хәлдә лә, барыһы бергә йән бирә. Һәр береһе иң һуңынан инә ҡортҡа аҙ ғына булһа ла аҙыҡ ҡалдырып китә. Иң һуңынан инә ҡорт үлә.

Бал ҡорттары үлемдән ҡурҡмай, ҡурҡыныс тыуғанда үҙе тураһында, үлем тураһында уйламай. Ошо сифат беҙҙең халыҡта ла булған һәм бар.

# ЙӘШЕБЕҘ - ТАРИХ ЙӘШЕНДӘ,

## ә тарих Туфан һыуы тартылған мәлдән башланған...

*(№36, 2004 йыл).*

**Һуңғы ваҡытта милли идея тураһында күп кенә фекерҙәр ишетергә тура килә. "Тарихыбыҙ, ундағы бөйөклөгөбөҙ тураһында бер туҡтауһыҙ һөйләргә була, әммә унан ғына бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк. Рәсәй өсөн милли идея - конкурентлыҡҡа һәләтлелек. Беҙ бар өлкәлә лә конкурентлыҡҡа һәләтле булырға тейешбеҙ", - ти Рәсәй Президенты Владимир Путин.**

**Әсхәл Әхмәт-Хужа:** Ғәфү итһен мине Владимир Владимирович, әммә беҙ Америка һәм ҡайһы бер Европа илдәре миҫалына ғына таяна алмайбыҙ. Улай итһәк, беҙҙе бар милләттәрҙең тигеҙләшеү ҡурҡынысы көтә, йәғни беҙ тулыһынса был илдәр кеүек йәшәй башларға тейешбеҙ булып сыға. Беҙ заманаға һәм цивилизацияға милли традицияларыбыҙ нигеҙендә генә яраҡлашырға тейешбеҙ. Бай конгломерат булғансы, урта хәлле башҡорт булғаның мең артыҡ. Ҡытай, Япония, Һиндостан илдәре заманға милли традициялары нигеҙендә яраҡлашты һәм яңылышманы.

Салауат батырыбыҙҙың байрам көндәре барған ваҡытта Дәүләт Йыйылышының ике депутаты менән осрашып һөйләшергә насип булды. "Салауатты бигерәк фетишҡа әйләндереп бөтөрҙөләр," - ти тегеләр. Мин уларға: "Дөрөҫ эшләйбеҙ", - тип яуап бирҙем. Салауат Юлаев Башҡортостаныбыҙҙың үткәнен дә, бөгөнгөһөн дә, киләсәген дә бөтөн тулылығында сағылдыра. Ни өсөн тигәндә, ул үҙ халҡын һәм башҡа халыҡ вәкилдәрен ирекшы тормош, азатлыҡ өсөн изге яуға әйҙәй алған, аҙаҡтан халҡы менән бергә тамуҡ ғазабын да татыған шәхес. Салауат Юлаев Рәсәйҙең берҙән-бер шундай батыры.

Быйыл Салауат Юлаевтың 250 йыллығын, ә киләсәктә йыл һайын уның байрамдарын үткәреү тураһында ҡарар ҡабул иткән Президентыбыҙҙың аҡылына ғына түгел, ғаҡылына ла һоҡланам. Бына ҡайҙа ул - милли идея. Башҡорт халҡын, Башҡортостан халҡын айырым алғанда бер ҡурай, йәки булмаһа, оҙон көйөбөҙ, йә булмаһа, бейеү генә туплай алмай. Ә Салауат ошо төшөнсәләрҙе генә түгел, барлыҡ халыҡтарҙы үҙ янына туплап, азатлыҡ өсөн бөйөктәрҙән-бөйөк империяға ҡаршы сыға алған. Милли идеябыҙ - Салауат рухына тоғролоҡ, уның маҡсаттарын тормошҡа ашырыу, күнелендә ошо ергә, уны төйәк итеүсе халыҡҡа ихтирам, һөйөү тойғоһо йөртөү. Милләтте ҡаҡшамаҫ, берҙәм итә торған көс бына ҡайҙа ул! Салауат иң ауыр заманда, күпме ваҡыт үтһә лә, халҡын кире туплай алырлыҡ көскә эйә. Халыҡ күтәрелеше ваҡытында Кинйә Арыҫлановтың да роле ҙур була, әммә ул көрәш тамамланыптамамланмаҫтан юҡҡа сыға, Салауат иһә, халыҡ менән бергә ғазапланыусы герой. Салауат яуынан һуң ил ҡанға батырылған, шулай булғас, уның халҡы алдында гонаһтары ла күп, шулай ҙа халҡы үҙе менән бергә ғазапланған батырын ярлыҡаған. Мирас Иҙелбаев Салауат Юлаевты юлбаҫар Робин Гуд менән сағыштыра, ә мин уны азатлыҡ хаҡына терелә яндырылған Жанна Д Аркҡа тиңләр инем.

**Радик Өмөтҡужин:** Милли ғорурлыҡ әле беҙҙең көнкүреш кимәлендә генә йәшәй, ул әле юғары даирәләргә сыҡмаған. Бының сәбәптәрен мин бөтөн Рәсәй кимәлендә милләтебеҙҙе төп персонаж итеп беренсе урынға ҡуйып яҙылған тарихи хеҙмәттең, китаптарҙың булмауында ла күрәм. Бар ул тарихи китаптар, бөйөк хеҙмәттәр. Тик уларҙа ла беҙ башҡа халыҡтарҙың бер өлөшө, башҡа тарихтың бер хәтирәһе генә булараҡ һүрәтләнгәнбеҙ.

Шундай хәлгә лә аптырайым: беҙ үҙебеҙҙең Башҡортостанда милли үҙәктәр төҙәйбеҙ, шундай хәлгә барып еткәнбеҙ. Әгәр ҙә республиканан ситтә булһа, был хәл аңлашылыр ине. Был - нонсенс, үҙебеҙҙең йорт эсенә тирмә һалып ҡуйған кеүек. Һуңғы ваҡытта беҙ күберәк тарихҡа мөрәжәғәт итәбеҙ, был хәл аңлашыла ла. Сөнки тарихты байҡау - киләсәккә юл эҙләү ул. Тормошобоҙҙағы кризис бына талап итә, әммә был осор оҙаҡҡа һуҙылырға тейеш түгелдер. Тағы ла милли ориентир менән генә йәшәп, кешеләр флюгерға ла әйләнеп китеүе ихтимал. Икенсенән, бөтөн ил буйынса йәшәү минимумын тәьмин итмәйенсә тороп, рух тураһында ғына һөйләү ситен кеүек. Хәҙер беҙ хөкүмәт кенә беҙҙе ашатыр, кейендерер тигән аңлауҙан алыҫая барабыҙ һәм был - ыңғай күренеш. Көндән-көн кеше үҙ ихтыярына үҙе баш булып, үҙ-үҙен тәьмин итеүгә күсә бара.

# МИЛЛИ ФӘЛСӘФӘ НИГЕҘЕ

## Ул диндәме, әллә мифологиялағы?

*(№47, 2004 йыл).*

**Милли идея - ул милли фәлсәфәнең дә бер өлөшөләр, күрәһең, йәғни милли фәлсәфәне яҙмайынса тороп, милли идея хаҡында һүҙ йөрөтөп тә булмайҙыр...**

**Салауат Ғәлләмов:** Милли идеябыҙҙың башы мифологиябыҙҙа ята. Гендарыбыҙҙа ойоған шундай боронғолоғобоҙ, "Урал батыр" рухы йәшәмәһә, беҙ тарихтағы ҡайһы бер ҡәүемдәр кеүек, әллә ҡасан уҡ ер йөҙөнән юҡҡа сығыр инек. Беҙҙе һаҡлап ҡалыр көс, идея милли рухыбыҙҙы тергеҙеүҙән башлана. Мифологияла милли рух менән бергә булмышыбыҙҙы һаҡлаусы изге йолаларыбыҙ ҙа һаҡлана. Мин сит илдәрҙә күп йөрөнөм. Бөтөн ерҙә лә көслө дәүләт булып йәшәгән милләттәр үҙҙәренең боронғо йолаларын аныҡ үтәй. Беҙҙе бер ҡорға туплаусы ундай милли йолабыҙ йыйын йәки һабантуй була ала. Совет осоронда һабантуйҙың мәғәнәһе сәсеү тамамланыу осорона тап килтерелеп, ныҡ тарайтылды, ә ысынында иһә, һабантуй башҡорт өсөн ауыр ҡыштан һуң тәбиғәт менән һаулыҡ һорашыу байрамы булған. Милли идея айырым көн, сара йәки байрам да түгел, ул көндәлектәге йәшәү, йола үтәү рәүеше. Иртәнсәк йоҡонан торғанда радионан көн һайын "Урал батыр" эпосынан бер өҙөк уҡылһа, ул шулай уҡ мәктәп коридорында, йәмәғәтселек урындарында мәсеттәге аҙан кеүек яңғырап торһа, беҙ бөгөн милли идея эҙләп тә ултырмаҫ инек.

Аңдың яҡтылығы рух тип атала, шуға күрә милли идеябыҙҙың иң төп маҡсаты милли рухты һаҡлау булһа, беҙ тик аңыбыҙҙы Урал батыр рухы менән балҡытып ҡына үҙ-үҙебеҙҙе һаҡлап ҡала алаcаҡбыҙ. Һәр бер башҡорт аҡыл эйәһе милли идея тураһында туктауһыҙ уйланырға, шул уй менән йәшәргә тейеш.

**Илгизәр Диккәт:** Милли идея - ул һәр халыҡтың булмышында. Халыҡ бар икән, бөгөнгө көнгә тиклем йәшәйбеҙ икән, тимәк, милли идеябыҙ ҙа бар. Уны булдырыу тураһында уйланабыҙ икән, тимәк, булғанды күрә белмәйбеҙ. Беҙгә ижадыбыҙҙы тәрәнерәк байҡарға, олатайҙарыбыҙҙың беҙгә ни тип әйтергә теләгәнен аңларға һәм рухи ҡиммәттәребеҙҙең юғала башлаған өлөшөн тергеҙергә кәрәк. Ҡиммәттәрҙең береһе - туғанлыҡ. Был милли идея түгел, уның бер тармағы ғына. Чечендарҙа туғанлыҡ буйынса ойошоу беренсе урынға ҡуйылған. Урыҫтар, мәҫәлән, элек-электән дуҫлыҡ, иптәшлек принциптары буйынса дружинаға ойоша, татарҙар уртаҡ маҡсат буйынса командаға берләшә. Дружина ағзалары ғүмерлек бәйләнештәр булдырһа, команда берәй маҡсатҡа ирешкәндән һуң, нисек йыйылған булһа, шулай уҡ таралышып китергә лә мөмкин. Урыҫтарҙа - дружина принцибы, татарҙарҙа команда ысулы һаман да һаҡлана. Ә туғанлыҡҡа килгәндә, ҡан принцибы буйынса уҡмашҡан төркөмдәр ныҡлы һәм мәңгелек булырға тейеш булһа ла, беҙҙә был хәл-күренештең киреһе күҙәтелә. Шуға күрә беҙгә иң тәүҙә туғанлыҡ, зат, ара институттарын киренән аяҡҡа баҫтырыу фарыз. Беҙҙә "затымда булмағанды", "ҡанымда юҡ", "ырыуыңа тап төшөрмә", "ағай-эне талаша, атҡа менһә, яраша" тигән һүҙбәйләнештәр һәм әйтемдәр һаҡланып ҡалған. Былар шулай уҡ халҡыбыҙҙы туплауҙа туғанлыҡтың ни тиклем көслө институт булыуы тураһында һөйләй.

# КЕМДӘР УЛАР МАРГИНАЛДАР?

## Ике уртала, юл сатында тороусы, ике ултырғыста ултырыусы, ике кәмәгә баҫып барыусы, ике ҡандан ялыусы...

*(№17, 2005 йыл).*

**Маргиналлыҡты глобаллашеү шарттарында кешенен, этностың һаҡланыу сараһы һәм ысулы итеп тә аңлап була бит, әллә киреһенсәме?**

**Сәлимә Дүшәнбаева, психология фәндәре кандидаты:** Глобаллашеү шарттарында сер ҡалмаясаҡ, йәғни ҡыҙыҡһынған кеше барлыҡ мәғлүмәткә лә эйә буласаҡ. Элекке замандарҙа бөтә кеше лә белергә тейешле булмаған серҙәрҙе күҙ ҡараһылай һаҡлай белгәндәр. Ырыуҙың нәҫел ебе теркәлгән шәжәрәһен, йондоҙҙар хаҡындағы белемде ҡанбабалар һаҡлаған. Хәҙер барлыҡ серҙәр асылды, әммә уларҙы ҡулланыу этикаһы бөтә кешелә лә формалашмаған. Тимәк, был йәһәттән фажиғәләр ҙа көтөргә була. Бер аҡыл эйәһенә йәштәр килеп, үлеләрҙе терелтә торған тылсымлы һүҙҙәрҙе әйтеп биреүен һораған. Аҡһаҡал тәүҙә уларға был тылсымлы һүҙҙәрҙе әйтмәгән, әммә тегеләр төрлө юлдар менән унан серҙе әйттереүгә ирешкән. Шунан һуң йәштәр сүллек буйлап киткән һәм шау һөйәктән торған өйөмгә юлыҡҡан. Йәштәр теге тылсымлы һүҙҙәрҙе әйтеүе булған, һөйәктәргә ит үрә башлаған. Бер аҙҙан уларҙан бүреләр барлыҡҡа килгән һәм йәштәрҙе өҙгөләп ташлаған. Глобаллашеү шарттарында ла барлыҡ кешеләр ҙа белергә тейешле булмаған серҙең һәм мәғлүмәттең шул уҡ кешеләрҙе юҡ итеүе бар.

Ер шарында бер үҫемлек йәки бөжәк төрө юҡҡа сығыу ҡурҡынысы тыуһа, бар донъяға ишеттереп саң ҡаға башлайҙар. Ә инде ниндәйҙер аҙ һанлы халыҡтың, этностың юҡҡа сығыуы бер кемде лә борсомай. Бынан бит шуны аңларға була: кеше һәм этнос мәнфәғәте башҡа барлыҡ тереклек мәнфәғәтенән дә түбән.

**Вадим Сафин, психология фәндәре докторы:** Глобаллашеүҙе Япония һәм Ҡытай кеүек илдәр еңел кисерәсәк, сөнки уларҙа сәнәғәт һәм сәйәсәт этник нигеҙгә ҡоролған, шуға күрә лә унда маргиналдар юҡ. Хәҙер дөйөм рухи донъя хаҡында йыш һөйләйҙәр, был - иллюзия. Киреһенсә, һәр бер этностың рухи донъяһы бар. Тик һәр этностың мәҙәниәтен, рухын үҫтереп кенә, уны башҡа этностарҙың рухи-мәҙәни донъяһы менән аралаштырып ҡына һаҡланып буласаҡ.

Глобаллашеүҙең икенсе, кире яғы ла бар, йәғни унда совет осорондағы кеүек "әхлаҡты интернационализациялау" күренеше ҡабатланһа, глобаллашеү ҡапма-ҡаршы йүнәлеш алып, кешелек глобаль катастрофаға, глобаль шартлауға юлығыуы, үҙе һалған минаға үҙе баҫыуы бар. Ни өсөн тигәндә, глобаллашеүҙең генераль репетицияһын Рәсәй социализм осоронда коммунизм идеологияһы менән һуғарып, бер тапҡыр үткәрҙе бит инде. Ни генә тимәйек, "совет кешеһе" милләтһеҙ, рухи тамырһыҙ шул уҡ маргинал булған бит. Бында ла бөгөнгө Рәсәй сәйәсмәндәре шул уҡ тырмаға яңынан баҫырға самалай. Һәр бер этнос - ул тәбиғәт емеше, тинек, ә тәбиғәт үҙенә ҡаршы барғанды бер ҡасан да ғәфү итмәй, үс ала. Глобаллашеү һәр этностың һәм диндең мәнфәғәтен иҫәпкә алыу менән бер рәттән, төрлө этностарға һәм диндәргә уртаҡ булған ҡиммәттәргә лә таянырға тейеш.

***✓ Хужа был көтөлмәгән осрашыуҙың хәйерлегә тамамланыуына тамам өмөтөн өҙҙө. Тағы ниндәй һынауҙар аша үтәһе бар Хөбөтдиновҡа? Тәктән юҡҡа йөрөмәй бит шундай дәрәжәле кеше.***



Икенсе берәү урынынан ҡуптарыла:

- Матур һүҙҙәр күп әйтелде был табында. Улар тәғәйен эйәһенә тамам ғына... Мин тағы ла шуны өҫтәр инем... - башҡараҡ һүҙҙәр менән, миҫалдарға таянып, шундай уҡ маҡтау тағы яңғырай. Сит ҡолаҡҡа ялҡытҡыс, буш һәм мәғәнәһеҙ һүҙҙәр теҙмәһе. Ә байрам сәбәпсеһе, табын хужаһы, ҡояштай балҡып, уларҙы ихлас, инанып ҡабул итеп ултыра. "Коллегалар, шапыртмағыҙ артыҡ, мин һеҙҙең кеүек үк гонаһлы зат", - тип әйтергә уҡталып та ҡуймай, исмаһам. Лайыҡлымын, тейеш, ти бар булмышы уның, маһайып, ҡайҡайған башын тағы ла юғарыраҡ сөйә.

Икенсе осраҡта шундай уҡ мәжлестең түрен коллегаларының бүтәне биләй. Сама менән шундай уҡ сценарий буйынса, бәлки, саҡ ҡына төҫө ҡайтышыраҡ шул уҡ һүҙҙәр ҡабатлана. Тик улар төбәлгән ҡолаҡтар ғына башҡа. Бере-береһенән шул тиклем маҡталған кешеләр, әлбиттә, бер команда, бер ҡор тоя үҙҙәрен. Ул тиклем күккә сөйөп ҙурланып, иртәгәһенә башын эйеп әрләнеп тора алмай бит түрә кабинетының келәмендә. Тырыша, хужаның һүҙен йыҡмаҫ өсөн сәсе менән уның юлын һеперергә әҙер.

- Отчетты боҙаһығыҙ, - ти, ғәҙәттә, Хөбөтдинов сабый бала дауаханала үлеп ҡалһа ла, йәш кеше башын элмәккә тыҡһа ла, еңел атлетика буйынса ҡала ярышында "Наркотиктарға - юҡ!" тип яҙылған плакат эленеп тормаһа ла. Аяныслы был хәлдәргә илткән сәбәптәрҙе асыҡларға, саралар күрергә кәрәклеге тураһында фекер уның башына инеп тә сыҡмай. Яуаплы кешеләр бар, уйлаһындар, эшләһендәр! Әйтелгән: "Проблеманы хәл итеүҙә ведомство-ара бәйләнештәр генә уңыш алып киләсәк. Мин бының фәҡәт дөрөҫ булыуына тәрән инанам, иманым камил... Мәсьәлә кисектермәй хәл ителергә тейеш! Һүҙем тамам, башҡа һорауҙар булмаһа - эшкә!"

Ғәжәп, һөҙөмтә бирә тылсымлы был доға. Матур отчет - күҙ буяулыҡ оҫтаһы ул. Мандариндарға был йәһәттән кешелек тарихында етеүсе булмаған. Беҙҙең осраҡта, матур отчет - сираттағы наградаға тура юл. Ә награда, белеүебеҙсә, Хөбөтдиновтың ауырыуы. Шуға ла ул барлыҡ күрһәткестәрҙе лә ентекле тикшереп бара, диаграммаларҙа, графиктарҙа һандарҙың аҫҡа ҡолауын күрһә, ҙур ғауға ҡуптара, барыһын да аяҡҡа баҫтыра, кәрәк һандар яҙҙырта.

Мандариндарҙы башҡаларҙан өҫкө кейеме һәм һәр осраҡ өсөн айырым ҡатмарлы церемониялары ла айырып торған. Көйәҙ өҫ-башлы Хөбөтдинов ни ере менән мандариндан кәм? Ә бер ҡалыпҡа һалып алған кәңәшмәләр, байрамдар, башҡа саралар һуң? Билдәле бер урында билдәле һүҙҙәр әйтеүсе? Сихырсының әүрәткес һын-хәрәкәттәре, кинәйәле һүҙҙәре...

Идеалдың наградалар йыйылмаһы ла ярайһы һәлмәкләнде был урынды биләгән ун йыл эсендә. Илле биш йәше тулыу айҡанлы ул Рәсәйҙең атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре исемен алды. "Йәмәғәт тәртибен һаҡлауҙа өлгө күрһәткәне өсөн" миҙалы артынан ярайһы ҡыуҙы. Таһыллы һунарсылай, кәрәкле урындарға тоҙаҡ ҡорҙо, ҡапҡан һалды, уларға илткән һуҡмаҡтарҙы емләп торҙо - иллә мәгәр миҙалды эләктерҙе. Миҙал бит ҡағыҙ кисәге түгел - күкрәккә тағыла, эйәһе менән кеше алдына сыға. Аһ, итә уларҙың тоноҡ алтын һарыһына бар ғәм. Ҡандай ғорурлыҡ, ниндәй кинәнес, башҡаларҙан айырып, һине иғтибар үҙәгенә алыуҙары!




### 5

Хөбөтдинов Идеал Салют улы яңы вазифала ике йылдан ашыу. Киң, яҡты, бейек түшәмле кабинетында ултырып эшләгән һәр минутын йөрәге аша үткәреп, сикһеҙ кинәнес кисерә. Иртәнсәк уянғанда, өйҙән алырға килгән машинаға ҡайҡая биреп ултырып алғанда, сәркәтибен сәләмләгәндә, кабинетының ишек тотҡаһына тотонғанда, йомшаҡ креслоһына барып ултырғанда кисергән уй-тойғоларын ҡыҫҡа бер һөйләмгә һыйҙырырға мөмкин. Ул да булһа: "Китсе, мин - министр урынбаҫары!"

Бөгөн дә ошо ләззәттән уны бер кем дә мәхрүм итмәне. Сәркәтибе кистән индереп өҫтәленә һалған эш графигына күҙ ташланы. Алты кәңәшмә ҡуйылған. Ун биш кенә минут арауыҡ менән.

Әлегә - һиллек. Борсоған кеше юҡ. Идеал эш башлар алдынан ҡыҫҡа ғына бер мәлгә тәҙрә эргәһенә килеп баҫа. Шулай ғәҙәтләнгән. Илһамланып, матур бер картина кеүек, көҙгөләгеләй йәйрәп ятҡан баш ҡалаға баға:

"Ғүмер ике килмәй,
Уттар ике һүнмәй,
Беҙ - мең янып тик бер һүнгәндәр.
Өфө йүкәләре
Беҙҙең хаҡта ла әле
Япраҡ ҡоя-ҡоя һөйләрҙәр",

- тип эстән генә көйләп тә ала ҡайсаҡ.

... Ағиҙелдә аҡ йылға карабы йөҙөп бара. Таҙа урамдар машина, кешеләр менән тулған, сабылған газондар, алһыуланған сәскә түтәлдәре күҙҙең яуын ала. Эсе төшмәс элек тип, эшсе шул йәшеллеккә һыу һибә. Бала сағын иҫенә төшөрөп, шул яһалма ямғыр аҫтына барып торһаң ине, тип уйлап алды Идеал. Үҙҙәренең баҡсаһында ул гел шулай шаяра торғайны. "Әле иртә, һыуы һалҡындыр", - был уйҙарынан йөҙөндә йылмайыу хасил булды. Рәхәт Идеалға ошо минуттарҙа, бәхет кисерә, рәхмәттәр уҡый яҙмыштың уға ҡарата шулай рәхимле булыуына!

- Эшкә, иптәш Хөбөтдинов, - үҙе-үҙенә бойороҡ бирҙе лә, өҫтәле артына ултырҙы.

Эш өҫтәле - тағы бер сихри донъя, мөғжизәләр яланы. Урал йәшмәһенән эшләнгән ҡыйбатлы канцелярия приборы, унда - осло ҡәләмдәр, алтын ялатылған ручка, ҡағыҙ ҡырҡыу өсөн бысаҡ, лупа һәм башҡа кәрәкле әйберҙәр. Ситтәрәк күҙлек, тағы ручка-ҡәләмдәр, төҫлө ҡағыҙҙар шаҡмағы урын алған. Һул яғында төрлө төҫтәге өс папка ята, ә унда - үҙе яуаплы дәүләт эштәре даирәһенә ҡараған мөһим (!) документтар. Арыраҡ - уҡылмаған гәзиттәр, уларға йәнәш тағы ҡағыҙҙар. Кабинеттың бер стенаһын тотошлай шкафтар биләй. Унда китаптар, сувенирҙар ҡуйылған. Оҙон кәңәшмә өҫтәле ярты бүлмәне алып тора. Айырым өҫтәлдә компьютер урын алған. Төпкө яҡта ишек күренә. Ул ял бүлмәһенә илтә. Диван, телевизор, һыуытҡыс, һауыт-һаба өсөн шкаф, журнал өҫтәле, бер нисә ултырғыс, ғөмүмән, кофе, сәй эсеп алырға, ҡәҙерле ҡунаҡты коньяк менән һыйларға, ятып ял итергә бөтә уңайлыҡтар бар. Идеал креслоға йәтешләп ултырҙы ла устары менән өҫтәлдең урталағы буш урынын һыпырҙы. Портфелен асты, унан планшетник сығарып, баяғы буш урынға һалды.

Иртәнге туғыҙҙа министр урынбаҫары тәүге кәңәшмәһен үткәрҙе. Ун биш минуттан һуң икенсе төркөм инде. Улары сығып, берауыҡ ҡына тын алыштырғайны, сәркәтибе:

- Идеал Салютович, саҡырылғандар йыйылып бөттө, - тине.

Хужа барыһын да сәләмләне лә, сираттағы кәңәшмәне асты:

- Хөрмәтле коллегалар, бөгөн ҡараласаҡ мәсьәләне беләһегеҙ. Ул уғата мөһим һәм беҙҙән даими иғтибар талап итә. Һүлпәнлек был юҫыҡта урынһыҙ, - Идеал телмәрен башлаған ыңғайға ҡағыҙҙарын аҡтарҙы. Кәрәген таба алмай хитланды. - Шуға күрә ошо мәсьәләне урын-еренә еткереп атҡарып сығыр өсөн бөтә көстө фәҡәт...

Ярты һүҙҙә туҡтап ҡалды ла, өҫтәлдәге ҡағыҙҙарҙы ентекләберәк ҡарай башланы. "Хәйерһеҙ", - тип эстән үҙен әрләне. Күҙҙәрен дүрт итеп текләп ултырған был әҙәмдәрҙе нимәгә йыйып ултырыуын хәтерләй алмай йөҙәне министр урынбаҫары. Ниндәй мәсьәләне тикшерергә тейештәр һуң, нимәне планына алғайны?

Юҡ, иҫенән сыҡҡан, әйтерһең, компьютерҙағы мәғлүмәтте юйып ташлағандар. Бер кнопкаға ғына баҫҡандар - файл юҡҡа сыҡҡан. Идеалдың да шундай кнопкаһы бармы әллә? Башын күтәреп, өҫтәл артында ултырыусыларға күҙ йөрөттө. Исмәғилов - өҫтәмә белем биреү, Мөхитов - хужалыҡ эштәре, Сапарова дәүләт имтихандары буйынса... Юҡ, вазифаларына ҡарап кәңәшмәнең көн тәртибе ебе осон тота алманы.

- Балаларҙың йәйге ялын мәҙәни йәһәттән байыҡтырыу, - кемдер шыбырҙаны.

- ...Эйе, мәҙәни йәһәттән байыҡтырыуға йүнәлтергә кәрәк, - Хөбөтдинов бер ни булмағандай һүҙен дауам итте.

Эҙләгән ҡағыҙы алдында ятҡан да баһа. Күтәрелгән теманы онотҡас, уға иғтибар итмәгән, ҡаҡ баш.

* * *

Хөбөтдиновтың аралашҡан дуҫтары лә хәҙер затлы: фән докторҙары, әйткәндәй, ул үҙе лә кандидатлыҡҡа диссертация яҡланы (дөрөҫөрәге, һатып алды, тиһәң дә яҙыҡ булмаҫ), әртистәр, төрлө кимәл етәкселәр. Юбилейҙарға йөрөшәләр, башҡа сәбәптәрҙә осраштырып тора уларҙы. Һәр кемдең үҙ тараҡандары, тигәндәй, кемдер мөккибән китеп баҡса үҫтерә, башҡа берәү бассейнлы өй һалған, өсөнсөлә оҫтахана бай инструменттары менән күҙҙе ҡыҙҙыра. Ә Яҡупов иптәш өйөнөң подвалында музей ойошторған. Экспонаттар уның үҙе һәм нәҫеле тураһында бай мәғлүмәттәр бирә. Яҡупов та данлыҡлы шәхес икән - наградалары Идеалдыҡынан күп булмаһа ла, кәм түгел. Бала саҡтан бөгөнгө көнгә хәтлем йыйған баһаламанамәләренә вис урын тапҡан. Проектор ҡуйған, уның аша фотолар күрһәтә. Яҡупов - министр менән, Яҡупов - президент ҡулынан награда ала, Яҡупов - кәңәшмәлә, Яҡупов - ялда ...

Музей нығ тәьҫир итте Идеалға. Хөбөтдинов та үҙ музейын эшләү уйы менән янып китте. Өфөгә күсмәҫ борон уҡ башлаған йортон былтыр уҡ төҙөп бөткәйне. Шуның подвалын музейға ҡулайлаштырып эшләтте. Оҫта яллап, бүлмәне матур итеп йөҙләтте, биҙәтте, йылыһын, утын үткәртте, экспонаттарҙы зауыҡ менән урынлаштырҙы. Дан килеп сыҡты музей. Яҡуповтыҡынан да шәберәк. Хәҙер Идеал бөтә буш ваҡытын шунда уҙғара, килгән кешеләрҙе иң тәүҙә подвалға төшөрөп алып китә.

* * *

- Идеал Салютович, һеҙгә Исчурин иптәш, - сәркәтибе телефон аша иҫкәртте, саҡырылмаған ҡунаҡты үткәрергәме, юҡмы, тигән мәғәнә менән.

- Кем ул? Белмәйем ундай кешене, - хан заманында яҙмыш осраштырған әҙәмдең исем-шәрифен әллә ҡасан күңеленән дә, хәтеренән дә юйып ташлағайны Идеал.

- Мәктәптә эшләгәндә Миңлебай дуҫын яҡын белә ине, ти...

- Миңлебай дуҫ?.. Исчурин?.. - трубкала оҙайлы пауза эленеп торҙо. - Үткәр, - хужаның тауышы төшөнкө яңғыраны.

Үткәндәрҙең шандауы ни бысағыма Хөбөтдиновҡа хәҙер. Нимә көҫәп йөрөй тағы был әҙәм? Әгәр этлегенә барып, тағы берәй яманлыҡ уйлап килһә, ҡыуыр ҙа сығарыр. Үҙенең күләгәһенән өркөп йөрөгән уҡытыусы түгел хәҙер, ә министр урынбаҫары ул!

- Дуҫтарҙы онотторға ярамай, - Исчурин күрешер алдынан кабинет хужаһын шелтәләп алды.

- Ней заман үткән бит... - мең йыл күрмәһәм дә, белмәһәм дә яҡшыраҡ булыр ине, тигәнерәк һымаҡ яңғыраны Идеалдың яуабы.

- Күп һыуҙар аҡты, ризамын... Ана, һеҙ ҙә нисек үрләгәнһегеҙ... Кабинет - былай-алайым... Үҙегеҙсе, үҙегеҙ?.. Ил ағаһы! Алаһы ла түгел, бирәһе лә түгел, - ҡунаҡ ихлас йылмайҙы.

- Үҙегеҙ ҡайҙа хәҙер, ни хәлдәрҙә? - Хөбөтдинов Исчуриндан теләһә ниндәй яуап ишетергә әҙер, тик элеккесә органдарҙа, тип кенә әйтмәһә ине.

- Мин шунда, дәүләт именлеге һағында. Полковник погондары йөрөтәм, - хужа был көтөлмәгән осрашыуҙың хәйерлегә тамамланыуына тамам өмөтөн өҙҙө. Тағы ниндәй һынауҙар аша үтәһе бар Хөбөтдиновҡа? Тәктән юҡҡа йөрөмәй бит шундай дәрәжәле кеше.

**(Дауамы. Башы 3-9-сы һандарҙа).**

ИНТЕРНЕТТАН



# МАҠСАТЛЫ БУЛ!

■ Маҡсатҡа ынтылып йәшәү - кеше характерының ыңғай сифаты ғына түгел. Тормошта маҡсат булыуы кешенең физик сәләмәтлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Чикаго психологтары һәм физиологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, маҡсатлы йәшәгән кешеләр араһында иртә һәм осраҡлы үлем һирәк осрай. Бынан тыш, физиологтар әйтеүенсә, маҡсатлы кешеләр хроник ауырыуҙар менән һирәгерәк яфалана, уларҙың һаулыҡ торошо күпкә яҡшыраҡ була.

■ Һирәк тәмәке тартҡан һәм тәмәке тартыуҙың был ысулы һаулыҡҡа зыян килтермәй, тип иҫәпләгәндәрҙең организмы тәмәкене күпләп тартыусыларҙыҡы кеүек үк зарар күрә. Нортумбрия университеты ғалимдары билдәләүенсә, көнөнә 20 тәмәке тартыусы менән 1 тәмәке тартыусы араһында айырма юҡ тиерлек. Доктор Том Хефферсон белдереүенсә, тәмәке тартыусының иң тәүҙә хәтере юғала. "Тартыу хәтер функцияһының түбәнәйеүе, бигерәк тә баш мейеһенең дегенерацияһы, мәҫәлән, уның күләме кәмеү менән бәйле, - ти доктор. - Шуға ла бында тартылған тәмәкенең һаны бөтөнләй мөһим түгел".

■ "Донъяла яңғыҙ кешеләр шул тиклем күп һәм был яңғыҙлыҡ уларҙы яйлап үлтерә" тигәнде ишеткәнегеҙ бармы? Яңы ғына үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙә яңғыҙлыҡ һәм сәләмәтлектең яҡшы булмауы араһында тура бәйләнеш барлығы асыҡланған. Чикаго университетының социаль психологы Джон Качиоппо яңғыҙлыҡтың кеше биологияһына йоғонтоһон тикшереп, шундай һығымтаға килгән. Ҡаҡтиһән, был тойғо гипертонияға, организмдың ялҡынһыныуына, хәтер менән проблемаларға, иммун системаһындағы үҙгәрештәргә килтереүсе веналар склерозы тыуҙыра икән. Кеше араһына сығып йөрөмәгән кешеләрҙең иммун системаһы эшмәкәрлегенең дөрөҫ эшләүе өсөн яуап биргән гендары үҙгәрә. "Кешенең иммунитет күҙәнәктәре һаҡланыу стратегияһына эйә. Яңғыҙ кешеләрҙә стресс һәм психологик факторҙар һөҙөмтәһендә был система әүҙемлеген юғалта. Шул уҡ ваҡытта стресс гормоны кортизол, ҡан баҫымы кимәле күтәрелә, былар иһә үҙ сиратында, инфаркт йәки инсультҡа килтереүе ихтимал. Даими рәүештә депрессия хәлендә булыусыларҙа ҡан әйләнеше системаһы функцияһы боҙола", тип аныҡлыҡ индерә Качиоппо. Бындай кешеләр яңғыҙлығына шул тиклем өйрәнә һәм арҡамды кире ҡаға.

■ Әфлисунда, грейпфрутта һәм башҡа цитрус емештәре составындағы берләшмәләр ҡатын-ҡыҙҙар араһында инсульт хәүефен түбәнәйтә. Норвичтағы Англия Көнсығыш университеты ғалимдары көндәлек рационында юғары күләмдәге флавоноидтарға өҫтөнлөк биргән ҡатын-ҡыҙҙар араһында ишемик инсульт менән ауырыу хәүефе 19 процентҡа кәмеүен асыҡлаған. Флавоноидар - флаваноидтарҙың бер төрө, улар башлыса үҫемлектең пигментацияһы өсөн яуап бирә. Флавоноидтарҙың сығанағы булып цитруслылар, еләк-емеш, йәшел сәй, ҡыҙыл шарап, ҡара шоколад иҫәпләнә.

■ Яҡшы кәйеф һыуыҡ тейеүҙән һаҡлай. Дуҫтарың менән күңел асҡан, яратҡан эшең менән шөғөлләнгән, башҡолләй эшкә сумған саҡта һин үҙеңдең иммун системаңды ике көнгә етерлек итеп нығытаһың. Ә насар кәйефтән һуң иммунитет ике тәүлеккә ҡаҡшай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һау кеше насар кәйефтә урамға сыҡһа, шунда уҡ һыуыҡ тейҙереп, ауырып китә ала.

ТӘҮБӘ

**"Киске Өфө"нөң 2003 йылдағы 32-се һанынан журналисыбыҙ Әхмәр Үтәбайҙың Әнүәр Хәлисов тигән псевдоним аҫтында "Мин эсеүемде ташланым" тигән яҙмалары баҫыла башланы. Һандан-һанға тәҡдим ителгән бик тә фәһемле, ғибрәтле, тәрбиәүи яҙмалар ине улар. Бәлки, башҡорт авторының эскелек тигән яман ғәҙәт тырнағынан ҡотолоу юлдары тураһындағы тәүге тәүбә-кәңәш яҙмалары ла ошо булғандыр. Ул кәңәштәрҙе ҡабул итмәүселәр, авторҙы ғәйепләүселәр ҙә табылды. Ә шулай ҙа уны хуплаусылар, хатта редакцияға автор эргәһенә кәңәш һорап килеүселәр күберәк булғандыр. Бер уҡытыусының һөйләгәндәре хәтерҙә: "Мәктәбебеҙҙә юғары класта уҡыусылар араһында алкоголь менән, бигерәк тә һыра менән мауығыусылар барлығын белә инек. Минең класымда ла бар ине ундайҙар. Бер малайыбыҙҙың тамам һыра алкоголигына әйләнә барғанын да һиҙә йөрөй инем. Атай-әсәйе, үҙе менән һөйләшеү ҙә файҙа бирмәне. Бер саҡ башҡорт теле дәресендә балалар алдына "Киске Өфө" гәзиттәрен һалдым һәм ошо "Мин эсеүемде ташланым" тигән мәҡәләнән ҡатмарлы ҡушма һөйләмдәр табып яҙырға ҡуштым. Балалар эш башлағас, иплән кенә теге малайҙы күҙәтәм. Ул дәфтәренә бер нимә лә яҙмай, ә гәзиттәге мәҡәләне уҡыу менән мәшғүл. Ҡыҫҡаһы, ул дәрестән һуң ошо мәҡәләнең дауамын, гәзиттең башҡа һандарын һорап алды. Гәзит килгән һайын, яңы һандарҙы мин уға килтерә торҙом. Малай аҡрынлап кеше рәтенә ҡайта, хатта ошо мәҡәләлә яҙылған ҡайһы бер фекерҙәр менән уртаҡлаша башланы..." - тигәйне ул.**

**Ул саҡта республика районлары һәм ҡалаларында "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте барлыҡҡа килде. Хәрәкәттең лидерҙары Роберт Дәүләтшин, Марат Абдуллиндар төрлө семинарҙар, лекциялар ойоштора башланы. Сараларға әҙерлек барышында шул күҙгә ташланды: халыҡҡа эскелектең ниндәй ҙур афәт икәнен аңғартырлыҡ бер ниндәй күргәҙмә асбаптарыбыҙ ҙа, китаптарыбыҙ ҙа юҡ икән. Бына шул саҡта "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте егеттәре гәзитебеҙҙә баҫылған ошо яҙмаларҙы "Мин айыҡ тормош башланым" тигән баш менән китап итеп баҫтырып сығарҙы. Гәзитебеҙҙең был һанында шул яҙмаларҙы ла иҫкә алып үтәйек.**

# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ...



## ИНЕШ ҺҮҘ

Рәсәйҙә алкоголь-наркотиктар мәсьәләһе ҡоттар алынырлыҡ хәлдә бөгөн. Шуға ла ҡайһы берәүҙәр, беҙ эскелеккә ныҡлап бирелгәнбеҙ, иҡтисад һәм сәйәсәт тулыһынса алко-наркомафия ҡоллоғонда, шуға ла был проблеманы яҡын киләсәктә генә хәл итеп булмаясаҡ, тип ышандырмаҡсы, үҙендәге күңел төшөнкөлөгөн, өмөтһеҙлөктө бар йәмғиәтҡә күсермәксе.

Ысынлап та, был мәсьәләгә бер яҡлы ғына ҡарауы ҡыйын: ҡый үләненең тамырҙарын йолҡмай тороп, бер-бер артлы һәм планлы эштәр башҡармай тороп, эскелеккә һәм наркоманлыҡҡа һөҙөмтәле көрәш алып барыуы ҡыйын.

Проблеманы хәл итеү, тамырынан ҡоротоу юлдарын беҙ ошоларҙа күрәбеҙ:

- йәмғиәттә хөмерҙән баш тартыусылар, айыҡлыҡты яҡлаусы иҗтимағи хәрәкәттәр артырға, халыҡты ошо афәттәрҙән ҡурсалаусы закон акттары ҡабул ителергә тейеш;

- дәүләттең халыҡты эсереүгә ҡоролған сәйәсәте уны айыҡтырыуға йүнәлдерелгәне менән алыштырылырға тейеш;

- айыҡ йәш быуын тәрбиәләүҙә ватаныбыҙҙың һәм сит илдәрҙең алдынғы тәжрибәһе ҡулланылыуы шарт;

- власҡа Норвегия, Швециялағы һымаҡ халыҡ ихтирамын яулаған айыҡ етәкселәр килеүе мотлаҡ;

- айыҡтырыу фәненең үҫешеүе мөһим;

- депутаттар корпусы үҙ миҫалында айыҡлыҡ өлгөһө күрһәтергә тейеш;

- уҡытыусылар, табиптар һәм йәштәр комитеттары-ойошмалары лидерҙары хөмергә "Юҡ!" тип әйтергә тейеш;

- барлыҡ киң мәғлүмәт саралары журналистары үҙҙәрен, уҡыусыларын, тыңлаусыларын, тамашасыларын айыҡтырыу юлына баҫтырыуға хеҙмәт итергә тейеш;

- Ватаныбыҙҙы әхлаҡһыҙлыҡ һаҙлығына батырырға, юҡҡа сығарырға ынтылған көстәрҙең юҡҡа сығыуы мотлаҡ;

- "Айыҡ тормош, тыныслыҡ" һүҙҙәре сәйәсәттең төп оранына әүерелергә тейеш;

- айыҡтырыу хәрәкәтенә илебеҙҙең дини конфессияларының әүҙем ҡушылыуы бик мөһим;

- Рәсәй Президенты, уның артынан төбәк етәкселәре лә, был мәсьәләлә ҡәтғилек күрһәтеп, халыҡты айыҡтырыуға йүнәлтелгән ҡарарҙар, программалар ҡабул итергә тейеш.

Һәм тағы... "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте эскелеккә, эскеселәргә ҡаршы көрәшмәй, ә айыҡ тормош өсөн көрәшә һәм был көрәштә тәү сиратта балалар, йәштәр, уҡытыусылар, табиптар, журналистар, етәкселәр үҙҙәренә теләктәш, фекерҙәш, көрәштәш булыр, тип ышана.

*1998 йылдың 19 июль төнө...*

Донъяға өр-яңынан тыуған көнөм, йәғни төнөм. Ғәжәп, тәүге тапҡыр ҙа мин төндә тыуғанмын. Икенсе тыуған төнөмдә мин "Тәүбә төнө" тип тә атайым. Ни өсөн тиһегеҙме? Сөнки мин тап шул мәлдән башлап Шешәбикә ханым менән хушлаштым. "Талаҡ" әйтеп айырылышым үҙен. Мине юғалтыу ҡайғыһынан үкереп илап ятып ҡалды ул. Шешәбикәне айырыу рәхәт ул, тик бына унһыҙ яныса йәшәргә өйрәнеүе ауыр. Хәйер, был хаҡта алдағы һабаҡтарымда һүҙ булыр.

Был "ҡара яу" афәтенән мин үҙ-үҙемде ҡулға алып, тик ихтыяр көсө арҡамында ғына ҡотолдом. Бер ниндәй ҙә медицина, нарколог арҡамына таянманым. Алдараҡ нарколог арҡамына ла мөрәжәғәт итеп ҡарағаным булды. Әммә һәр бер "туҡталыу" яңынан "ысҡыныу" менән тамамланғас, бындай арҙамдың үҙ-үҙеңде алдау икәнлеген генә аңланым. Әммә эскене үҙ ихтыяр көсөгөҙ менән ташлай алған хәлдә лә, организмды нормаль йәшәү режимында тотоу өсөн медицинаға мөрәжәғәт итмәйенсә лә булмай. Сөнки алкоголдең һеҙҙең организмда үткәргән емерткес сәйәсәтенең һөҙөмтәһен кеше эскене ташлағандан һуң тағы ла 13 йыл буйына татый әле. Тап шундай кризистар һеҙгә ныҡ зыян килтермәһен өсөн дә, хәрби термин менән әйткәндә, "һуғыштан һуңғы емереклектәрҙе аяҡҡа баҫтырыр" өсөн дә медицина арҡамы кәрәк. Тәүге рюмканы ҡулыма 1982 йылда алғайным. Ул саҡта тотош илебеҙ эсә ине. Ауылдарҙа тик эскелек менән үткән туйҙарҙа шундайыраҡ таҡмаҡтар әйтелә ине:

Эс тә ҡуй, эс тә ҡуй,-
Нужа күрмә никакуй.
Ҡиблаларҙан елдәр иҫһә,
Һалам менән тыҡ та ҡуй...
Йә булмаһа:
Араҡыны, пиваны
Беҙ яратабыҙ аны.
Эскәс-эскәс, бер кәритә
Бер тас эсәбеҙ аны...
Йә булмаһа:
Кеше тыуһа, тыуһын әйҙә,-
Ҡаршылайбыҙ ярты менән.
Кеше үлһә, үлһен әйҙә,-
Оҙатабыҙ ярты менән...
Йә булмаһа:
Врачтарға барған инем,-
Йөрәгең "кряк", тиҙәр.
Йөрәгеңдең уртаһына
Йөҙ грамм кәрәк, тиҙәр.

Илем менән бергә мин дә эстем, эсеүҙе йола-традициябыҙға ингән норма һананым. Тәүге сирҡаныстың студент ятағында алдым. Күптәр кеүек һыранан башланым, яйлап-яйлап шарапҡа, араҡыға күстем. Аҙаҡ, был аҙғын Шешәбикәнең ҡолона әүерелеп, 16 йыл ғүмеремде әрәм иттем. Эскелектә аҙғын ҡатынға сағыштырыуым да юҡтан ғына түгел: ул үҙе һәр саҡ һинә ҡосағын йәйеп тора, тәм итһән, күңелле һымаҡ, тормоштағы ҡытыршылыҡтар тигеҙләшә, ә ул: "Тағы, тағы, йә..."- тип ымһындыра. Әммә шул уҡ "катын" иртәгәһен эсендә үлеп яткан бесәйгә

әүерелә. Тышҡа сығып, кире ҡосағына ташланыр өсөн йәнә ирендәреңде тейгеҙеүҙе һорай, талап итә. Саҡ-саҡ ҡына ауыҙға алдыңмы, тәүҙә ҡып-ҡыҙыл булып биткә сыға, аҙаҡ булмышыңа күсеп, тағы ла һиндә йәшәүен дауам итә.

Нисек эскене ташларға һуң? Никахһыҙ ҡауышҡан был "албанкы" ҡатындан нисек ҡотолорға (беҙҙең яҡта аҙғын ҡатындарҙы албанкы тиҙәр)? Ғәҙәттә, эсеүен ташларға уйлаған кеше, үҙендә көс тапмаһа, наркологҡа йә психологҡа бара. Нарколог медицина препараттары менән дауалай, әммә дарыуҙарҙың көсө ваҡытлыса ғына. Аҙаҡ дарыу һәм башҡа сараларҙың көсө бөткәс, киренән эсә башлаған кеше эскелек һаҙлығына тағы ла нығыраҡ бата. Мейегә төрлө нурҙар ярҙамында тәьҫир итеп дауалауҙың кешенең аң һәләтендәге кире һөҙөмтәләре хаҡында ла күп ишеткәнем бар. Психолог иһә, һиндә булған ыңғай көстәрҙе уятып, был сиргә ҡаршы йүнәлтергә тырыша. Әммә психолог туҡтауһыҙ ҡатмарлыҡтар тыуҙырған тормош юлында һәр саҡ яныңда була алмай. Ә бит кеше ауырлыҡтар алдында үҙ-үҙен еңә алмаған осраҡта рюмкаға үнтыла.

Үҙаллы, тик ихтыяр көсө менән был афәттән ҡотолоу мөмкинме? Үҙемдең тәжрибәнән сығып әйтәм: мөмкин! Тәүбә төнөнән алып бөгөнгәсә кисергәндәремде иҫләй торғас, ҡыҙыҡ ҡына яҙмалар барлыҡҡа килде. Үҙҙәре был ҡоллоҡтан ҡотолорға теләп тә, көстәре, ихтыярҙары етмәгәндәргә ошо яҙмаларымды тәҡдим итәм. Бәлки, ярҙамым да тейер. Был яҙмаларымды шартлы рәүештә "Һабаҡтар" тип атаным. Һабаҡтарым "Киске Өфө" гәзитендә баҫылып сыҡҡандан һуң уларҙың йөғонтоһонда минең арттан әйәреп эскелектән ҡотолоусылар, хатта үҙ яҙмаларын тәҡдим итеүселәр ҙә булды. Улар ҙа баҫылып сыҡты гәзиттә.

Әлбиттә, был "Һабаҡтар" баҫыла башлағас, үҙ ризаһыҙлығын белдереүселәр ҙә табылды. Иң тәүҙә урта мәктәптә физкультура дәресенән уҡытҡан уҡытыусым Халис Килдеғошов шылтыратты. "Ҡустым, был яҙмаларыңды гәзиттә биреүҙе кисекмәҫтән туҡтат. Донъяла ниндәй генә кеше юҡ. Улар һине барыбер "эскесе", тип беләсәк, исем һатма...", тине. Бер яҡтан уйлағанда, уның һүҙҙәрендә дөрөҫлөк тә бар һымаҡ. Сөнки, батырсылығың етеп: "Мин эсеүемде ташланым...", - тип әйтер өсөн: "Мин ҡасандыр эскесе инем...", - тигәндә таныуға тура килә бит. Һыуға сумып, сыланмайынса сығып булмай.

Әмин бына шул юлға барҙым: минең өсөн үҙемдең ҡасандыр әүҙем эсеүемде таныуға бәйле абруйым төшөүҙән ҡурҡыуға ҡарағанда, башҡаларҙы, бигерәк тә йәштәрҙе донъяның ошо ҡара яғынан ҡурсыу, иҫкәртеү мөһимерәк. Әгәр ҙә урамда үҫмерҙәр, мәктәп уҡыусылары ҡулына китап урынына һыра шешәһе тотоп йөрөй һәм донъяла әҙәбиәт, әхлаҡ, иман төшөнсәләре барлығы хаҡында белмәй икән, ниндәй генә бөйөк әҫәрҙәр ижад итһәм дә, мин үҙемде ошо милләттең абруйлы яҙыусыһымын, тип һанай алмайым.

"Мин эсеүемде ташланым" тигән яҙмаларым "Киске Өфө" гәзитендә баҫылып сыҡҡандан һуң мин төрлө характерҙағы бик күп хаттар алдым. "Эсеү ташлау ҙа булдымы батырлыҡ, алкаш, шунан үҙенә сәйәси капитал эшләмәксеңме? Әҙәм көлдөрөп яҙмаһаң да булыр ине...", тиеп яҙыусылар ҙа, шылтыратыусылар ҙа, йөҙәмә бәреп әйтеүселәр ҙә булды. Беләм мин ундайҙарҙы, таныйым һәм ғәфү итәм, эскене ташларға ихтыяр көсө етмәүселәр улар.

Шулай ҙа минең был аҙымымды хуплаусылар күберәк, барыбер. Шуларҙың икеһенә туҡталып китмәксемен. Хәйбулла районының Таштуғай ауылынан Фәриғә апай Күсәкованың хатынан өҙөк килтерәм: "Бығаса тиклем мин һеҙҙе шиғырҙарығыҙ, ғөмүмән, ижадығыҙ өсөн хөрмәт итә инем, ихласлыҡ бөркөлөп торған мәҡәләләрегеҙҙе яратып уҡый инем. Ә был яҙмаларығыҙ мине тетрәндерҙе. Көслө рухығыҙ, үҙегеҙгә ҡарата аяуһыҙ булыуығыҙ хайран итте. Бер аҡыл эйәһе әйткәнсә: "Иң ҙур еңеү - үҙ-үҙеңде еңеү". Дәрәжәгеҙҙе, абруйығыҙҙы юғалтыуҙан ҡурҡмай, күңел һандығығыҙҙы шар асып, бөтә серҙәрегеҙҙе ил менән уртаҡлашырлыҡ көс табырға, "мин эскесе булдым", тип әйтергә һәр кем баҙнат итмәҫ. Улай ғына ла түгел, һәр көнөгөҙҙө, газаптарығыҙҙы тасуирлап, Шешәбикә менән дуҫлығын өҙөргә теләүселәргә методик ҡулланма кеүек көнөштәр биреүегеҙҙе ҙур егетлек тип баһалайым. Быны тик көслө ихтыярлы ир-егеттәр генә булдыра алалыр. Рәхмәт һеҙгә, ихлас күңелдән эшләгән изгелегегеҙ менән бөтә Башҡортостандың ихтирамын яулағанһығыҙҙыр, моғайын..."

Мәләүеҙ районынан Фәүзиә апай Йәнтилинаның хатынан да өҙөк килтерәм: "Һеҙҙең "Мин эсеүемде ташланым" тигән яҙмаларығыҙ бик фәһемле. Уларҙы урыҫ теленә тәржемәләп, китап итеп баҫтырырға кәрәк ине. Сөнки һутлы башҡорт телендә яҙылған был һабаҡтарҙы күп кенә йәштәр уҡып аңлай алмаясаҡ. Был яҙмалар замандың яман сиренән - эскелектән ҡотолоуға ярҙам итеүсе һабаҡтар ғына түгел, ғөмүмән, әҙәм балаһына, ғүмерен әрәм-шәрәм итмәйенсә, нисек итеп дөрөҫ йәшәргә өйрәтеүсе әсбап та. Берсә ҡыуандым ошондай үҙебеҙҙең башҡорт егеттәре булыуына, берсә йәрәгем әрнене. Шундай көслө уй-фекерле, аҡыллы ир-аттарыбыҙ ваҡытында лайыҡлы баһа ала алмай, күптәре бик иртә китеп тә барҙы. Рәмил Дәүләтколов, Ғәбиҙулла Зарипов, Рәйес Түләк, Буранбай Искужин...

Ошо хәтле илһөйәр егеттәргә ижади дингеҙҙә ирек биреп, шарттар тыуҙырып йөҙҙөрөп ебәргәндә, улар күпме милләттәштәребеҙҙең аңын агартыр, зиһенен яҡтыртыр ине. Оло үкенес. Талантлары саф, эштәре халыҡ мәнфәғәте өсөн йүнәлтелгәнгә, күнегелгән ҡалыптарға һыймай, шуны емерә алмай, йә берәҙәккә әйләнә, йә иртә китә йәштәребеҙ. Уйлап ҡараһаң, батырҙары һәләк булған оло һуғыш барған кеүек. Ә иҫән ҡалып та, үҙ юлынан тайпылмай сәмләнеп эшләргә көс тапҡан һеҙгә уңыштар юлдаш булһын. Аллаһы Тәғәлә эшегеҙҙән риза булһын. Ғәфү итегеҙ, мин ябай уҡыусы, ихлас күңелдән яҙам. Сөнки яҙмайса булдыра алмайым..."

Һәр кемдең тормош юлына һалынып ҡуйыу ҡыш "мина" кеүек ул эскелек. Ошоларға һаҡһыҙ баҫып, башҡа милләттәштәрем һәләк булмаһын өсөн дә мин үҙемдең нисек итеп эскелектән ҡотолоуым хаҡында яҙырға булдым. Ә бит тап шуның арҡаһында милләтебеҙ үҙенең күпме аҫыл улдарын, йөҙөк ҡашы булырҙай шәхестәрен, ижадсыларын юғалтты. Бындай саҡта хатта ырыуыңдың оранын ҡысҡырыр хәлгә етәһең. Һүҙемде 1990 йылда яҙылған "Азатлыҡ" тигән шиғырымдағы юлдар менән тамамлап, һәр милләттәшемә, һәр кешегә тулы ҡанлы, айыҡ һәм бәхетле ғүмер теләйем:

Азат булсы ялған ғорурлыҡтан,
Хәмер йотоуҙарҙан -
ҙур хурлыҡтан!
Әмәлдәре берәү, ябай ғына:
Ялған ғорурлыҡты,
Шул хурлыҡты
Яра һуғыу Урал ҡаяһына...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ҺАБАҠТАР

# НИМӘ ОЯТЫРАҠ?



**Атайымдың ике туған ағайҙары күп булды. Шулар араһынан Хәлимулла апамды (әбйәлилдәр ата-әсәнән өлкән ир кешене апа ти) мин бик яраттым. Иплелеге, йомшаҡ, әммә тоғро һүҙлелеге, уҡымышлылығы өсөн халыҡ уны хөрмәт итте. Им-томо ла, өшкөрөү-тыны ла бик килешер ине. Мәрхүм булғанына бик күп йылдар үтеүенә ҡарамаҫтан, уны белгән-күргәндәр әле лә иҫкә ала, онотмай. Ә мин уны шундай һағынам, рухына бағышлап, аяттар уҡытам.**

Бына ошо апам, беҙҙең менән бергә йөрөп, үҙенә бесән эшләй. Шул йылы Ураҙа айы бесән мәленә тура килде. Апам, динле кеше булараҡ, ураҙаһын ҡалдырмай. Эҫе йәй көнөндә, өҫтәүенә, эштең ҡыҙыу мәлендә, ураҙа тотоуҙары, ай-һай, еңелдән булмағандыр!

Бер көн шулай төш ауыуға апам, салғы сүкергә тип, мин уйнап ултырған арбанан түшкә-сүкеште алып, урын йәйәлы ла эшкә керешә. Мин, арбанан төшә һалып, уның янына килеп, ҡыҙыҡһынып, салғы сүкегәнен күҙәтәм. Бәй, сүкеште еүешләр өсөн төкөрөп-төкөрөп ҡарай, тик төкөрөгө юҡ! Апам, аҡланған кешеләй: "Тамаҡ кипкән шул", - тигән була. Ә мин апамды шундай йәлләйем. Ҡапыл бер ҡарарға киләм: ярҙам итергә! Ауыҙымды тултырып төкөрөк йыйҙым да, апамдың сираттағы уныышһыҙ сүкеш еүешләргә маташыуын күреп, түшкә өҫтөндә ятҡан салғыға күлдәй итеп йәйелтеп төкөрөп ебәрҙем. Апам: "Ай, әттәгенәһе!" - тип әйтеп тә өлгөрҙө, әллә ҡайҙан килеп пәйҙә булған әсәйем: "Ах, тәртипһеҙ, ҡалай оят булды!" - тип, мине елтерәтеп ебәрҙе, берҙе элде лә, шикелле. Ғәрлегемдән, оятымдан оҙон үлән араһына боҫтом.

Ошо хәлдән һуң арыуыҡ ваҡыт мин апама күтәрелеп ҡарарға ла ҡыймай йөрөнөм. Хәҙер уйлап ҡараһаң, мин, алты йәшлек бала, салғыға төкөрөүемдән оялғанмын, ә бына алтмыш йәшкә етеп тә, оят белмәй, эсеп, урам буйлап һүгенеп, сәсе-башы туҙып йөрөгән апай-инәйҙәргә ҡарайым да, быларға бит хатта түшкә битенә түгел, кеше битенә ласҡылдата төкөрөү ҙә бер ни тормайҙыр, тип уйлап, тәндәрем эсәле-һыуыҡлы булып китә...

**Мәүҙиғә БАЙМӨХӘММӘТОВА.**
**Әбйәлил районы.**
*(№4, 2004 йыл).*

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Маҡсат - аңдың иң юғары кимәленә күтәрелеү

Әгәр алға барыуығыҙҙы үткән һанда яҙған бер нисә якорь тотҡарлап тора икән, алдағы өс көндә уларҙың береһен, артабан икенсеһен, шулай берәм-берәм юлығыҙҙан алып ташлағыҙ. Бының өсөн түбәндәге инструкцияны уҡығыҙ, нимә эшләргә икәнлеген яҡшы итеп иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ (тынысһыҙланыу бында миҫал итеп алынған).

Шәхескә кәрәкмәгән сифаттарҙы ҡайтанан программалаштырыу буйынса күнекмә:

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ, бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына: "Мин бигерәк тынысһыҙмын. Артабан тынысһыҙланырға теләмәйем. Һәр саҡ үҙ-үҙемә ышанысլы булырға теләйем. Көндән-көн ышанысլы була барам", - тип ҡабатлағыҙ.
- Үҙегеҙҙе тыныс түгелһегеҙ итеп күрегеҙ, һуңынан ошо картинаны онотторорус башҡа күрнештәрҙе күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Үҙегеҙҙе тыныс һәм ышанысլы итеп күрегеҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ, үҙ хәлегеҙгә ҡайтығыҙ һәм үҙегеҙҙе ышанысլы итеп тойоғоҙ.

Был күнекмәне ҡабатлап, кире сифаттарығыҙҙан арынығыҙ.

## Ҙур ҡыуаныс аңға бәйле

Шулай итеп, беҙ ҡыуанысҡа ҡамасаулаусы сифаттарҙан арындыҡ һәм артабан алға барырға әҙербеҙ.

Тормошта ҙур ҡыуаныс бары тик ҡыуанырға ҙур һәләт булғанда ғына мөмкин. Был аңдың үҫешен талап итә. Бындай үҫешкә аңды алдап ирешергә мөмкин. Әммә был трюкты эшләгәнгә тиклем, аңығыҙ һөҙөмтәле яуап бирһен өсөн, стандарт ҡараштыҡ ҡулланабыҙ. Хәҙер һеҙ ышанып булмаҫтай, әммә ысынбарлыҡта шулай булған тәжрибә тураһында уҡырһығыҙ. Уға ышаныу өсөн аңығыҙ юғары кимәлгә күтәрелергә тейеш.

Донъяның полиграф буйынса иң яҡшы белгесе Клив Бэкстер электроника ярҙамында үҫемлектәрҙең һәм кеше тәненең күҙәнәктәре кире һәм ыңғай фекерҙәргә, эштәргә ниндәй мөнәсәбәт белдергәнен асыҡлаған. Барыһы ла Бэкстер Нью-Йорк полицейскийҙары алдында полиграфта эшләү буйынса лекция уҡығандан һуң башланған. Ул урынын тәртипкә килтереп, бер ыңғай ошо прибор ярҙамында бүлмә үҫемлектәренә һибелгән һыуҙың күпме ваҡыт эсендә тамырҙан япраҡҡа күтәрелеүен асыҡларға булған. Япраҡтарға электродтарҙы беркеткән, үҙе яҙа торған ҡоролманы тоташтырған һәм һыуға сығырға булған. Шул ваҡыт үҙе яҙа торған ҡоролма ыңғай сипылдап ҡуйған. Бэкстерға был ҡыҙыҡ булып киткән. Ул һыу килтереп ҡойған, ҡоролма тағы ыңғай сипылдап тауыш биргән. Бэкстер аптырап ҡалған, үҫемлек унын уйын уҡыймы ни? Тикшереп ҡарау өсөн ул бер япраҡты яндырып ҡарарға булған. Был турала уйлап та өлгөрмәгән, ҡоролма кире импульс ебәргән. Шик ҡалмаған, ниндәйҙер бәйләнеш каналы аша үҫемлек унын уйын уҡыған.

Артабанғы тикшеренеүҙәр тәндең фекерҙе һиҙеп тороуын асыҡлаған. Тимәк, уйланырға урын бар.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

# ТВ ПРОГРАММАҺЫ



### 14 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
2.00, 2.50 Т/с "Пыльная работа". [16+]
3.40 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.29 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**10.55 Биатлон. Финал Кубка России и чемпионат России. Гонка преследования. Мужчины.**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 20.45 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Пароль знали двое". [12+]**
**3.00 Спектакль "Прерванная свадьба". [12+]**

### 15 МАРТА ВТОРНИК

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
2.00, 2.50 Т/с "Пыльная работа". [16+]
3.40 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.29 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Хазина". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Позвоните Мышкину". [6+]**
**2.45 Спектакль "Зятья Гюргюри". [12+]**

### 16 МАРТА СРЕДА

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
2.00, 2.50 Т/с "Пыльная работа". [16+]
3.40 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.29 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**10.55 Биатлон. Финал Кубка России и чемпионат России. Масс-старт. Мужчины.**
**12.30 Счастливый час.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Сокровища Ермака". [6+]**
**3.00 Спектакль "Белый пароход". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 17 МАРТА ЧЕТВЕРГ

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
2.00, 2.50 Т/с "Пыльная работа". [16+]
3.40 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.29 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Улыбка пересмешника". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Веселые гастроли на черном море". [12+]**
**2.45 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 18 МАРТА ПЯТНИЦА

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
1.50 Х/ф "Мелодия на два голоса". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 23.00 Автограф. [12+]**
**10.30, 16.30 "Вместе с наукой". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 4.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Д/ф "Человек Земли". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 3.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.00 "Замандаш". [12+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 5.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Я не оставлю тебя!" [12+]**
**2.15 Спектакль "Крах и отчаяние". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 19 МАРТА СУББОТА

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Х/ф "Мой чужой ребенок". [12+]
13.30 Х/ф "Только о любви". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Х/ф "Прости за любовь". [12+]
1.05 Х/ф "Не жалею, не зову, не плачу". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Д/ф "Аксакал". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "КультУра". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Памяти Хусаина Ахметова… Концерт. [12+]**
**19.00, 5.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Отдать концы". [16+]**
**2.30 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 20 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

**РОССИЯ 1**

5.20, 3.15 Х/ф "Формула счастья". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Х/ф "Работа над ошибками". [12+]
13.40 Х/ф "Только о любви". [12+]
17.50 Танцы со звёздами. Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Любовь на сене". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Д/ф "Люби, цени, знай". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Сулпылар". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Ай текә". [6+]**
**11.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". Концерт по заявкам телезрителей. [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.00 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Золотые страницы башкирской классики. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 3.15 Х/ф "Друзья из Франции". [12+]**
**1.15 Спектакль "Дама без камелий". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## *СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**15 март "Амеля"** (Н. Крашенинников, А. Балғазина инсц.). 12+
**16 март "Урал батыр"** (Башҡорт халыҡ эпосы буйынса). 12+
**17 март "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 16+
**18 март "Йәш ғаилә фатир эҙләй"** (М. Рощин), мөхәббәт-story. 16+
**19 март Премьера! "Әсмә"** (Р. Фәхретдинов, Ш. Шәкүрова инсц.), драма. 18.00 12+
**20 март "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 март "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Нил Саймон), трагикомедия. 16+
**17 март "Үәт, исмаһам, ахрызаман!"** (М.Багаев), комедия.16+
**18 март "Аҡ яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айтматов), драма. 16+
**20 март "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Өфө балалар филармонияһы сәхнәһендә:**
**19 март "Волк и семеро козлят"** (А. Рахманкулова). 11.00, 13.00 0+
**20 март "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). 11.00, 13.00 0+
**Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:**
**19 март "Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 12.00, 14.00 0+
**20 март "Маша и Медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**18 март "Һағынамын..."** Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **С. Низаметдиновтың тыуыуына 65 йыл тулыуға** арналған концерт. 6+
**19 март "Музыку слушаем вместе. Волшебные струны: арфа".** 11.00 0+
**20 март "Мультконцерт"** ғаилә өсөн тамаша. 15.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**18 март "Һырғалаҡ"** (А. Житковский), балалар баҡсаһынан күренештәр. 12+
**19 март "Ай! Горит!"** (Л.Нигматуллина), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**17 март "Капитанская дочка"** (А. Пушкин). М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры гастролдә. 17.00 12+
**18 март** БР-ҙың атҡаҙанған артисы **Рәмил Әүбәкировтың** юбилей кисәһе. 6+
**19 март Премьера! "Тормош - ҡуласа"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+
**20 март "Музыкальные сказки морского офицера"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+
**"Атты ектем! Айға осам..."** (В. Шукшин), ауыл комедияһы. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**14-18 март** Әбйәлил районында гастролдәр **"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+
**17-18 март Премьера! "Аленький цветочек"** (С. Аксаков), әкиәт. 10.00, 12.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Март (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (11) дүшәмбе | 6:06 | 7:36 | 13:30 | 17:18 | 19:15 | 20:45 |
| 15 (12) шишәмбе | 6:03 | 7:33 | 13:30 | 17:19 | 19:17 | 20:47 |
| 16 (13) шаршамбы | 6:01 | 7:31 | 13:30 | 17:21 | 19:19 | 20:49 |
| 17 (14) кесе йома | 5:58 | 7:46 | 13:30 | 17:22 | 19:21 | 20:51 |
| 18 (15) йома | 5:55 | 7:43 | 13:30 | 17:24 | 19:23 | 20:53 |
| 19 (16) шәмбе | 5:53 | 7:41 | 13:30 | 17:26 | 19:25 | 20:55 |
| 20 (17) йәкшәмбе | 5:50 | 7:38 | 13:30 | 17:27 | 19:27 | 20:57 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# "КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ!




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**9-сы һандағы сканворд яуаптары.**
**Горизонталь буйынса:** Сәғәт. Ҡарағай. Табын. Заман. Тәпәй. Алабама. Ғәлиә. Урман. Ыҡ. Әсе. Миәкә. Иле. Ҡапҡа. Мышы. Әй. Уймаҡ. Уайт. Һары. Ҡарағат. Шаран. Калипсо. Йәрәхәт.
**Вертикаль буйынса:** Ғилминур. Зәлифәкәй. Әйләнә. Ҡала. Акакий. Нағыш. Сират. Ихата. Ғәрифә. Бибкәйем. Атлас. Тейен. Оят. Тау. Ҡыуыш. Рота. Аҡыҡ. Йән. Арҡан.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# МӨХӘББӘТ ТУРАҺЫНДА

**Ошо көндәрҙә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында төрөк драматургы Нәзим Хикмәттең "Мөхәббәт тураһында легенда" пьесаһын сәхнәләштерҙеләр. Кешелек тарихы кеүек үк боронғо, әммә һәр заманда үҙ ителгән Фәрхәт һәм Ширин хаҡындағы хикәйәтте залды шығырым тултырған тамашасы ҡаршыланы.**

Мөхәббәт тураһында бихисап әҫәрҙәр ижад ителгән кеүек, уның асылын да һәр кем үҙенсә аңлай. Фәрхәт һәм Ширин тарихы ла тамашасыға был бөйөк хистең бихисап төрө барлығын сағылдырып, берҙән - һоҡланырға, икенсенән - уйланырға мәжбүр итте. Тәүге күренеш Әрзән батшабикәһе Мәхмәнәбануҙың инде 40 көн сирләп йән бирер сиккә еткән һеңлеһе Шириндың ғүмере өсөн көрәшеүе һәм үҙенең сибәр йөҙөн уның өсөн ҡорбан итеүе менән асылды. Туғандар араһындағы һөйөү бына шулай бер-береңә кәрәк саҡта терәк булыу һәм тәү сиратта яҡыныңды уйлау аша сағыла икән, тип белде тамашасы.

Үҙ эшенә мөкиббән ғашиҡ рәссам-ижадсылар, балаһын бер һүҙһеҙ аңлап торған һәм ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә әҙер атай-әсәйҙәр, биргән һүҙенә тоғролоҡ һаҡлаған һәм халҡына, иленә бар ғүмерен бағышлаған ирегеттәр, үҙен генә яратҡан һылыу ҡыҙҙар, тышҡы ҡиәфәткә ҡарап йә күңел матурлығы өсөн һөйгәндәр - мөхәббәттең бик күп төрлө сағылышы бер спектаклдә тупланған булып сыҡты.

Яңы спектакль Силәбенән килгән ҡуйыусы режиссер Олег Иванов етәкселегендә сәхнәләштерелгән. Көнсығыштың сихри моңдарын композиторҙар Илшат Яхин һәм Александр Карташов яҙған, серле биҙәкле батша һарайҙарын һәм короллоҡ килгән тау-ташлы ҡырҙарҙы ҡуйыусы рәссам Лилиә Хисмәтуллина күҙләгендә ҡараны тамашасы, геройҙарҙың хәрәкәттәре буйынса хореограф Александр Родионов эшләгән. Әҫәрҙе башҡорт теленә Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рәмзил Сәлмәнов тәржемә иткән. Туғаны өсөн йәнен бирергә әҙер мәрхәмәтле Мәхмәнәбануҙы Башҡортостандың халыҡ артисы Рушанна Бабич бик оҫта уйнаны. Һылыу Ширин ролендә Зәриә Моратова, оҫта ҡуллы һәм әйткән һүҙенә тоғро Фәрхәтте Вадим Ҡылысов һынландырҙы. "Мөхәббәт тураһында легенда" спектакле Милли йәштәр театрында ҡуйылыуы был тема һәр быуын кешеһе өсөн мәңгелек булыуын сағылдырҙы.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

# ЙӘШ СӘСӘНДӘР ЯРЫША

**Башҡортостанда "Урал балалары тауышы" республика йәш сәсәндәр конкурсының беренсе турына ғаризалар ҡабул ителә. Был хаҡта Мәҙәниәт министрлығының матбуғат секретары Зилә Баймырҙина хәбәр итте.**

Конкурста 7-10, 11-14 һәм 15-18 йәшлектәр ҡатнаша. Улар башҡорт телендә һәм уның диалекттарында эпостарҙан өҙөктәрҙе яттан һөйләргә тейеш. Сығыш 4 минуттан артмай. Милли кейемдең булыуы мотлаҡ, музыка ҡоралдарын ҡулланырға рөхсәт ителә. Эпик әҫәрҙәр һамаҡлап башҡарыла. Конкурс номинациялары "Урал батыр", "Аҡбуҙат", "Ҡуңыр буға", "Аҡһаҡ ҡола", "Ҡара юрға", "Алпамыша", "Иҙеүкәй менән Мораҙым", "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу", "Заятүләк менән Һыуһылыу", "Таһир менән Зөһрә", "Бүҙйегет" һәм башҡа башҡорт эпостарына тап килә. Беренсе этап онлайн-режимда үҙғарыла. Ҡатнашыусы ғаризаһын һәм видеояҙмаларын 2022 йылдың 16 мартына тиклем NDVNovikov1981@mail.ru электрон адресына ебәрергә тейеш.

ҺОРАУ - ЯУАП

## ТАНЫҠЛЫҠТЫ ОНОТҺАҢ...

**➔ Күрше ауылға йомош менән барғанда үҙем менән машина йөрөтөүгә таныҡлығымды алырға онотҡанмын. Юлда полиция хеҙмәткәре туҡтатып, 500 һум штраф һалды. Был дөрөҫмө икән?**

- Машина менән идара иткәндә таныҡлыҡ ҡына түгел, ә шулай уҡ паспорт, автомобилгә документтар һәм страховка ҡағыҙы мотлаҡ үҙегеҙ менән булырға тейеш. Был хаҡта РФ Административ хоҡуҡ боҙоу тураһындағы кодексы (КоАП РФ) 12.3-сө статьяһының 1 өлөшөндә билдәләнгән. Уға ярашлы, әгәр ҙә водителдең таныҡлығы эргәһендә юҡ икән, полиция протокол төҙөй һәм 500 һум күләмендә штраф яҙа. Тағы ла шуныһы: машина йөрөтөүгә таныҡлығы янында булмаһа, водитель машинаһында артабан юллана алмай. Әгәр ҙә таныҡлыҡ менән бер рәттән страховка полисы ла өйҙә онотолоп ҡалһа, штрафтың күләме ике тапҡырға арта.

## ДУҪ ТИГӘНЕМ...

**➔ Былтыр дуҫымды фатиримда даими теркәүгә индергәйнем. Быйыл уның ҡыҙы тыуған һәм ул миңә әйтмәйенсә, уны ла минең фатирыма теркәгән. Фатирҙы тиҙ арала һатырға кәрәк, дуҫым теркәүҙән төшөүҙән баш тартты. Үҙе бөтөнләй икенсе урында йәшәй. Миңә нимә эшләргә була?**

- Уларҙың әлеге фатирҙа оҙайлы ваҡыт йәшәмәүен иҫәпкә алып, тик суд ҡарарына ярашлы ғына теркәүҙән төшөрөргә мөмкин. Һеҙгә дуҫығыҙҙың фатир менән ҡулланыу хоҡуғын юғалтыуын, ә ҡыҙының был хоҡуҡҡа бөтөнләй эйә булмауын таныуҙы һорап, судҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Судҡа тиклем үк уларҙың был фатирҙа йәшәмәүен иҫбатлаусы дәлилдәр йыйырға кәрәк (күршеләрҙән яҙма рәүештә алынған документ, участка полиция хеҙмәткәре йәки идара итеүсе ойошма хеҙмәткәре менән теркәлгән урын буйынса йәшәмәгәндәрен күрһәткән акт). Шулай уҡ, әгәр ҙә һеҙгә билдәле булһа, уларҙың даими йәшәү урынын да күрһәтеү кәрәк булыр.

РУХИӘТЕБЕҘ

# ҠУРАЙ ҒЫНА ТИҺЕҢМЕ ӘЛЛӘ?

## Ҡылҡумыҙ, нәғрә, ятаған, шөгөрөбөҙ ҙә бар беҙҙең!

**Әгәр ваҡытында Ғата Сөләймәнов ҡурайҙы аяҡҡа баҫтырыуға, таратыуға көс һалмаған булһа, әлеге көндә беҙ халыҡ йырҙарын тальян гармунына ҡушылып йырлаған булыр инек. Үкенескә ҡаршы, бөтәбеҙгә лә яҡшы таныш музыка ҡоралдарын даими пропагандалап тормағанда, уларҙың юғалыуына, онотолоуына юл ҡуйыуыбыҙ бар. Ә инде хәтеребеҙҙән юйылып барған музыка ҡоралдарына килгәндә, мәсьәлә күпкә ҡатмарлаша. Мәҫәлән, нәғрә, ятаған, шөгөр тигән атамалар күптәребеҙ өсөн бер ни ҙә аңлатмаған һүҙҙәр кеүек яңғырай, йәштәрҙең генә түгел, ололарҙың да был инструменттар тураһында ишеткәне лә юҡ. Ләкин яңыраҡ ҡылҡумыҙҙың тергеҙелеүе һәм Халыҡ музыка ҡоралдарының милли оркестрына индерелеүе киләсәктә башҡа онотолған музыка ҡоралдарының да аяҡҡа баҫтырылыуына ышаныс тыуҙыра.**

Фән киңлектәрен байҡап, буҙ тип аталған музыка ҡоралына күҙ һалайыҡ. Тарих белгестәре фаразлауынса, беҙҙең эраға тиклемге беренсе мең йыллыҡтың тәүге яртыһында беҙҙең ерҙәр аша боронғо кельттар үтеп киткән. Был күптәнге сәйәхәтең бер ниндәй эҙе лә ҡалмаған тиерлек, әммә кельттарҙың үткән юлында йәшәгән егерменән артыҡ халыҡта бөгөнгө көнгә тиклем буҙ, йәғни волынка тигән инструмент һаҡланған. Шотландтар ҙа уны буҙ тип атай. Тимәк, беҙҙең буҙыбыҙҙың йәше ике мең ярым йылдан ашыу, ә уны һаҡлап алып ҡалған Дим буйы башҡорттары - боронғо кельттарҙың тоҡомдары! Һуңғы ваҡытта беҙҙең халҡыбыҙҙа ирланд һәм шотланд мәҙәниәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уяна артты. Бейеү сәнғәтенә килгәндә иһә, был ҡыҙыҡһыныу хатта "башҡортсалаштырып" ирланд халҡы бейеүҙәрен сәхнәгә ҡуйыуға әйләнеп китте. Был киренешкә юл ҡуймаҫҡа, ә, киреһенсә, ошо ҡыҙыҡһыныу тулҡынында үҙебеҙҙең милли музыка ҡоралыбыҙ булған буҙҙы аяҡҡа баҫтырыу зарур. Буҙ менән бергә шөгөр тигән музыка ҡоралын да тергеҙеү ҡыйын булмаясаҡ, сөнки был инструменттар үҙ-ара оҡшаш.

Ятаған тип аталған ҡыллы инструментыбыҙ ҙа айырым иғтибар талап итә. Киләсәктә цитраға оҡшаған был музыка ҡоралын тергеҙгәндә, был ҡоралда уйнау оҫталары ла килеп сығыр ине. Ғөмүмән, һәр бер ҡоралдың үҙ үҙенсәлектәре булыуҙан тыш, уға ҡушылып йырлаған башҡарыусыға ла икенсе төрлө талап килеп тыуа.

Тағы ҡурайға әйләнеп ҡайтайыҡ. Әгәр ҙә ул юғалған булһа, тальян гармунына ҡушылып, бер нисек тә оҙон көй йырлап булмаҫ ине. Тора-килә йырҙарыбыҙ ҡыҫҡарып бөтәр ине. Думбырабыҙ юғалһа, ҡобайырҙарыбыҙ ҙа юғалыр ине. Кем белә, бәлки, боронғо музыка ҡоралдарын аяҡҡа баҫтырыу менән йыр башҡарыуҙың онотолған төрҙәре лә иҫкә төшөр?

Башҡорт көйҙәрен донъя халыҡтарыныҡы менән сағыштырғанда, бер һығымтаға килергә мөмкин: халҡыбыҙҙың музыка ҡоралдары араһында һүкма инструменттар бик ҙур роль уйнаған, сөнки көйҙәребеҙҙең ритмик структураһы уҡ быға ҡаҡта һөйләй. Нағара/нәғрә, дөмбөрҙәк һәм дөңгөр һымаҡ инструменттарҙы аяҡҡа баҫтырыу һәм шундуҡ фольклор ансамблдәренә индереү бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡ тыуҙырмаясаҡ, сөнки һүкма инструменттар яһалышы яғынан да, башҡарыу өсөн дә башҡа инструменттарға ҡарағанда күпкә ябай.

**Таңсулпан БУРАҠАЕВА.**

*(№36, 2004 йыл).*

**РЕДАКЦИЯНАН...**

**Гәзитебеҙ сыға башлаған тәүге йылдарҙа ошо онотолған музыка ҡоралдарын тергеҙеү тураһында бик йыш яҙыҡ. Милләтебеҙҙең музыка ҡоралдарының күплеге тураһында ғына түгел, хатта һәр береһенең ентекле һүрәтләнеше, яһалыу технологияларына тиклем мәҡәләләр баҫылды. Бөгөнгө көндә республикабыҙҙа ошо музыка ҡоралдарын яһаусы, сәхнәләрҙә яңғыратыусы профессиональ һәм һәүәҫкәр оҫталар, башҡарыусылар бихисап. Йәш быуын вәкилдәре буҙ, һорнай, шөгөр, дөңгөр, ятаған, нәғрә тигән инструменттарҙы ишетеп тә, күреп тә белә, тиергә була. Был эш артабан да дауам итер, тигән ышаныстабыҙ.**




АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИР БАРҘА...

## ҡатын алға сыҡмаһын

Ат барҙа бейә сапмаһын, ир барҙа ҡатын алға сыҡмаһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Эмансипация - ул ҡатын-ҡыҙҙың етешһеҙлектәренә ирҙәрҙеке лә ҡушылғанда була торған хәл-торош.

**(Аркадий Давидович).**

Хоҙай ҡатын-ҡыҙҙы ирҙәр ятаһын өсөн - матур итеп, ул үҙе ирҙәрҙе ятаһын өсөн йүләр итеп яралтҡан.

**(Фаина Раневская).**

Ир кеше, ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙға ғына түгел, унын туғандарына ла өйләнә.

**(Ван Гог).**

Ир менән ҡатын айырым-айырым йәшәһә... бәхетле ғаиләләр күберәк булыр ине.

**(Фридрих Ницше).**

Хоҙайҙан тормошонды еңеләйтеүҙе түгел, һине көслө итеүҙе һора.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

Теләктәренә сик ҡуйырға ынтылыу - аҡылһыҙлыҡтың иң юғары нөктәһе.

**(Дени Дидро).**

Кисәге күнел асыуҙар иртәгәге бурыстар менән тамамланыуы бар.

**(Арнольд Тойнби).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Был Остаздан өйрәнергә, һабаҡ алырға донъяның төрлө илдәренән шәкерттәр йыйыла. Бына бер саҡ шәкерттәре Остазға угрылыҡ менән шөғөлләнгән бер шәкертте фашлауҙары тураһында хәбәр килтерә һәм уны уларҙың араһынан ҡыуыуҙы һорай. Әммә Остаз был хәбәргә иғтибар итмәй. Һуңыраҡ баяғы уғры шәкерттең тағы ла бер ҡырын эше асыла, әммә Остаз тағы ла был хәлдә иғтибарһыҙ ҡалдыра. Шәкерттәр Остаздарының был битарафлығына бик нык аптырай һәм асыулана. Улар Остазға: "Әгәр ҙә был уғры шәкертте уҡыуҙан ҡыумаһағыҙ, беҙ кәмөкләп һеҙҙән уҡыу йортон ташлап китергә мәжбүр буласаҡбыҙ", - тип хат яҙалар. Хатты уҡығас, Остаз шәкерттәрҙең барыһын да бергә йыйя һәм былай ти:**

**- Һеҙ барығыҙ ҙа аҡыллыһығыҙ. Һеҙ нимә насар, нимә яҡшы икәнен айыра беләһегеҙ. Шуға ла һеҙ үҙегеҙ теләгән башҡа уҡыу йортона китә, уҡый алаһығыҙ. Ләкин был хәҡиҡәт юлынан яҙған шәкерт яҡшыны яманДан айыра белмәй. Уны был белемгә мин өйрәтмәһәм, кем өйрәтер? Һеҙ икенсе уҡыу йортона киткәндә лә был шәкерт бында ҡаласаҡ...**

**Уғры шәкерттең күҙҙәренә йәш тығыла. Урлашыу теләге шунда уҡ юҡҡа сыға..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22010

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ"
нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
11 март 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 299